ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

31-6
март - апрель
(буранай - алағарай)
2018
№ 13 (795)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Көршәк ватылғас түгел,** ватылмаҫ элек киҫәтергә кәрәк! 4



**Әл Иҙриси басджирттары,** йәғни XII быуатта Европаға билдәле Башҡорт иле тураһында 7



**Халҡыбыҙ рухын...** өҫтөбөҙҙәге кейемебеҙ ҙә һаҡлай бит 8-9



**Быға баймаҡтарҙың ғына** башы етә! 12



**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 1 апрелдән 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 560 һум 82 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары - 505 һум 08 тингә, 50673 индексла (юридик ойошмалар һәм предприятиелар) "Киске Өфө"гә 590 һум 82 тингә яҙыла һәм квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, матур китаптарға эйә була алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Тормошобоҙҙағы ниндәй хәл-күренештәр көлкө уята?

***Марат КӘРИМОВ, Башҡортостандың халыҡ шағиры:*** Беренсе апрелде Көлкө көнө тип йөрөтәбеҙ, әйтерһең дә, башҡа көндәрҙә көлкө юҡ. Үҙегеҙгә лә яҡшы мәғлүм, йәмәғәт, шундай мәҙәк замандар килде: көлөп өлгөрөп булмай - һәр көн үҙе менән мәҙәк тә, ғибрәт тә хәлдәр алып килеп кенә тора. Мин быны үҙемдең тормошҡа ҡарашымдан сығып әйтәм. Мәҫәлән, һуңғы ваҡытта мин көлөп күңел асыу өсөн комедиялар ҡарарға театрҙарға йөрөмәй башланым. Сөнки комедияны өйҙә диванға ятып ҡарайым. Бына 4-5 ай инде телевизорҙа билдәле актер Армен Джигарханян менән уның йәш бисәһе араһындағы низағты тикшерәләр. Әле булһа ахыры юҡ, оҙаҡламай ул бер заман беҙ йылдар буйы ҡараған "Санта-Барбара" сериалын ҡыуып етәсәк. Ә был эш бер-ике суд ултырышында ҡаралып та хәл ителер ине бит, юғиһә. Был "сериалдан" башҡа ла "фантазияһы" бай 1-се каналдың, тик сәйнәнеүҙәре теге йәки был ғаиләнең ыҙғыштарынан, ир менән ҡатын түшәгендә соҡсоноуҙан ары китә алмай: кем кем менән йоҡлаған, кем балаһы кемдеке булырға тейеш һ.б. Быларҙы ауыл ғәйбәтселәре лә һөйләүҙән оялыр ине, буғай.

Һуңғы ваҡытта тағы ла ТВ экрандарында снарядтар шартлай, хәрби самолеттар башҡа тейер-теймәҫ выжлап осоп китәләр, яңы танктар ҡаршылыҡтарҙы емерә. Бер ҙә көлкө түгел, тиерһегеҙ. Эйе, сөнки ҡорал башҡаларҙа ла етерлек.

Бөгөнгө халыҡ-ара хәл ике һаңғырау хаҡында көләмәсте иҫкә төшөрә: "Балыҡҡа китеп бараһыңмы әллә?" "Юҡ, балыҡҡа китеп барам". "Ә-ә-ә, мин һине балыҡҡа китеп бараһың икән, тип торам". Был "диалог"ты Америка менән беҙҙең ил араһында нисәмә йыл дауам иткән мөнәсәбәттәргә оҡшатам. Ике яҡтың да бер-береһен тыңларға теләмәүе ошо ике һаңғыраузың фәҡәт үҙҙәрен генә ишетеүенә тиң бит. Аңлашыуға, айыҡ аҡыл тантанаһына, тыныслыҡҡа табан кем аҙым яһар?.. Минең фекер шул: тормошобоҙҙа сәләмәт һәм ихлас көлкөгә генә урын ҡалһын ине, әсенеп, әрнеп көләүҙәр туйҙырҙы! Ә бит ғалимдар раҫлауынса, сәләмәт көлкө күңелде күтәреп кенә ҡалмай, ғүмерҙе оҙайта ти хатта. "Бер көләүең - үҙе бер ғүмер", тип белмәй әйтмәгәндәрҙер. Ғүмерҙе оҙайта торған дарыу уйлап тапмағандар әле, ундай витамин - үҙебеҙҙә. Берберебеҙгә йылмайып ҡарау, дуҫтарса шаярыу, ихлас юмор һәм көләү - ана шул витаминға тиң дә инде. Көләйек, туғандар, сәләмәт , оҙон ғүмерле булайыҡ!

**(Дауамы 2-се биттә).**

БАШ ҠАЛАМ

# ҺУПАЙЛЫЛА...

## өлгөлө парк буласаҡ

**18 мартта Рәсәй Президентын һайлауҙар менән бергә Өфө ҡалаһында йәмәғәт урындарын төҙөкләндереү буйынса дизайн-проекттарға тауыш биреү ҙә үткәрелде. Беҙ ғаиләбеҙ менән Октябрь районындағы "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркын, Ҡариҙел ярын төҙөкләндереү, М. Рыльский урамында Арбат булдырыу өсөн тауыш бирҙек.**

Ҡашҡаҙан паркы юл ыңғайы булғас, унда былтыр башҡарылған эштәрҙе күрә йөрөнөк. Әле бына рейтингта беренсе урынға сығып, финанслау иң беренсе сиратта бүленәсәген белгәс, ҡыуанысыбыҙҙың сиге булманы. Быйыл, Алла бойорһа, Ҡашҡаҙанда йәйге волейбол майҙансыҡтары, тамашасылар өсөн трибуналар, тренажерҙары булған спорт майҙансыҡтары, велосипедсылар юлдары эшләнәсәк, тип вәғәҙә итәләр. Сөнки был биҫтә - йәштәр биҫтәһе, йәштәр, балалар, спорт менән шөғөлләнеүселәр бик күп. Быйылғы Ҡышҡы Олимпиадала ҡатнашыусы Антон Бабиков та Һупайлыла йәшәй.

Икенсе яҡтан, микрорайонда мотлаҡ йәшел зона кәрәк ине. Ҡашҡаҙандағы реконструкция был проблеманы бер аҙ хәл итергә этәргес булыр, тип уйлайбыҙ.

Ғөмүмән, парктың яңы концепцияһын булдырыу урындағы халыҡ фекерен иҫәпкә алып, уларҙың киләсәктә мәҙәниәт һәм ял урынын нисек күрергә теләүҙәрен асыҡлауҙан башланды. Шуға был проектты халыҡ ҡатнашлығындағы эшмәкәрлек, тип әйтергә мөмкин. Киң мәғлүмәт саралары белдереүенсә, паркта сәхнәһе һәм амфитеатры булған төрлө саралар үткәреү урыны, мәҙәниәт үҙәге, скейт-парк буласаҡ. Быға тиклем аттракциондар булған зона асыҡ инклюзив балалар уйын майҙансығы менән тулыландырыласаҡ. Күлдең яр буйҙарын күҙәтеү майҙансыҡтары менән йыһазландырырға вәғәҙә итәләр. Ҡыҫҡаһы, тиҙҙән Һупайлы биҫтәһендә баш ҡалала өлгө булырлыҡ беренсе парк барлыҡҡа килеренә ышанабыҙ һәм шуның өсөн тауыш бирҙек тә инде.

**Зәлиә РӘХИМОВА.**









12+

✔ *Кем майлы ҡалъя төртә - шул дуҫ һәм дә иптәш. Бергә урлап, бергә байып, океан аръяғына аҡсаларын бергә йәшереп, бында һин дә мин дөрөҫ хәбәр һөйләп йөрөгән ҡайһы берәүҙәргә бөтөн мир сәпәкәй итеп көлә түгелме һуң?*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Тормошобоҙҙағы ниндәй хәл-күренештәр көлкө уята?



**(Башы 1-се биттә).**

***Камил ФАЗЛЕТДИНОВ, яҙыусы-сатирик, Бәләбәй районы Туҙлыҡуш ауылы:*** Беҙгә, совет осоро тәрбиәһен алып үҫкән быуынға, бөгөнгө көндөң көлкөһө һәр аҙымда осрап тора. Әйтәйек, уҙған быуаттың 80-се йылдарында яҡты киләсәккә - коммунизмға аяҡ атлап инергә кирза итектәребеҙҙе гуталинлап әҙерләп ҡуйғас ҡына, тамаҡ ярып, "ҡыуып етербеҙ, уҙып китербеҙ Американы" тип йырлап йөрөгәндә, ҡапылдан социалистик илебеҙ ҡантәрәмә килде. Тимәк, эшкинмәгән... Шуға ла бөгөн үҙебеҙ ең һыҙғанып капитализм төҙөп ятабыҙ. Завод-фабрикаларҙы хәҙер, кирерһенсә, капиталистарға, колхоз баҫыуҙарын алпауыттарға тотторҙоҡ. Әйҙә, һыпырһындар тирҙәрен. Ә беҙгә, пенсионерҙарға, хөкүмәт пенсияны өйгә үк килтереп бирә, рәхмәт яуғыры. Ғүмер буйы эт һуғарып йөрөгәндәр ҙә ала ҡайырып. Баш ватып, юҡҡа уҡып йөрөлгән, тип әрләп алам үҙемде. Көлкө лә килеп китә бәгзе бер дин әһелдәренә ҡарап. Ленинизм ҡиблаһы яңылыш тип табылғас, элекке партком, райком секретарҙары партбилеттарын сәлләгә алыштырҙы ла ҡуйҙы бит "һә" тигәнсе. Элек үҙҙәре тоғро хеҙмәт иткән совет власы адресына таш ырғытыуҙан да тартынмайҙар һәм дөрөҫ эшләйҙәр: үлгән арыҫлан ҡурҡыныс түгел. Шунан тағы нисек көлмәйһең: берәү килеп, беҙгә ҡараны аҡ тиһә лә ышанырға ғына торабыҙ бит! Һуң, уйлап ҡарағыҙ: элек ғәйепле-ғәйепһеҙен яза рәүешендә туҡмай-туҡмай Себер оҙатҡандар, ә бөгөн халыҡ үҙе теләп шунда атлығып тора.

"Кеше - кешегә дуҫ, иптәш, туған" принциптары ла яңыса яңғыраш алды бөгөн. Кем майлы ҡалъя төртә - шул дуҫ һәм дә иптәш. **Бергә урлап, бергә байып, океан аръяғына аҡсаларын бергә йәшереп, бында һин дә мин дөрөҫ хәбәр һөйләп йөрөгән ҡайһы берәүҙәргә мин генә түгел, бөтөн мир сәпәкәй итеп көлә түгелме һуң?** Бына шунан килеп сығa ла инде ярлы кешенең - бай, ә байҙың ярлыға "әүерелә" алыу һәләте. Билләһи, быға мин үҙем шаһит хатта. Күптән түгел Туҙлыҡуш ауылы тарихын яҙып, китап итеп баҫтырырға булғас, пенсионерҙарыбыҙҙың күпселеге хәләл һумдарын биреп, матди ярҙам күрһәтте, рәхмәт яуғырҙары. Текә машинаға ултырып ҡайтҡан Себер байы ғына бер тин дә сығарманы. "Һиңә бирәйемме, газ менән утҡа түләйемме?" тине, беҙҙеке ише ун йорт һыймалы үҙенең хан һарайына ымлап. Быныһы ла бөгөнгөбөҙҙөң бер ғибрәте: иларғамы, көлөргәме? Бөгөнгөбөҙ тормошонан тағы бер метаморфоза: бала һаны етмәй, тип бәлә яғып, ауыл мәктәбен, балалар баҡсаһын, унан ары хатта фельдшер-акушер пунктын да шарт ябып ҡуйҙылар. Әйтерһең дә, ауыл халҡы күҙле бүкән уларға. Хәҙер юғарынан ҡабат асырға тигән фарман булғайны ла, ауылға ҡайтып эшләргә теләүсе юҡ, белгестәрҙе миллион һум вәғәҙәләп тә ҡайтара алмайҙар, шуға нисек көлмәйһең? Әллә иларғамы был замана ғибрәттәренә ҡарап?

Беҙҙең илдә социализм менән капитализм, ғөмүмән, ҡауышып йәшәй, буғай. Дөйөм йәмғиәттә капитализм ҡотороп сәскә атһа, айырым өлкәләрҙә, шул иҫәптән пенсия тәьминәтендә, социалистик тигеҙләү хөкөм һөрә: ғүмер буйы балалар уҡытҡан юғары белемле уҡытыусы ла, ябай ҡарауылсы ла компенсация һөҙөмтәһендә бер тигеҙ пенсия ала. Ул ғынамы, гәзиткә мәҡәлә яҙып, гонорарын ала ҡалһаң, компенсациянан ҡолаҡ ҡағыуың да ихтимал. Бына шулай ғәжәп тә, мәҙәк тә ул бөгөнгө көн хикмәттәре...

***Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА, журналист, шағирә, Бөрйән районы:*** Иларға йә көлөргә мәжбүр иткән хәлдәр тулып ята инде ул тормошобоҙҙа. Һөйләйем әле бер нисәһе тураһында. Күрше районДың бер ауылында булған хәл. Өс-дүрт ир эсеп ултыралар, ти. Үтеп барыусы "Нимә көпә-көндөҙ эсеп ултыраһығыҙ?" тигәс, тегеләр: "Бына, "Беларусь" тыуҙы, шуны йыуабыҙ", тип яуаплағандар. "Ҡайҙа һуң тракторығыҙ?" тигәс, ҡумәк көлөү яңғыраған. Баҡһаң, был ауылда әсәлек капиталына һәр ғаилә тиерлек трактор ала икән. Ир-аттың ғаиләлә икенсе бала тыуыу ҡыуанысын, йәғни "трактор тыуыу"ҙы йыуып ултырыуҙары булған тегеләрҙең.

Йәнә бер ирҙең икенсе бала табырға ҡатынын өгөтләгәнен дә лаҡапҡа әйләндергәндәр. "Өй башы ла, машина ла туҙҙы, һин нимә уйлайһың?" тигән лаҡап йөрөй бер ауылда. **Күп ғаиләләрҙә ата-әсә бала өсөн аҡса тапһа, бәғзеләре аҡса өсөн бала таба икән дә...**

Бөгөнгө тормош күренештәренән тағы бер "көлкөлө" ғибрәт: ихатаһында тауыҡ ҡына тотҡан яңғыҙ инәй урамда ике биҙрә ашлыҡ һатып ала ла, тоҡҡа һалып, өйөнә юллана. Артынан башланғыс синыфта уҡыған ике малай ҡыуып етә. "Өләсәй, ҡана, үҙебеҙ алып барып ҡуйыйыҡ", тиҙәр. "Юҡ-юҡ, ҡайтып етеп барам бит инде, ауыр түгел ул", тип, инәй тоғон бирмәй тартҡылашһа ла, малайҙар көсләшеп, тоҡто инәйҙең иңенән һалдырып алып, өйөнә илтәләр. "Һай, афариндар!" тип малайҙарҙың изгелеге өсөн ҡыуанып, ошо урында нөктә ҡуйғанда ла булыр ине. Ҡапҡа төбөнә барып еткәс, инәй, ауыл гәҙәте буйынса, ярҙамсыл балаларға кәнфит һуҙа. **"Юҡ, кәнфит кәрәкмәй, икебеҙгә лә 20-шәр һум бир!" тип тормаһынмы "игелекле" балалар...**

Өсөнсө һабаҡ. Әсәйем һуғыш алдынан донъяға килеп, бөтә бала сағын ауыр һуғыш йылдары йотҡан быуын вәкиле. Шуғалыр, һәр нәмәгә самалап тотона. Бер беҙгә килгәнендә минең яңы тун алып кейгәнемде күргәс, бөтә аҡсаңды сепрәккә тығып ултыраһың, артыҡ аҡсаңа лутсы өйөңә нәмә ал, тиеберәк һүҙ ҡатты. Бер бәлтәне әллә нисә йыл кейһәк тә бер нәмә лә булмаһы, тип тә өҫтәгәс, яуап бирмәй түҙмәнем. "Минең өйөмә дуҫтарым килә лә, туғандарым, яҡындарым килә, ә бөтә "дошмандар" урамда бит, әсәй, һыр бирергә ярамай," - тип был һөйләшеүҙе көлкөгә борҙом. Әйе, әсәйҙең һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар - артыҡ күп шул хәҙер кейем. Тик уның һайын әҙәм балаһы яланғаслана бара - йәй булһа, ҡыҙҙар кендек күрһәтеп, йә тишек салбар кейеп йөрөй. **Әүәле ярлы яманып ҡыуанһа, бөгөн, кирерһенсә, бөтөндән йыртыҡ яһап кейәләр...** Бына шундай күренештәргә ҡарап, күҙ йәштәре аша көлөргә генә ҡала инде...

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Бөгөнгөнән йыш ҡына үҙ-ара көлөшөп алабыҙ ҙа ул, тик бына асыҡтан-асыҡ, гәзит битендә көлөү килешерме икән һуң (һайлауҙарҙан һуң, тейем дә)? Нисек кенә булғанда ла, тәңкит тигән нәмәнең ниндәй генә замана ла йәшәргә хоҡуғы барҙыр ул, тип үҙемде батырландырып та ҡуям, бер яҡтан. Ғүмер буйы эшләп тә, хәйерсе аҡсаһына йәшәп ятҡан кеше булараҡ, минең һүҙ ни шул пенсия хаҡында инде, башҡа ни әйтәһең. Бер мәрәкә һөйләп көлдөрөп китте әле кисә әхирәтем. Күршеһендә йәшәгән әбей менән бабай 50 мең аҡсаны бүлешә алмай, һуғышып киткәндәр икән, тәүбә! "Өйҙә шунсама аҡса тотҡас, ябай ғына пенсионер түгелдер инде улар", тигән шикле версиямды әхирәтем бик тиҙ юҡҡа сығарҙы: һуң улар бит иләнмәгән-һуғылмаған пенсия, йәғни пенсия ике тапҡырға артып, 25 мең тәшкил итәсәк, тигән хәбәрҙе ысынға алып, киләһе айҙан уны нисек тотонорға тигән мәсьәләне тыныс хәл итә алмай, талашып киткәндәр булып сыҡты. Быңдай хәбәрҙе мин дә ҡолаҡ осо менән генә ишеткәндәй булып ҡалғайным, тик мөғжизә көтә-көтә ышаныс ҡалмағанлыҡтан, бер ҙә генә илтифат итмәнем һәм хәҙер ҡыуанам: дөрөҫ эшләгәнмен! Юғиһә, мин дә унсама аҡсаны ҡайҙа итергә белмәй аптыранған булыр инем бит. Бер аҙ һыуынғас, әбей менән бабай гәзиткә күҙ һалһалар, бөгөн ҡайнар вәғәҙәләнгән "йылы ғына" пенсия.... 2030 йылда ғына шул дәүмәлле буласаҡ икән дә, үәт ҡороғоро! **Иҫәпләп ҡарағас, был байғош пенсионерҙар ҡайғыға ҡалған: "Ул яҡты киләсәк - 2030 йылға тиклем беҙ иҫән-имен булабыҙ, әллә юҡ..." - тип һөйләшәләр, ти.** Шунда ғына аңлаған, ниһайәт, улар: удар биш йыллыҡтар менән йәшәгән замандар булған ул элгәре лә, тик ул йылдар "коммунизм" тигән һабын ҡыуығы булып ҡуйҙы шул... Бушҡа үткән ғүмерҙәрен йәлләп, әбей менән бабай инде татыу йәшәргә, теләһә ниндәй һабын ҡыуыҡтарына ышанмаҫҡа бер-береһенә вәғәҙәләр биреп, ант итешеп, бөгөнгө көндә булғанын тартып-һуҙып еткерергә тырышып, татыу ғына сөкөрҙәшеп йәшәп яталар, ти...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов төбәктә коррупцияға ҡаршы көрәш буйынса эште көйләү буйынса комиссия ултырышын үткәрҙе. Билдәләнеүенсә, 2017 йылда республикала 33 дәүләт хеҙмәткәре һәм 133 муниципаль хеҙмәткәр юридик яуаплылыҡҡа тарттырылған, ышанысты юғалтыу менән бәйле муниципаль вазифа һәм муниципаль хеҙмәт вазифаһын биләгән 30 кеше эшенән бушатылған. Бынан тыш, республика дәүләт власы органдарының кадрҙар хеҙмәте дәүләт хеҙмәткәрҙәренең мәнфәғәттәр конфликтын көйләү йәки уларға юл ҡуймау тураһында талаптарҙы үтәмәү осрағын асыҡлаған. Ун осраҡтың туғыҙында хеҙмәткәрҙәр дисциплинар яуаплылыҡҡа тарттырылған.

✔Башҡортостанда туризм өлкәһендә мониторинг уҙғарылған. Республиканың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты хәбәр итеүенсә, республикаға командировкалар һаны 2016 йыл менән сағыштырғанда 60 процентҡа артҡан. Дауаланыу һәм һауығыу өсөн сәфәрҙәр 66 процентҡа күтәрелгән. Төбәктәге изге урындарға ғибәҙәт ҡылыусылар иҫәбе ете тапҡырға күбәйгән. Республикала туристик хеҙмәттәр күрһәтеүсе юридик шәхестәр һаны 20 процентҡа артҡан һәм шәхси эшҡыуарҙар иҫәбе 15 процентҡа кәмегән.

✔Башҡортостанда Россельхознадзор инспекторҙары яңы тотолған балыҡ менән һатыу иткән урындарҙа тикшереү үткәрҙе. Продукттың хәүефһеҙлеге һәм уның килеп сығышы хаҡында документтары булмаған һатыусыларҙың тауары - бөтәһе 200 килограмдан ашыу балыҡ тартып алынды һәм юҡ ителде. Тикшереүҙәр тәбиғәтте һаҡлау прокуратураһы ҡушыуы буйынса уҙғарылған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ҡиммәтле балыҡтарҙы тотоу өсөн Балыҡ тотоу буйынса федераль агентлыҡтың рөхсәте талап ителә.

✔Дәүләт Думаһы капиталь ремонт өсөн компенсацияға хоҡуҡлы льготалылар исемлеген киңәйтеүҙе тәҡдим иткән закон проектын тәүге уҡыуҙа ҡабул итте. Льготалар эшләмәгән пенсионерҙарҙың ғаиләһенә, шулай уҡ беренсе һәм икенсе төркөм инвалидтары менән бергә йәшәгән 70 йәки 80 йәштәге торлаҡ милекселәренә лә ҡағыла. Бынан алда Дәүләт Думаһы төбәктәргә яңғыҙ кешеләргә капиталь ремонт өсөн 50 процент һәм 100 процент күләмендә компенсация тапшырыу хоҡуғын биргән закон ҡабул итте. Ләкин инвалидтар менән йәшәгәндәр быңдай мөмкинлектән мәхрүм ине.

БЫЛ АЙҘА...

# ЯҘ МЕНӘН ЯҢЫРЫРҒА ЯҘҺЫН...

**Яҙҙың нисек килеүенә ҡарамаҫтан, алағарай ҡар башына етер мәл. Халыҡ әйтмешләй, мартта шарт та шорт булһа, апрелдә - шаптыр ҙа шоптор. Тамсы тама, гөрләүектәр йырлай, ҡыуанышып, күләүектәрҙә турғайҙар сырҡылдаша... Ҡышҡы депрессия яҙ сыуағына сыҙамай, ҡар менән ҡуша ирей һымаҡ. Был айҙа уртаса һауа температураһы нулдән көндән-көн юғарыраҡ үрмәләй. Ер йөҙөн йәшеллек ҡаплағансы,был осорҙа бысраҡ һәм сүп-сар "тантана" итә.**




Үҙе йәшәгән ерҙе үҙе үк мәсхәрәләүҙән ҡасан арыныр әҙәм балаһы - был һорауға яуап түгел, күңелдәргә ҡаҡлығыр шаңдау ҙа юҡ хатта. Бер кем бер ни ишетмәй, күрмәй йә күрмәмеш тә белмәмеш: үҙен туйындырған һәм ҡасан да булһа уның ҡуйынына һыйыныр еренә төкөрөп йәшәүен, бысратыуын, ағыулауын дауам итә. Ирекмәндәрҙең яҙ һайын тирә-йүнгә сығып, тоҡ-тоҡ ҡый-һай йыйыуы ғына ла ҡотҡармай хәлде. Мәсьәлә күпкә ҡатмарлыраҡ. Ер шарында башланған катаклизмдарҙы бер аҙға ғына булһа ла тотҡарлау, климатты үҙгәртеү, йәғни уртаса глобаль һауа температураһын плюс 2 градустан күпкәрәк түбәнәйтеүгә өлгәшеү, ә бының өсөн атмосфералағы углекислый газ кимәлен кәметеү буйынса саралар күреү маҡсатында донъяның 192 иле тарафынан Париж килешеүенә ҡул ҡуйылғайны. Планетабыҙҙың именлек температураһы уға ҡаршы теләһә ниндәй башҡа төрлө ҡараш һәм дәлилдәрҙән, теләһә ниндәй сәйәсәттән өҫтөн, әммә, ҡыҙғанысҡа, дарья киңлегендә бер кәмәлә барғанлыҡты онотоп ебәргән әҙәмдәр үҙҙәре өсөн уйлап сығарылған "айырым планетала" йәшәй. Власть башына килеү менән Дональд Трамп, мәҫәлән, миллиард долларҙар юғалтыуҙан ҡурҡып, атмосфераны иң нығ бысратыусы АҠШ-тың әлеге Париж килешеүенән сығыуы хаҡында белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта тәбиғәт катаклизмдарының тап үҙҙәрендә башланып тороуы ла борсомай уны. Был хаҡта ишеткәс, донъяла билдәле популяр физик, яңыраҡ ҡына вафат булып ҡалған легендар шәхес Стивен Хокинг көйөнөп: "Трамп бындай ҡылыҡтар арҡаһында Ерҙе Венера һымағыраҡ "үлек" планетаға әйләндереү ихтималлығы янауын аңлап етмәй, ахыры, - тине. - Башҡа сәйәсмәндәр ҙә уның кеүек яуапһыҙ ҡыланһа, берике йөҙ йыллыҡтан кешеләр планетабыҙҙы тамуҡҡа әйләндерәсәк". Ҡойма ямғырҙар, һыу баҫыу, ер тетрәүҙәр, ҡоролоҡ, ҡар йә ҡом бурандары, торнадо - юлындағы бөтөн нәмәне ҡыйратыусы ҡойон-урагандар кеүек стихиялы тәбиғәт күренештәрен заман ахырына ғына һылтау дөрөҫ булмаҫ шуға күрә, бындай катаклизмдарға килтереүсе сәбәптәрҙең иң хәүефлеһе - кеше факторы, йәғни әҙәм балаһының үҙе ултырған ботаҡҡа үҙе балта сабыуы. Үткән айҙың ахырында Ерҙе һаҡлау көнө (30 март) билдәләнһә, яңы тыуған ай ҙа был мәсьәләләрҙе онотторға бирмәйәсәк: Экологик белем (**15**) һәм "Ер көнө" бөтөн донъя акцияһы (**22**) саралары планета именлеге өсөн көрәштең уртаҡ хәстәрлек булыуын һәр кем аңына еткерергә бурыслы. Халыҡтарҙың берләшеү (**2**), Халыҡ-ара ҡоштар (**1**), Бөтөн донъя һаулыҡ (**7**), Халыҡ-ара мәҙәниәт (**15**), Умырзая (**19**) көндәрендә төп тема булырға тейешле саралар сәйәси акция көсөнә инеп, ысынлап та, дөйөм именлек, планета халыҡтарын берләштереү, туғанлашыу мәнфәғәттәренә хеҙмәт итһен ине. Алағарай Көлкө көнө (**1**) менән башланып китһә лә, бынан ары көлөргә сәбәптәр ҙә ҡалмай башланы кеүек, эстрада юмористары ла тоҙһоҙ сығыштары тейәлгән иҫке "арбаларынан" төшә алмай, баштарын йүләрлеккә һалып, һәүетемсә генә "ижад итеп" яталар.

Әйткәндәй, элгәрерәк **1 апрель** йүләрҙәр көнө тип тә йөрөтөлгән түгелме? Нимә - нимә, ә йүләрлек тигәнең беҙҙә баштан ашҡан. Юҡҡа ғына халыҡ ул нәмәнән ғүмер буйы әсе көлмәгәндер инде. Бер аҡыл эйәһе яҙғанса, балалар әйткән һәм эшләгән йүләрлектәр генә көлкө тип ҡабул ителә, сөнки башҡа сара юҡ. Тик ана шул көлкө аҙаҡ күҙ йәштәренә әйләнмәһен өсөн бер сара бар шулай ҙа: ул да булһа, аҡыл туплау, белемгә ынтылыу. Ә аҡыл менән белем шишмәһе - китап, тигән ҡанатлы һүҙҙәр, үкенескә, хәҙер онотолдо. Бөгөнгө балаларҙың белем шишмәһе - интернет. Ҡыҙғанысҡа, ул китапты алыштыра алмай. Шуға ла Халыҡ-ара балалар китабы (**2**) көнө генә түгел, ә һәр дәрестә, шулай уҡ ғаиләлә ошо хәҡиҡәт йәш быуын аңына һеңдерелһен ине.

Быйылғы апрель календарында Космонавтика (**12**), Ҡытай (**20**) һәм Инглиз (**23**) телдәре, Йәштәрҙең халыҡ-ара берҙәмлек (**24**) көндәре лә билдәләнә. Белем, аралашыу, хеҙмәттәшлек һәм халыҡ-ара именлек мәнфәғәттәрендә был көндәрҙә үткәреләсәк саралар тос өлөш була алыр ине. Үткән ай илебеҙ халыҡтарын ғына түгел, киләсәккә ынтылыштарҙы ла берләштерер көс кәүҙәләнеше булып тарихта ҡалды. Яҡшыны юлдаш иттек - яҡшылыҡ булһын юлыбыҙ, тигән теләктә ҡалайыҡ, яҙ менән яңырырға, изгелектәр ҡылып йәшәргә, моратыбыҙға яҡынларға яҙһын!

**АЛАҒАРАЙ ЮБИЛЯРҘАРЫ:**

**7 -** партия һәм дәүләт эшмәкәре, философия фәндәре кандидаты, Журналистар берлеге ағзаһы, 2 тапҡыр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, "Башҡортостан Республикаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордендары кавалеры **Урал Бакировҡа** - 85 йәш (1933).

**10 -** әҙип, прозаик, БР Фәндәр академияһы академигы, профессор, филология фәндәре докторы, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, С.Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, Халыҡтар дуҫлығы һәм Почет ордендары кавалеры **Ғайса Хөсәйеновҡа** - 90 йәш (1928).

**-** психолог, педагог , М.Аҡмулла исемендәге БДПУ профессоры, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Вадим Сафинға** - 85 йәш (1933).

**-** педагог, дирижер, йырсы, үҙешмәкәр композитор, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, С. Юлаев ордены кавалеры, Ишембай ҡалаһы һәм районының почетлы гражданы **Мәрйәм Солтановаға** - 80 йәш (1938).

**20 -** йырсы, педагог, З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Фәрзәнә Сәғитоваға** - 75 йәш (1943).

Был айҙа шулай уҡ хәрби эшмәкәр, Башҡорт милли хәрәкәте лидерҙарының береһе **Әмир Ҡарамышевтың** (7) тыуыуына - 125 (1893-1918), шулай уҡ яҙыусы, журналист, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, "Башҡортостан хәбәрҙәре" гәзите, "Яңы юл", "Бабич", "Үктәбер" (бөгөнгө "Ағиҙел") журналының баш мөхәррире, БАССР Яҙыусылар берлегенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе **Дауыт Юлтыйҙың** (18) тыуыуына ла 125 йыл тула (1893-1938).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөнөң "Салауат Юлаев" командаһы менән Силәбенең "Трактор"ы араһындағы серияның хәл иткес етенсе уйынында юлаевсылар өҫтөнлөктө һаҡлай алманы. Шулай итеп, "Салауат Юлаев" миҙгелде тамамланы, "Трактор" Көнсығыш финалында Ҡаҙандың "Аҡ Барыҫ"ы менән уйнай.

✓Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы 2018 йылдың аҙағына тиклем файҙалы аҙыҡ-түлекте ирекле маркировкалау программаһын ғәмәлгә индерә. Файҙалы аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүселәр йыл аҙағына тиклем тауарға сәләмәт йәшәү рәүеше эмблемаһын йәбештерә ала. Маркировка варианттарының береһе - "Сәләмәт туҡланыу". Бындай саралар илдә һимереү кимәлен кәметергә булышлыҡ итергә тейеш, тип иҫәпләйҙәр ведомствола.

✓Өфөнөң Орджоникидзе һәм Калинин райондарында урынлашҡан уҡыу йорттарында аноним хәбәрҙәр өсөн йәшниктәр ҡуйылды. Полицейскийҙар уҡыусыларға һәм студенттарға наркоенәйәттәр тураһында һөйләргә тәҡдим итә. Йәшниктәрҙә төбәк Эске эштәр министрлығының тәүлек әйләнәһенә эшләгән "ышаныс телефоны" күрһәтелгән: 8(347) 279-32-92. Ошо номер буйынса наркотиктарҙы маҡсатҡа ярашһыҙ ҡулланыу һәм уларҙың законһыҙ әйләнеше тураһында хәбәр итергә, шулай уҡ ярҙам алырға мөмкин.

✓Рәсәй Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы граждандарҙы Рәсәй Федерацияһының Ҡыҙыл китабына индерелгән һәм юҡҡа сығыу сигенә еткән умырзая сәскәләрен йыймаҫҡа, һатмаҫҡа һәм һатып алмаҫҡа саҡыра. Бер һабаҡ тәүсәскәгә килтерелгән зыян өсөн штраф 300 һум тәшкил итә. Сәскәләр үҫкән бер гектар ерҙе юҡ иткән өсөн 450 һум күләмендә штраф ҡаралған. Хәлде насарайтҡан шарттарҙа: умырзая һатҡанда, һатып алғанда йәки кемгәлер ебәргәндә - штраф өс тапҡырға арта. Тәүсәскәләрҙе законһыҙ һатыу кәсебе менән төбәк власть органдары көрәшәсәк.

✓Өфөлә 2018 йылда санитар айлыҡтар һәм дөйөм ҡала өмәләренең датаһы билдәләнде. Йыйыштырыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү саралары 19 марттан - 30 апрелгә тиклем, шулай уҡ 17 сентябрҙән - 21 октябргә тиклем уҙа. Дөйөм ҡала өмәләре 14 апрелгә, 21 апрелгә, 29 сентябргә тәғәйенләнгән. Шулай уҡ муниципалитеттар санитар йомалар ойошторорға тейеш.

**"Башинформ"дан.**

***✓ "Кемеровонан һабаҡ алып, тейешле һығымталар яһалыр һәм муниципалитеттарға контроль функциялар ҡайтарылырына өмөтләнәм", - тип ҡабат-ҡабат билдәләне Ирек Ишмөхәмәт улы.***



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Өфө ҡала округы хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмә Кемероволағы фажиғәгә бәйле бер минут тынлыҡ менән башланды. Рәсәйҙә генә түгел, донъя йәмәғәтселеген тетрәндергән ваҡиға тормошобоҙҙа ҡуҙәтелгән ысынбарлыҡҡа реаль ҡуҙлектән сығып ҡарарға һәм аныҡ һығымталар яһарға мәжбүр итте. Сөнки "барыһы ла яҡшы" тип отчет биреү йәки кеҫәгә инеп яткан сумма күләменең етешһеҙлектәргә күҙ йомдороуы юғары хаҡ - кеше, шул иҫәптән бер ғәйепһеҙ сабыйҙар ғүмерҙәре менән түләнә.**

# КӨРШӘК ВАТЫЛҒАС ТҮГЕЛ,

## ватылмаҫ элек киҫәтергә кәрәк!

Республика Башлығы һәм прокуратура барлыҡ сауҙа үҙәктәрен хәүефһеҙлек буйынса тикшерергә ҡушһа, ҡала мэры Ирек Ялалов та ошо хаҡта бойороҡҡа ҡул ҡуйыуын белдерҙе һәм сараны комплекслы үткәреү зарурлығын һыҙык өҫтөнә алды. Шулай уҡ ул сауҙа-күңел асыу объекттарын техник, технологик һәм инженер йөһәтенән нисек урынлаштырыу буйынса тәҡдимдәр көтөүен дә билдәләне. "Рәсәйҙәге барлыҡ сауҙа комплекстары ҡасандыр сәнәғәт өсөн тәғәйенләнгән ҡоролмаларҙы реконструкциялап эшләнгән һәм хәүефһеҙлек йөһәтенән ышаныслы түгел. Ундай объекттарҙа ниндәй генә янғын һүндереү саралары күрелмәһен, ниндәй генә ысулдар ҡулланылмаһын, уларҙы тулы ҡеүәтенә башҡарып буллмай. Бында коридорҙарының геометрияһы ла, балалар майҙансыҡтары иң юғары ҡатта урынлашыуы ла, йыһаздарҙың нигеҙҙә пластик материалдан тороуы ла ҡатмарлыҡтар тыуҙыра. Иғтибар итһәгеҙ, Ҡаҙандағы янғында ла, Кемеровола ла төтөн ҡап-ҡара булып сыҡты. Рәсәй буйынса бейек йорттарҙа сыҡҡан янғын да фасад буйынса тиҙ арала таралыуын күрһәтте. Фасадтар янмай, тип раҫларға тырышһаҡ та, йылыны тотоусы көпләү материалдары тиҙ яна. Был инде эстәге халыҡҡа иҫән ҡалыуға бер ниндәй мөмкинлек тә ҡалдырмай, сөнки белгестәр әйтеүенсә, бындай төтөндә бер-ике тапҡыр һулау кешене хәрәкәтһеҙ итә. Бындай фажиғә илдең теләһә ҡайһы мөйөшөндә ҡабатланыуы ихтимал, шуға күрә, беҙ прокуратура органдары, республиканың Гәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы, башҡа структуралар менән берлектә тикшереүҙәр үткәреп, республика һәм федераль үҙәк кимәлендә үҙебеҙҙең тәҡдимдәребеҙҙе еткерәсәкбеҙ", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы. Ирекһеҙҙән, ниндәйҙер тикшереүҙәр үткәреү, гәмәлдәр ҡылыу, тәҡдимдәр индереү өсөн ҡайҙалыр фажиғә булыуын көтөргә кәрәк инеме, тиғән һорау тыуа. Баҡтиһән, мәсьәлә улай уҡ ябайҙарҙан түгел икән. Мәҫәлән, төҙөләш планлаштырылғанда уҡ сығымдарға ГОСТ талаптарына яуап биргән материалдар һалына, йәғни улар янмай, янғынға, һыуға бирешмәскә тейеш. **Әммә подрядсы төҙөләш барышында ҡуҙәтеүҙең ҡәтғи булмауынан файҙаланып һәм үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртып, арзан материалдар ҡулланыуҙан да баш тартмай икән.** Үкенескә күрә, бөгөн муниципалитеттарҙан күп контроль функциялары тартып алыныуы һөҙөмтәһендә, улар был эште даими ҡуҙәтеүгә ала алмай. Әммә етешһеҙлектәрҙе асыҡлап, саң ҡаға һәм тейешле органдарҙың иғтибарын йәлеп итә ала. Шуға ла Ирек Ишмөхәмәт улы яуаплы хеҙмәттәргә торлаҡтар, социаль объекттар, сәнәғәт биналары төҙөләшө барышында ҡулланылған материалдарҙың талаптарға яуап биреүен күҙәтеүгә алыуҙы йөкмәтте. Шулай уҡ ҡала үҫешен контролләү хеҙмәттәренән быға тиклем булған һәм төрлө етешһеҙлектәрҙе ваҡытында киҫәтеп, иҫкәртеп торған янғынға ҡаршы надзорҙы алыу ҙа фажиғә сәбәптәренең береһе тиергә мөмкин. **Элек объектты проектлау һәм тапшырыу ваҡытында был орган аныҡ эшләһә, хәҙер ундай тикшереү юҡ, шуға күрә заманса объекттар шырпы ҡабындай дөрләп яна.**

Ҡала хакимиәте башлығы белдереүенсә, Өфө сауҙа-күңел асыу үҙәктәре, сауҙа майҙандары буйынса Рәсәй Федерацияһында лидерҙар рәтендә. Улар ҡайҙалыр тығыҙ урынлашҡан, ҡайҙалыр бөтөнләй юҡ. Шуға ҡарамаҫтан, бындай объекттарҙың һаны буйынса баш ҡала барлыҡ нормативтарҙы үтеп киткән. Был иһә иғтибарлылыҡты тағы ла арттырыуҙы һәм хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен ҡәтғи үтәүҙе талап итә. Әйткәндәй, ошо көндәрҙә республикала эвакуация әҙерлеге буйынса күнекмәләр үткәрелеүе планлаштырыла. Унан ҡала хакимиәте лә ситтә ҡалмаясаҡ. "Миңә иртәнгә 8-9-ҙа отчет өсөн, бер кем дә булмағанда үткәргән күнекмәләр кәрәкмәй. Бер кемде лә йәлләмәгеҙ, кемдәндер бизнесы туҡталыуын йәки башҡа сәбәптәргә һуҡраныуына иғтибар итмәгеҙ. Тап пик сәғәтендә, сауҙа үҙәктәрендә кеше иң күп саҡта күнекмә үткәрергә кәрәк", - тип талапты ҡаты ҡуйҙы Ирек Ишмөхәмәт улы.

Проблемаға ысынбарлыҡ күҙлегенән ҡарағанда, бөгөн баш ҡалала ла бер генә объект та тулыһынса хәүефһеҙлек талаптарына яуап бирә, тип әйтеп булмайҙыр, моғайын. Муниципалитет башлығы Ирек Ялалов миҫал итеп килтергән, 1200 кешене һыйҙырышлы Ҡала мәҙәниәт һарайын алғанда ла, инеү-сығыу урыны - ике тар ғына ишек. Әгәр хәүеф килеп тыуа ҡалһа, уларҙа мотлаҡ этеш-төртөш башланасаҡ, сөнки бындай осраҡтарҙа күпселектә паника башлана. Хатта психикаһы тотороҡло кеше лә күпмелер ваҡытҡа шок хәлендә ҡалыуы ихтимал. Ә инде эвакуация буйынса эшләнгән схемалар - улар тикшереү килгәндә күрһәтеү өсөн генә, аныҡ бер ниндәй файҙалары юҡ. Шуға ла ҡала хакимиәте башлығының самолеттарҙа һәм караптарҙа булған схемаға оҡшаш схемалар эшләргә ҡушыуы, хәүефһеҙлек өсөн һәр етәксегә шәхсән яуаплылыҡ йөкмәтеүе лә, хатта теге йәки был объектта етешһеҙлек табылһа, ҡала хакимиәте исеменән яуаплыларҙы хоҡуҡи яуаплылыҡҡа тарттырыуҙы юллау менән киҫәтеүе лә юҡҡа түгел. Ата-бабалар ҙа бит баланы көршәк ватылғас түгел, ә уны ватмаҫ өсөн, алдан иҫкәрткән.

"Кемеровонан һабаҡ алып, тейешле һығымталар яһалыр һәм муниципалитеттарға контроль функциялар ҡайтарылырына өмөтләнәм", - тип ҡабат-ҡабат билдәләне Ирек Ишмөхәмәт улы. Уның был һүҙҙәре юғары власть әһелдәре ҡолағына һәм аңына барып етһен ине, сөнки власть менән халыҡ араһында бәйләнештең бөтөнләй юғала барыуына, проблемаларға "үрҙә"геләрҙең күҙен астырыр һәм иғтибарын йәлеп итер өсөн түләнгән хаҡ кеше ғүмерҙәре менән баһалана. Бөгөн һәләк булғандарҙың ғаиләләренә кеше башына хөкүмәттән берәр миллион, сауҙа-күңел асыу үҙәгенең хужаһы өсәр миллион аҡса вәғәҙә итә. Ирекһеҙҙән һорау тыуа: фажиғәнән һуң шундай компенсация түләү мөмкинлектәре булғас, ни өсөн төҙөләш өсөн сифатлы материалдар ҡулланырға, талаптарға ярашлы хәүефһеҙлек сараларын булдырырға, балаларҙы бикләү менән проблемаларҙы хәл итмәйенсә һәр ишек төбөнә билет тикшереүсе ҡуйырға, һәм башҡа шундай мәсьәләләрҙе хәл итергә аҡса тапмағандар йәки экономиялағандар һуң "серегән" байҙар? **Аҡса түләп, балаларҙы, әсәләрҙе, атайҙарҙы кире ҡайтарып булмай, әммә аҡсаны ваҡытында һәм урынлы ҡулланып, кешеләрҙең ғүмерен һаҡлап ҡалырға мөмкин.** Аҡыллыға һәм намыҫлыға, уларҙың һабаҡты нисек үҙләштереүенә ишара был.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ҠАТЫН-ҠЫҘҘАРҒА...

● **Рәсәй Хөкүмәте ҡатын-ҡыҙҙар мәнфәғәтендә Милли стратегия ғәмәлдәрен тормошҡа ашырыу планын раҫланы.** Бойороҡҡа Хөкүмәт Рәйесе Дмитрий Медведев ҡул ҡуйған. Ғәмәлдәрҙе тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһе буйынса, шул иҫәптән ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар табышында айырманы ҡыҫҡартыу, ҡатын-ҡыҙ-чиновниктарҙың һәм сәйәсмәндәрҙең иҫәбен арттырыу, ирекһеҙләү кимәлен кәметеү өсөн шарттар булдырыласаҡ. Бынан тыш, "ҡатын-ҡыҙҙар өсөн тәғәйенләнмәгән" профессиялар исемлеге ҡайтанан ҡараласаҡ һәм ярайһы уҡ ҙур булмаған енәйәттәр өсөн ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата язаны йомшартыу варианттары тикшереләсәк.

● **Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев 1 апрелдә социаль пенсияларҙы индексациялау хаҡында ҡарарға ҡул ҡуйҙы.** Был маҡсатҡа 10 миллиард һум самаһы йүнәлтелә. Мәғлүмәттәр буйынса, документта 2018 йылдың 1 апреленән социаль пенсияларҙы индексациялау коэффициенты 1, 029 күләмендә билдәләнгән. Тимәк, уртаса социаль пенсия дәүмәле 255 һумға күтәреләсәк һәм 9 062 һум тәшкил итәсәк. Ведомство баһаһы буйынса, һөҙөмтәлә 3,9 миллион кешенең пенсияһы артасаҡ. 1 марттағы Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә Рәсәй Президенты Владимир Путин пенсияларҙы даими рәүештә инфляциянан юғарыраҡ кимәлдә индексациялау кәрәклеген белдергәйне.

● **Рәсәй Президенты Владимир Путин лотерея билеттарын һатып алыу һәм улар буйынса отош түләү процедураларын үҙгәртеүсе законға ҡул ҡуйҙы.** Бынан һуң закон лотерея уйнатыуҙа 18 йәше тулмаған граждандарға ҡатнашыуҙы тыя. Хәҙер отош лотереяла ҡатнашыусыға паспортын күрһәткәндә йәки башҡа идентификация төрөндә түләнә, ә отош 15 меңдән артҡанда идентификациялау мотлаҡ була. Электрон лотерея билетын һатып алғанда һәм шул уҡ суммаға уның буйынса отош алғанда ла ҡатнашыусы тейешле төймәгә баҫып, йәшен раҫларға тейеш. Шуның менән бергә был осраҡтарҙа енәйәти килемдә законлаштырыуға ҡаршы эш итеү тураһындағы закон менән ҡаралған тәртиптә идентификациялау уҙғарылмай.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Силәбелә 500-гә яҡын кеше башҡорт теленән белемдәрен тикшерҙе. Көньяҡ Уралда йәшәүселәр сараға ныҡлы әҙерләнгән. Арғаяш районы ҡатнашыусылар һаны буйынса айырылып торҙо - Арғаяш, Яраткол, Ҡуянбай, Байғаҙы, Дәрбиш, Ҡуйһары, Ҡәҙеш, Ҡолой, Березовка, Аҡбаш ауылдарынан 332 кеше диктант яҙҙы. Златоуста иһә 42 кеше ҡатнашҡан диктант ижади коллективтар ҡатнашылығындағы сағыу тамашаға әүерелде. Сара төрлө район, ауыл һәм ҡалаларҙың киң мәғлүмәт саралары вәкилдәрендә лә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Ҡоншаҡ районында - 40, Магнитогорскиҙа - 38, Сыбаркүл районында - 30, Силәбелә 16 кеше туған телдән белемдәрен тикшерҙе.

✓Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 110 йыл тулыуға бағышланған юбилей тантаналары бағышлап, яҙыусының тыуған яғы Күгәрсен районында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары араһында "Биишева уҡыуҙары" ғилми-ғәмәли конференцияһы үтте. Премияның 2017 йылғы лауреаттары исеменә Башҡортостандың Мәғарифты үҫтереү институты ректоры Рәмил Мәзитов, профессор, ғалим Әкрәм Бейешев (үлгәндән һуң) һәм "Күгәрсен хәбәрҙәре" гәзите журналисы Гөлдәр Абдуллина лайыҡ булды.

✓Башҡортостанда Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Назар Нәжмиҙең һәм Әнғәм Атнабаевтың юбилей даталарына арналған әҙәби конкурс иғлан ителде. Бәйге проза һәм поэзия номинациялары буйынса уҙғарыла. Хикәйә, очерк, эссе, шиғырҙар ҡабул ителә. Эштәрҙе электрон вариантта ебәрергә кәрәк. Йәш буйынса сикләүҙәр юҡ. Редакцияның адресы: 450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13. Электрон почта: omet-ufa@mail.ru.

✓Өфөлә башҡорт телендә китап йыйыу буйынса акция иғлан ителгән. Йыйылған әҙәбиәт күрше Силәбе өлкәһенә, башҡорттар тығыҙ йәшәгән урындарға йүнәлтеләсәк. Ҡоншаҡ һәм Арғаяш районларында йәшәүселәр, тәү сиратта, уҡыу әҙәбиәтендә мохтажлыҡ кисерә. Шулай уҡ башҡорт авторҙарының нәфис әҙәбиәте лә ҡабул ителә. Китаптарҙы Ленин урамы, 56 адресы буйынса Халыҡтар дуҫлығы йортондағы 5-се бүлмәгә килтерергә мөмкин.

ЭШТӘР ГӨРЛӘЙ



# ЮЛ ЙӨРӨҮСЕГӘ - УҢАЙЛЫҠ

**Өфөлә юл-транспорт инфраструктураһын һәм халыҡты транспорт хеҙмәтләндереүе системаһын үҫтереү муниципалитеттың өҫтөнлөклө эш йүнәлештәренең береһе булып тора. Ҡалала пассажир транспортын яңыртыу буйынса проекттар тормошҡа ашырыла, муниципаль-шәхси партнерлыҡ принциптарында туҡталыштар модернизациялана, автобустарҙың рейс-ара туҡталыш майҙандары төҙөлә.**

Һупайлы биҫтәһендә йәмәғәт транспортының яңы рейс-ара туҡталыш майҙаны асылыуы ла быға бер дәлил. Ул халыҡты транспорт менән хеҙмәтләндереүҙе һөҙөмтәле ойоштороу, экологик хәл-торошто яҡшыртыу һәм водителдәрҙең эше, ялы өсөн оптималь шарттар тыуҙырыу өлгөһө булып тора. Рейсҡа сығыр алдынан водитель дә, автобус та тикшереү үтә. Сервис комплексында асыҡланған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн техник хеҙмәтләндереү станцияһы урынлаштырылған. Шунда уҡ запас частар магазины бар. Шулай уҡ машина йыуыу урыны ла эргәлә генә - бысраҡ автобустар линияға сығарылмай. Комплекста барлыҡ санитар-көнкүреш шарттар, шул иҫәптән душ бүлмәләре, кафе һәм буфет бар. Тиҙҙән уҡыу кластары асыласаҡ, унда водителдәр өсөн уҡыу һәм квалификация күтәреү курстары ойоштороласаҡ. Бынан тыш, автопарк даими яңыртыла. Әлеге ваҡытта транспорттың 80 проценты газ яғыулығында эшләй. Көн һайын маршрутҡа 680 автобус сыға.

- Бындай типтағы объекттар беҙҙә совет осоронда ғына төҙөлдө. Улар - Көньяҡ һәм Төньяҡ автовокзалдар. Әммә ул ваҡытта ла, үкенескә күрә, икенсе транспортҡа күсеп ултырыу узелдары һәм рейс-ара транспорт туҡталышы майҙандарын төҙөүгә средстволар етмәне. Бөгөнгө миҫал шәхси пассажир ташыусыларҙың ҡаланың транспорт инфраструктураһын үҫтереүгә өлөш индереү өсөн өлгөрөп етеүен раҫлай, - тине Ирек Ялалов майҙанды асыу сараһында. - Был миҫал таратылырға тейеш. Пассажирҙар ташыу буйынса уҙғарылған конкурста ҡатнашыусы компанияларҙың килем алыуы ғына түгел, ә инфраструктураны үҫтереүгә лә үҙ өлөшөн индереүе мотлаҡ.

# ҠЫЙЫҠТАҒЫ ҠАР ХӘҮЕФЛЕ

**Һауа температураһының ҡапыл үҙгәреүе һөҙөмтәһендә биналарҙың һәм ҡоролмаларҙың ҡыйығында ауырайған ҡар ҡатламы барлыҡҡа килә. Шуға күрә торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр көсәйтелгән режимда эшләй. Ихаталарҙы ҡарҙан таҙартыу менән бер рәттән улар ҡыйыҡтарҙы, балкон козыректарын ҡарҙан таҙарта.**

Бөгөнгә ҡала райондары УЖХ-ларының идара итеү ойошмалары ҡарамағында 5 мең самаһы торлаҡ йорт иҫәпләнә, уларҙың 60 проценты ауыш итеп ябылған. Көн һайын ҡыйыҡ таҙартыуҙа 250 кеше эшләй. Тәү сиратта ҡар төшөү ихтималлығы ҙур булған урындар, бигерәк тә парапеттар ҡуйылмаған ике ҡатлы йорттар, биш ҡатлы йорттар, ҡыйыҡтары фигуралы итеп ябылған яңы йорттарҙың ҡыйыҡтары таҙартыла.

Бинаны ҡуртымға алыусыларға юғары талаптар ҡуйыла, улар беркетелгән территорияларын һәм бина ҡыйыҡтарын ваҡытында таҙартырға, йәйәүлеләрҙең һәм милектең хәүефһеҙлеген тәьмин итергә тейеш. Граждандар тарафынан да айырыуса иғтибарлы булыу талап ителә. Уйламағанда ҡар төшөп, ҡазаланырға мөмкин, ә инде йорт эргәләрендә торған автомобилдәр зыян күреүе ихтимал. Шуға күрә йорттар эргәһенән үткәндә бинаға яҡын килмәгеҙ, балаларҙы ла шундай урындарҙан алыҫҡараҡ алып китегеҙ. Иҫкәртеүсе билдәләр, аншлагтар, табличкалар булғанда, ул урынды икенсе ерҙән урап үтергә тырышығыҙ.

# ҠАЙҘА СОҠОРҘАР БАР?

**Традиция буларaҡ, Башҡортостанда яҙ етеп, юлдар ҡарҙан асылһа, "соҡорҙарға ямау" һалыу башлана. Баш ҡалала тәү сиратта Менделеев, Сәғит Агиш, Юрий Гагарин, Комсомол, Һупайлы, Өфө шоссеһы, Новоженов, Йәштәр бульвары, Шәфиев, Рязань, М. Рыльский, Б. Бикбай, Н. Ковшова, Рәсәй, Сәмәрҡәнд, Төҙөлөш тыҡрығы, Пугачев урамдары ремонтланасаҡ.**

"Соҡорҙарҙы ямау" - юл ҡатламы артабан сафтан сыҡмаһын өсөн эшләнгән ваҡытлыса сара. Башҡортостанда түбән температураларҙа файҙаланырға мөмкин булған ҡойолған асфальт технологияһы ҡулланыла. Ҡатнашма 30-40 минутта ҡата.

Былтыр һәр граждан Өфөләге соҡорҙар хаҡында хәбәр итһен өсөн интерактив карта булдырылғайны. Быйыл да ресурс эше тергеҙелде. Һәр кем картала билдә ҡуйып һәм ҙур булмаған заявка формаһын тултырып, уға проблемалы участка фотоһын беркетеп, http://ufacity.info/doroga һылтанмаһына ебәрә һәм ҡала хеҙмәттәренә ярҙам итә ала. Бер мөрәжәғәттә бер генә адресты күрһәтергә мөмкин, әммә мөрәжәғәттәр һаны сикләнмәй. Заявка картала өңдәү билдәһе ҡуйылған ҡыҙыл өсмөйөш формаһында күренәсәк. Алынған мәғлүмәт эшкәртелә һәм ремонт эштәрен алып барыу өсөн юл хеҙмәттәренә тапшырыла.

ҠЫҪҠАСА

# ҠАСАН ЙЫЛЫ КИЛЕР?

✓ **Башҡортостанға яҙ 3 апрелдә килә, тип хәбәр итте Башгидромет белгестәре журналистар менән осрашыуҙа.** Апрелдең тәүге декадаһы тотороҡһоҙ, ҡар ҡатыш ямғыр яуыуы, айлыҡ яуым-төшөмдөң норманан 20-30 процентҡа күберәк булыуы фаразлана. Анализға ярашлы, апрелдә һәм майҙа уртаса айлыҡ һауа температураһы норма сиктәрендә буласаҡ. Апрель өсөн ул республикала 3-5 градус йылы тәшкил итә. Майҙа уртаса һауа температураһы 10-14 градус буласаҡ. Апрелдә ямғырҙың норманан күберәк булыуы көтөлә. Синоптиктар яҙҙың икенсе айында республикала яуым-төшөм 20-40 мм тәшкил итеүе ихтимал тип иҫәпләй. Майҙа һәм йәй айҙарында яуым-төшөм норма сиктәрендә көтөлә. Төбәк өсөн гәҙәти булмаған һауа торошо июлдә фараз ителә. Башҡортостандың төньяғы буйынса температура фоны - норманан юғарыраҡ, ә республиканың көнсығыш райондарында яуым-төшөм күберәк буласаҡ.

✓ **Гидрологтар Өфөлә йылғаларҙың боҙҙан әрселеүенә һәм ташҡын кимәленә күҙәллауҙар бирҙе.** Баш ҡала эргәһендә Ағиҙел йылғаһы 11 апрелдән 17-һенә тиклемге осорҙа боҙҙан әрселә. Былтыр унда 15 апрелдә боҙ китә башланы. Шаҡша янындағы Ҡариҙелдә - 6-12 апрелдә, Бочкарев тирәһендә Дим йылғаһы 12-18 апрелдә ҡуҙғала. Белгестәр гидрологик постар ҡуйылғанға күрә, ошо пункттарҙы билдәләй. Боҙ күп йыллыҡ уртаса күрһәткестәргә ярашлы китә башлар тип көтөлә. Атап әйткәндә, Ағиҙел йылғаһында иң иртә боҙ китеү - 29 мартта, иң һуңғыһы - 4 майҙа тип күҙаллана. Ҡариҙелдә - 23 мартта һәм 21 апрелдә, Димдә - 29 мартта һәм 25 апрелдә.Ташҡын кимәленең дә уртаса күрһәткестәргә ярашлы булыуы көтөлә. Ағиҙел йылғаһында ул 380-480 метр (иң юғарыһы - 1118 м, иң кәме - 330, 2017 йылда - 715 м) тәшкил итәсәк. Ағиҙелдә - 430-530 метр (иң юғарыһы - 1033, иң кәме 389, 2017 йылда - 671). Дим йылғаһында - 500-600 (иң юғарыһы - 873, иң кәме - 281, былтыр - 562).

✓ **3-6 апрелдә Өфөлә табиптарҙан бушлай консультация һәм кәрәк булған осраҡта тейешле тикшереүҙәргә йүнәлтмәләр алырға мөмкин.** Кешеләргә ВИЧ вирусына экспресс-тест үтеү, ҡандағы глюкоза һәм холестерин кимәлен билдәләү, электрокардиограмма яһатыу мөмкинлеге бирелә. ВДНХ комплексындағы сәләмәтлек үҙәктәрендә терапевтар, педиатрҙар, стоматологтар, дауалау физкультураһы белгестәре, гастроэнтерологтар ҡабул итә. Шулай уҡ психологтар менән кәңәшләшергә була. Бынан тыш, төрлө йүнәлештәге күсмә комплекстар эшләй: "Диагностика", "Ҡатын-ҡыҙ һаулығы", "Кардиомодуль", "Стоматология". Шаршамбы, 4 апрелдә, иртәнге сәғәт 10-дан һәр кем үҙенең ВИЧ-статусын белә ала. Өс көн дауамында иртәнге 10-дан көндөҙгө 3-кә тиклем "Донор бул - ғүмер бүләк ит" акцияһы барышында ҡан бирергә була. 3 апрелдә иртәнге сәғәт 10-да "Гепатитҡа - юҡ!" акцияһы уҙа.

✓ **TripAdvisor сайты Рәсәйҙә иң яҡшы туристик йүнәлештәр рейтингын баҫтырып сығарҙы.** Иң популяр маршруттар рейтингында Өфө лә бар - Башҡортостандың баш ҡалаһы туғыҙынсы урынды биләй. Өфөлә булып киткән туристарға Салауат Юлаев һәйкәле, "Ете ҡыҙ" фонтаны, Дуҫлыҡ монументы, Еңеү паркы, ике фонтан майҙаны, Ботаника баҡсаһы, Ләлә-Тюльпан мәсете, Раштыуа Алиһәһе кафедраль ҡорамы бик оҡшаған. Баш ҡала ҡунаҡтарына "Өфө-Арена"ла хоккей уйындарын, Рус драма театры спектаклдәрен ҡарарға, Милли музейға һәм М.В.Нестеров исемендәге художество музейына барырға тәҡдим итәләр. Бынан алда "Ватан" этно-паркы илдә иң яҡшылар исемлегенә ингәйне. Башҡортостан иһә Russia.Travel милли туристик порталы менән эшләү буйынса лидер төбәктәр иҫәбендә.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Муйын ауыртҡанда

❖ Остеохондроз булғанда, 200 грамм аҡ майға (өйҙә яһалған һыйыр майы булһын) 2 ҡалаҡ ваҡланған лавр япрағы, 2 ҡалаҡ ваҡланған ҡомалаҡ тубырсығы өҫтәргә һәм һауытты ҡайнап ултырған һыуҙа 20 минут тоторға. Барлыҡҡа килгән шифалы майҙы һыуытҡыҙ һәм быяла һауытҡа һалып, һыуытҡыста һаҡлайбыҙ. Шул май менән муйынға массаж яһарға. Көнөнә 2 тапҡыр 1-2-шәр балағалаҡ ашарға ла кәрәк.

❖ 4 ҡалаҡ ваҡланған артыш энәләре өҫтөнә 1/4 стакан һыу ҡойорға, онтаҡ йомшарғансы ҡайнатырға һәм 100 грамм вазелин менән бергә болғатып май яһарға, көнөнә 2 мәртәбә муйынға һөртөргә.

❖ Сей картуфты ҡырғыстан үткәрергә, 4 ҡалаҡ картуфҡа 2 ҡалаҡ бал ҡушырға һәм муйынға һалып, шарф менән бәйләргә. Был компресс ауыртыуҙы баҫа.

## Умыртҡаны нығытыу өсөн

❖ 2 ҡалаҡ эт дегәнәге (череда) өҫтөнә 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 20 минут самаһы төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 мәртәбә 2-шәр балғалаҡ эсергә.

❖ Умыртҡа һөйәген нығытам, тиһәң, остеохондроз булһа, ҡуян, һарыҡ, эт, дөйә йөндәрен сепрәккә түшәп, нығытып, билгә лә, муйынға ла 20-30 минутҡа бәйләргә кәрәк.

## Быйма

❖ Күп кеше аяҡтарының боҙ кеүек һыуыҡлығына зарлана. Ундайҙарға, бигерәк тә ололарға быйма кейергә кәрәк. Һарыҡ йөнөндә тәнгә сихәт биреүсе бер матдә бар. 12 йәшкә тиклем быйма кейгәндәрҙең аяғы өшөмәй, ундай кешеләр һалҡынға ла бирешеп бармай. Элек бит кейеҙ ойоҡ, сарыҡ, быйма ҡулланылышта булды. Һуғыш йылдарында беҙ ҙә тик быйма кейҙек.

## Гел сәләмәт булыу өсөн

❖ Яуыз булмаҫҡа, кеше тормошона көнләшмәҫкә, оло йөрәкле, изге күңелле, ярҙамсыл булырға, хәрәкәтләнеүҙе онотмаҫҡа, йоҡо "һимертмәҫкә" кәрәк. Яуыз кешеләрҙең күберәк һәм ныҡыраҡ сирләгәнен фән дә, дин дә дәлилләгән.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *Көлкө кәйефте генә күтәреп ҡалмай, кеше организмына дәрт-дарман биреп, ҡеүәт һәм энергия өҫтәп тора. Көлә-көлә кеше арыу-талыуҙарын тиҙерәк онота, тиҙ арала һәйбәт кенә ял итеп тә өлгөрә.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

### Вәхши мосолман динен ҡабул итә

Бер нисә көндән һуң Мөхәммәт бәйғәмбәр янына Өхөд һуғышында баһадир Хәмзәне үлтергән Вәхши килә. Мөхәммәт бәйғәмбәр уға эштең нисек булғанын һөйләргә ҡуша. Вәхши, Хәмзәнең башы өсөн ҡоллоҡтан ireккә ebә-ренеү шарты ҡуйылғас, яуҙың иң башынан уҡ Хәмзәне үлтерергә ниәтләнеүе тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләй. "Баһадир Хәмзә ҡурҡыныс һәм аяуһыҙ ине, ҡөрәйштәрҙе үлтерә башлағас, яугирҙарыбыҙ сигенде. Ләкин мин ҡурҡманым, уның ҡаршыһында тороп, һөңгөмдө муйынына ҡаҙаным", тип һөйләй ул.

Мөхәммәт бәйғәмбәр уйға ҡала. Хәмзә олатаһының үлемен бик ауыр кисерә ул, ә үлтереүсеһе әле уның ҡулында...

- Бар, кит. Именлек һинә, - ти Мөхәммәт бәйғәмбәр, ауыр уйҙан һуң. - Именлек һинә, тик бер ҡасан да күҙемә күренмә...

Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙ һүҙендә тора - Хәмзәне үлтергән өсөн мосолмандарҙың береһе лә Вәхшиҙән үс алмау ғына түгел, хатта рәнйетмәй ҙә. Вәхши мосолман динен ҡабул итә, үҙ ғүмерен дин өсөн яуҙарға бағышлай. Даһи һуғышсы була ул, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе сикһеҙ ярата. Тик бер ҡасан да уның күҙенә салынмай.

Егерме көндән Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәскәрен Мәккәнән алып китә.

### Улы Ибраһимдың үлеме

Мәккә мосолмандарға буйһондоролғандан һуң мәжүси, йәһүҙи һәм христиан динле ғәрәптәр мосолмандарға ҡаршы берләшә башлай. Тайф янында егерме меңлек ғәскәр туплана. Уларға ҡаршы Мөхәммәт бәйғәмбәр ун ике меңлек ғәскәр менән сыға. Юлда байтаҡ араға һуҙылып килгән мосолман ғәскәренә ҡапыл һөжүм итәләр. Алда барғандар тәүҙә сигенә, аҙаҡ ҡаса башлай. Уларға башҡалары ла эйәрә. Мөхәммәт бәйғәмбәр янында иң яҡын өммәттәштәре менән туғандары ғына тороп ҡала.

Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡасып барған ғәскәренә кире боролорға, һуғышырға ҡуша, ләкин уны ишетмәйҙәр. Ошо ваҡыт янында торған Ғәббәс ҡысҡырып ебәрә. Уның үтә лә көслө тауышы тирә-яҡты яңғырата:

- Мосолмандар, бында, Бәйғәмбәрҙең байрағы янына килегеҙ!

Ғәббәстең ҡысҡырыуын ишетмәү мөмкин булмай. Күптәр кире борола. Мөхәммәт бәйғәмбәр янында ярһыулы алыш башлана. Мәжүсиҙәр сыҙамай, кире борола.

Мосолмандарҙың яу башлыҡтары ғәскәрҙе тиҙ генә ипкә килтерә лә, мәжүсиҙәр артынан баҫтыра башлай. Тағы бер көслө алыш була. Мәжүсиҙәр оазиска ҡасып, Тайфтағы ҡәлғәгә бикләнеп ултыра. Мосолмандар ҡәлғәне яу менән алып ҡарай, тик көстәре етмәй - ҡәлғәне һаҡлаусыларҙың һаны самаһыҙ күп була. Был яуҙа Әбү Суфиян яра алып, һынар күҙһеҙ ҡала.

Мөхәммәт бәйғәмбәр ҡәлғәгә башҡа һөжүм итмәй, киреһенсә, әсирҙәрҙе түләү алмай ғына ҡайтарып ебәрә лә, ғәскәре менән ҡайтыу яғына, Мәҙинәгә юллана. Ул хаҡлы булып сыға - күп тә үтмәй, тирә-яҡтағы мосолман ырыуҙары тарафынан бойкот иғлан ителгән Тайф оазисы Мөхәммәт бәйғәмбәргә илселәр ебәреп, үҙҙәренең Ислам динен ҡабул итергә теләүҙәрен белдерә. Аҙсылыҡта ҡалған башҡа мәжүси ырыуҙар менән дә шундай уҡ хәл була.

**(Дауамы бар).**

*ИШАРА*

**Кешеләр ни өсөн көлә? Тәү ҡарамаҡҡа еңел генә булып тойолған ошо һорауға бик етди рәүештә уй-фекер ҡормайынса, төплө яуап табып булмаҫтыр. Ысынлап та, кешенең көлөү халәтенең, йәғни юморҙың асылын билдәләү өсөн фекер эйәләре тарафынан бихисап фәлсәфәүик, физиологик, психологик һәм башҡа фәнни-ғәмәли хеҙмәттәр яҙылған. Әйҙәгеҙ, ғәҙәтебеҙгә инеп киткән көлкө көнө уңайы менән беҙ ҙә ошо хаҡта фекер сурытып ҡарайыҡ.**

# КӨЛӨП ЙӘШӘЙЕК,

## йәки көлкө тураһында етди һүҙ



Кеше менән хайуани заттарға уртаҡ булған байтаҡ ҡына тәбиғи эмоциялар булһа ла, әҙәм балаһынан башҡаларына бер-береһенән көлөү мөмкинлеге бирелмәгән. Тимәк, беренсе һығымтабыҙ ҙа шул булыр: икенсе бер кешегә ҡарап, йылмая-көлә алаһың икән, һин - кеше. Әлбиттә, ысын күңелдән шаярып, дуҫтарса мәрәкәләшкән кеше менән кемдәндер мәсхәрәле һәм уҫал көлөүсе яһил араһында айырма ҙур инде ул. Әммә тәүгеһе лә, икенсеһе лә көлөүҙе үҙ маҡсатында файҙалана һәм, әйтергә кәрәк, ошонан ҡәнәғәтләнеү таба.

Кешелек тарихын өйрәнеүсе ғалимдар тәү тормош дәүере кешеләренең юмор тип атап булырҙай тойғолары булыуы-булмауы тураһында бер ни ҙә яҙмай. Уларҙың ләззәтләнеү, ҡурҡыу, уҫаллыҡ белдереү һәм нәфрәтләнеү кеүек тойғо-кисерештәре булған хәлдә лә, беҙ көлкөлө тип атаған күренештәрҙе беҙҙәнсә аңлай һәм кисерә алыуҙары икеле. Кеше психологияһының башҡа яҡтарына хас булғанса, көлкө тойғоһо барлыҡҡа килһен өсөн билдәле бер ихтыяж булыуы мотлаҡ, ә боронғо ата-бабаларыбыҙҙың ундай ихтыяжы булыуына ышанып булмай. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: әҙәм балалары әле йорт ҡорорға, мал ҡарарға, иген игергә лә белмәйенсә, бар тапҡанына ҡәнәғәт булып, ҡырағайҙарса йәшәгән бер дәүерҙә шаярыу-көлөү тигән нәмә уларҙың төшөнә лә инмәгәндер. Ишеү етмәһә, тирә-яҡ тулы дошман: уҫал йыртҡыстан ҡотолһаң, үҙең һымаҡ, әммә көслөрәк ике аяҡлы йән эйәһе тотоп ашап ҡуймағайы!

Кешелектең бишектәге сағы хәүеф-хәтәр вә ҡурҡыу менән тулы. Ә ҡурҡыу эргәһендә көлөүгә урын юҡ. Күрәһең, ошо тәү дәүер тыуҙырған эмоциялар мәңгелек нәҫел ептәре аша хәҙерге заман кешеләренең аңҡы аңына үтеп ингән, һәм шуның өсөн дә бишектәге сабыйҙарҙа ҡурҡыу тойғоһо тыумыштан уҡ биреләп, йылмайыу-көлөүҙәре аҙағыраҡ беленә башлай. Тағы шуныһы: ҡурҡа белеү өсөн әллә ниндәй аң-зиһен кәрәкмәй, ә юмор тойғоһо фекерләү ҡеүәһе үҫешә башлау менән генә барлыҡҡа килә. Тора-бара аңлы әҙәм үҙе өсөн ҡурҡыныс раҡ булған нәмәләргә лә көлкө күҙлеге аша ҡарарға өйрәнеп ала. Абстракт фекерләү тигән миҙалдың алғы яғына "зиһен" тип яҙылһа, икенсе яғында "юмор" һүҙе булыр. Көләмәс-анекдоттарҙы ла ижади фекерләй алған кеше генә уйлап сығара ала. Альберт Эйнштейн кеүек бөйөк фекер эйәләренең үтә шаян һәм юморға бай шәхестәр булыуы тиккә түгелдер инде. Фән телендә Homo sapiens (аҡыллы кеше) тип аталған әҙәм балаларын Homo humoristus (көлкөлө кеше) тип атаһаҡ, һис тә яңылышмабыҙ. Ниҙелер күреп-ишетеп, сағыштырып ҡарап, фекерләй алаһың икән, йылмайыу-көлөүҙән дә мәхрүм түгелһеңдер. Әле әйтелгәндәрҙән тағы ла бер һығымта: ҡасандыр Ер йөҙөндәге ниндәйҙер ҡара урмандар араһында йәниһә киң туғайҙарҙа ҡысҡырып көлгән кеше тауыштары тәүләп ишетелә башлаған икән, беҙ тап ошо ваҡытты кешелек тарихының башы, тип атай алабыҙ.

"Юмор - аҡылдың ғөрөф-ғәҙәттәрҙә, тәртип-мөнәсәбәттәрҙә осраған сәйерерәк күренештәрҙе эләктереп алып, уларҙы һис көтөлмәгәнсә күрһәтеү мөмкинлеген биреүсе күнелле, үткер һәм шаян торошо", тип билдәләй күренекле урыҫ филологы В.И. Даль кеше психологияһының ошо сифатын. Тимәк, нәмәләр көлкөлө күренһен өсөн, ул үҙенең ниндәйҙер сәйерлеге, урынһыҙ, килешһеҙ, ғәжәп, шаҡ ҡатырғыс вә кәйеф күтәрерлек булыуы менән көтөлмәгән ҡыҙыҡһыныу тыуҙырып, юмор тойғоһона ғына хас булған кисерештәр уятырға тейеш. Тәү ҡарамаҡҡа етди булып тойолған күренештәр ҙә көлкө объектына әйләнеүе бар. Мәҫәлән, халҡыбыҙҙың "Алыш-биреш - артҡа тибеш", тигән әйтемендә етдилектең көлкөгә күренеш менән ҡуша килеүе баҙар мөнәсәбәттәренә хас булған алдау-ялғанды фашлап тора.

Көлгәнгә - көлкө, тигәндәй, кешеләр төрлөсә йылмая, төрлөсә көлә. Был телебеҙҙә лә сағылыш тапҡан: көлөү шатлыҡлы, мөләйем, моңһоу, сабыр, йомшаҡ, аҡыллы, ысәрҙәрсә, ғорур, нәфрәтле, дуҫтарса, тупаҫ, мәсхәрәле, күңелле, сабыйҙарса, әсе, ҡырағай, кинәйәле, хайуандарса, оялсан, аҫтыртын, әҙәпһеҙ, уҫал, ярамһаҡланыусан, ҡурҡыу ҡатыш, йәш аралаш була алып, бынан башҡа бик күп сифаттар менән нарыҡланып йөрөй.

Башҡорт фольклорында көлкөлө хәл-күренештәргә нигеҙләнгән сюжеттар йыш ҡулланыла, ғөмүмән, көлкө жанрына ҡараған ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре халыҡ араһында киң таралған. Шаян йырҙар, күңелле таҡмаҡтар, көлкөлө лаҡаптар, көләмәстәр йор күңелле, алсаҡ һәм эскерһеҙ халҡыбыҙға иң ауыр, ғазаплы һәм хәсрәтле йылдарҙа ла төшөнкөлөккә бирелмәйенсә, киләсәккә өмөт менән йәшәргә ярҙам иткәндер. Бына әле әйтелгәнгә бер дәлил сифатында аһзарлы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарынан ҡалған бер лаҡапты иҫкә төшөрәйек. Һуғыш алдынан ғына кейәүгә сыҡҡан бер йәш ҡатындың ирен фронтҡа ебәрәләр. Һағыш-һағыныуҙарына түҙә алмайынса, ул иренә яҙған хатын шулай тамамлаған, ти:

*Одеял ябынаһыңмы,*
*Юрған ябынаһыңмы,*
*Һыҙылып таңдар атҡан саҡта*
*Мине һағынаһыңмы?*

Бер аҙ ваҡыт үткәс, фронттағы иренән хат килә. Ул ҡатынына ошолай тип яуап яҙған, имеш:

*Одеялы ла юҡ бында,*
*Юрғаны ла юҡ бында,*
*Көнө-төнө пуля яуа,*
*Һинең ҡайғың юҡ бында.*

Шулай итеп, уйын-көлкө кеше тормошонон айырылғыһыҙ бер өлөшө булып, йәшәйешкә йәм биреп тороусы файҙалы бер күренештер ул. Көлкөлө хәл-ваҡиғалар әҙәм балаһының бигүк еңелдәрҙән булмаған көнитмешен биҙәп-матурлап, үҙенә күрә бер зауыҡ барлыҡҡа килтерә. Көлкө кәйефте генә күтәреп ҡалмай, кеше организмына дәрт-дарман биреп, ҡеүәт һәм энергия өҫтәп тора. Көлә-көлә кеше арыу-талыуҙарын тиҙерәк онота, тиҙ арала һәйбәт кенә ял итеп тә өлгөрә. Тап шуның өсөн йылмайыу-көлөүҙе үҙенсәлекле психотерапия алымы итеп тә ҡарарға була. Кеше башҡалар алдында көлкөгә ҡалыуҙан ояла, ә был инде уға үҙен тәрбиәле, әҙәпле, инсафлы тоторға, ҡылыҡ-ғәмәлдәрендә була торған алама сифаттарынан, етешһеҙлектәренән арынырға булышлыҡ итә. Шулай булғас, көлөү бер үк ваҡытта бик һөҙөмтәле тәрбиә сараһы булып тора.

Әгәр ҙә кешелә юмор тойғоһо булмаһа, бөтә кешелек тарихы йән тетрәткес драма йәиһә ҡот осҡос трагедия булып тойолор ине. Бәхеткә ҡаршы, беҙ фани донъяның ауырлыҡтарын һәр ҡайһыбыҙҙың үҙ яҙмышына яҙған бер һынауы рәүешендә ҡабул итергә өйрәнеп, байтаҡ нәмәгә йылмайып-көлөп ҡарай алабыҙ. Ниндәйҙер бер аҡыл эйәһенең: "Кешелек, көлә-көлә, үҙенең үткәндәре менән хушлаша", - тигән ҡанатлы һүҙҙәре бар. Беҙгә лә, хөрмәтле йөмәғәт, тормош ауырлыҡтары, аламалыҡ-яманлыҡтар, үҙебеҙҙән етешһеҙлектәребеҙ менән шулай уҡ йылмайып-көлөп кенә хушлашырға яҙһын ине, тим.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

БОРОН-БОРОН...



**Һәр халыҡтың үҙ тарихы булып, һәр ҡайһыһы яҙмышына яҙғанын кисерә, һәм уларҙың береһенең дә тарих боролмаларында юғалып ҡалғыһы килмәй. Милләт яҙмышы өсөн тарих һабаҡтарынан да баһалыраҡ башҡа ҡиммәттәр юҡтыр. Тап шуның өсөн дә боронғо башҡорттар һәм башҡорт иле тураһындағы яҙма мәғлүмәттәр ҙур тарихи әһәмиәткә эйә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хатта уларҙың донъя фәнендә билдәле булғандарын да беҙ тейешенсә өйрәнеп бөтә алғаныбыҙ юҡ әле. Мәҫәлән, XII быуатта Сицилияның норман короле Рожер II һарайында йәшәгән ғәрәп географы әл Иҙриси ул замандағы халыҡтар, уларҙың илдәре тураһында киң һәм бай мәғлүмәт туплап, "Донъя гиҙеүҙе хушһынғанға йыуаныс" исемле энциклопедик характерҙағы ҙур хеҙмәт яҙа. Был китапта боронғо башҡорттар тураһында ла шаҡтай ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирелгән. Беҙҙең өсөн бына нимә мөһим: бынан 850 йыл элек һәм унан да әүәлерәк башҡорт халҡы Европала үҙ иле (территорияһы), хужалығы, ғәскәре, ҡалалары, үҙенсәлекле теле булған үҙаллы халыҡ рәүешендә билдәле була. Мәскәү тарихсыһы Ирина Коновалованың "Әл Иҙриси Көнсығыш Европа илдәре һәм халыҡтары тураһында" тигән ҙур ғилми хеҙмәтенән ошо ғәрәп географының башҡорт иленә арналған яҙмаларын һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

# ӘЛ ИҘРИСИ БАСДЖИРТТАРЫ,

## йәғни XII быуатта Европаға билдәле Башҡорт иле тураһында

### VI климат, 7-се секция

Алтынсы климаттың етенсе секцияһында Хазар диңгеҙенең бер өлөшө, эске һәм тышҡы басджирт (Башҡорт. - **Ред.**) илдәренең территорияһы һәм уларға төньяҡтан сиктәш булған Аскутийа (Скифия. - **Ред.**) иле ерҙәре тураһында бәйән ителә. Алла ярҙамы менән беҙгә тиклем яҙылған китаптарҙан ошо илдәрҙең ябай һәм билдәле кешеләре тураһында өйрәнеп белдек. Әйтергә кәрәк, беҙ күрһәткән ерҙәрҙең ҙур өлөшө йыраҡтарға һуҙылған сүлдәрҙән һәм бер кеше лә йәшәмәгән арауыҡтарҙан тора. Торлаҡтары аҙ һанлы, бер-береһенән алыҫ, ярлы, ундағы халыҡтарҙың бер-береһе менән дошманлығы һәм юлдарҙың насар булыуы сәйәхәт итеү өсөн хәүефле.

Эске басджирттар иле һәм уның сиктәре тураһында беҙ бишенсе климаттың етенсе секцияһында һөйләгәйнек. Ә тышҡы басджирттар иленә килгәндә, уға Ҡаруҡийа, Нәмджан һәм Гүрхан ҡалалары ҡарай. Был ҡалаларҙа йәшәүселәр, үҙҙәренә етерлек кимәлдә сауҙа һәм һөнәрселек менән шөғөлләнеп, үҙ көндәрен үҙҙәре күрә. Был халыҡтар бүтәндәрҙең биләмәләренә баҫып инеп, уларҙың мөлкәтен үҙенә ала. Был илдәр ундырышлы, мул үҫемлекле һәм мал көтөүҙәре күп.

Басджирттар булғарҙар арьяғында гуз (Уғыҙ. - **Ред.**) иле сиктәренә яҡын йәшәүсе ике ҡәбиләгә бүленә. Уларҙың ғәскәрендә ике мең тирәһе яугир бар. Урман араларына инеп боҫһа, уларҙы сиктәш йәшәгәндәрҙең береһе лә таба алмай. Улар булғарҙарға буйһона. Улар тәүәккәл һәм көслөләр. Басджирт халҡы бәджнәктәргә (Бәшнәктәргә. - **Ред.**) сиктәш. Басджирттар һәм бәджнәктәр - Румға сиктәш төркиҙәр. Күп ваҡытта улар тыныс йәшәй, әммә ҡай саҡта бер-береһенә һөжүм итә, һәм уларҙың сауҙа итешеүе һуғышыу менән сиратлашып килә. Булғарҙарҙан рустарҙың алғы сиктәренә тиклем ун күсем араһы.

Басджирт ерҙәре Һаҫыҡ ергә (Себер һаҙлыҡтары, буғай. - **Ред.**) тиклем йәйрәп ята, ул турала беҙ Алла мәрхәмәте менән алдараҡ, алтынсы климаттың һигеҙенсе секцияһында һөйләрбеҙ. Тышҡы басджирт ере көнсығышҡа табан шулай уҡ Һаҫыҡ ергә тиклем етә.

Шулай уҡ тышҡы басджирттарҙан көнсығышҡа Нәмджан ҡалаһына тиклем һигеҙ күсем араһы. Нәмджан ҡалаһы - ҙур булмаған сәскә атыусы ҡаласыҡ. Уның менән төркиҙәрҙән булған бер кеше идара итә. Уларҙа власты атанан улға тапшырыу ғәҙәте игелекле эштәре һәм ябай халыҡҡа, арҙаҡлы заттарға яҡшы мөнәсәбәтле булыуҙары арҡаһында өҙөлмәй килә. Был ҡала Суҡан тип аталған йылға буйында урынлашҡан. Был ҡаланан көнсығышта Арджика тауында баҡыр рудниктары бар, унда меңдән ашыу кеше эшләй. Унда баҡыр күп табылып, Хуваразм (Хорезм. - **Ред.**) еренә, Шаш (Ташкент. - **Ред.**) иленә һәм гуз иленең яҡын өлкәләренә алып барыла. Был ҡаланан шулай уҡ төлкө һәм әл бабр (Ҡондоҙ. - **Ред.**) тигән йөнлек тиреләре сығарыла, улар йылға буйлап Хазар диңгеҙенә тиклем алып барылып, бында һәм Дайламала юғары хаҡҡа һатыла. Был ҡалала балсыҡтан төрлө нәмәләр, шул иҫәптән юғары сифатлы һәм тиҙ ватылмай торған көршәктәр яһала. Был йылғаның ярҙарында төрлө төҫтәге ҡиммәтле таштар осрай, улар араһында лазурит күп. Был йылғалағы балыҡтарҙың сорттары һәм йыландарҙың төрҙәре шул тиклем күп, хатта уларҙы һөйләп тә, һанап та бөтөрлөк түгел. Нәмджан ҡалаһы кешеләре үҙҙәре өсөн төп аҙыҡ булған балыҡты бик ҙур таһыллыҡ һәм сослоҡ менән тота. Тотолған балыҡтың күберәк өлөшөн, һаҡлау өсөн тәмләткестәр һибеп, тоҙлап, караптарға тейәп, Хазар диңгеҙенә алып төшәләр, яр буйлап Исил ҡалаһына һәм башҡа урындарға тиклем барып етеп, һатыу итәләр, йәиһә үҙҙәре теләгәнсә тотоналар.

Нәмджан ҡалаһынан Гүрханға тиклем һигеҙ күсем ер. Был Аскутийа ере төркиҙәренең күп халыҡлы ҙур ҡалаһы. Ул Табаристан (Каспий. - **Ред.**) диңгеҙенә ҡойған Исил (Иҙел, йәки Волга. - **Ред.**) йылғаһынан төньяҡ тарафта урынлашҡан. Ҡала яҡшы төҙөкләндерелгән, тирә-яғы эшкәртелгән, бында ҡайһы саҡта күрһәтелгән йылға буйлап, сауҙагәрҙәр һәм сәйәхәтселәр килеп йөрөй. Бында Аскутийа төркиҙәре хакимы йәшәй, уның ҡарамағында күп һанлы яугирҙар, ҡорамал һәм ҡоралдар, күп ҡолғәләр, эшкәртелгән ерҙәр бар. Был илдә һөнәрселек тауарҙары һәм сәнғәт әйберҙәренән тик көнкүреш өсөн кәрәклеләрен генә эшләмәйҙәр, шулай уҡ улар яһаған эйәр һәм ҡоралдар шул тиклем күркәм һәм камил - бындайҙар төркиҙәрҙең башҡа бер илендә лә етештерелмәй. Гүрхан ҡалаһынан Ҡаруҡийаға тиклем Анхадара йылғаһы буйлап һигеҙ көнлөк юл, ә ҡоронан - көнбайышҡа табан ун алты күсем. Ҡаруҡийа - ағас ҡоролмаларҙан һәм кейеҙ тирмәләрҙән торған матур ҡала. Уға ерҙәре бынан ун алты күсем арала булған булғарҙар йыш һөжүм итеп тора, һәм улар әлмисаҡтан бирле бер-береһе менән даими һуғышып йәшәй.

Ҡаруҡийа ҡалаһынан төньяҡҡа тышҡы башҡорттарға тиклем үтеп сығыуы ауыр булған тауҙар, насар юлдар һәм тар һуҡмаҡтар буйлап ун күсем ара. Ҡаруҡийа һәм эске башҡорттар араһы үтеп сыҡҡыһыҙ тауҙар һәм юлһыҙ ерҙәрҙән ун ике күсем. Басджирттарҙың иле ҙур, уның айырым өлөштәре бер-береһенән ҙур алыҫлыҡта ята. Эске басджирттар иле үҙәге менән тышҡы басджирттар иле үҙәге араһы ун бер күсем ер. Үҙенең ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса басджирт халҡы төрки-булғарҙарға оҡшаш. Кейемдәре - оҙон куртка. Беҙ был турала етерлек яҙғайныҡ инде.

### VII климат, 7-се секция

Етенсе климаттың етенсе секцияһында Басджирт иленең дауамы, Һаҫыҡ ерҙең төньяҡ өлөшө һәм Бәджнәк иленең ҙур өлөшө тураһында бәйән ителә. Эске басджирттарҙың ҡалаларынан Мастр һәм Ҡастрҙы атап була. Был ике ҡала ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр бында һирәк килә. Унда бер кемдең дә булғаны юҡ, сөнки урындағы халыҡ илдәре аша үтеп сығырға теләүсе бөтә сит ил кешеләрен үлтереп тора. Был ике ҡала Исилгә ҡойған йылға буйында урынлашҡан.

Бәджнәк иленә килгәндә, ул ҙур түгел. Беҙгә килеп еткән хәбәрҙәргә ярашлы, унда Йәкәмуни ҡалаһынан башҡа ҙур ҡалалар юҡ. Унда йәшәүселәр күп һанлы, улар әр Рум иле яғынан сиктәш әр Русийа иле кешеләре менән һуғышыусы төркиҙәрҙән була. Улар үҙҙәренә һөжүм итә алмаһындар өсөн тауҙар һәм урмандар араһына йәшеренә. Бәджнәк халҡында әр Русийа халҡындағы кеүек, мәйеттәрҙе яндырыу йолаһы бар. Уларҙың ҡайһылары һаҡалдарын ҡырып йөрөй, башҡалары үреп ҡуя. Кейемдәре оҙон булмаған курткanan ғибәрәт. Уларҙың телдәре рустарҙың теленән дә, басджирттарҙың теленән дә айырылып тора.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Хәмит АЛҒАР*

# ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

**Зыялылар араһында заманында киң билдәлелек яулаған руханиҙарҙың иң арҙаҡлыларынан булып, Ислам тәғлимәте даирәһенең башҡорт ерлегендәге Нәҡшбәндиә суфыйҙары тәриҡәте тип исемләнгән йүнәлеш остазы, философ, мәғрифәтсе, күренекле дин һәм йәмәғәт эшмәкәре Зәйнулла ишан Рәсүлев тураһында бөтә донъяға таралған мәғлүмәттәрҙе уның тыуыуына - 185, вафатына 110 йыл тулыу айҡанлы "Киске Өфө" аша халыҡҡа еткереүҙе изге бурысыбыҙ итеп һанайбыҙ. Һеҙҙең иғтибарығыҙға АҠШ-ның Калифорния университеты профессоры Хәмит Алғарҙың Шәйех Зәйнулла Рәсүлевтың заманы, тормошо һәм рухи эшмәкәрлеге тураһындағы ғилми мәҡәләһен тәҡдим итәбеҙ.**

Суфыйлыҡтың Волга-Урал төбәге мосолмандары араһындағы күптәнге, әммә бөтөнләйе менән өйрәнелмәгән тиерлек тарихы бар. Суфый шәйехтәре был яҡтарға Волга Булғарҙары ханлығы замандарында уҡ килеп сыҡҡан. Йәҙегер хан хакимлығы осоронда уларҙың әүҙем эшмәкәрлек алып барғандарының һаны йөҙҙән дә кәм булмаған. Һижри буйынса һигеҙенсе быуатта (миләди йыл иҫәбенә ярашлы XIV б.) Ислам тәғлимәтен Дунай йылғаһы бассейнында ғына түгел, ә Урал тауҙары тирәһендә лә, бигерәк тә башҡорттар араһында таратыусы күренекле суфый Әхмәт Йәсәүиҙең мөрите сифатында Хөсәйенбәк исемле заттың булыуы теркәлгән; Өфө эргәһендәге Хөсәйенбәк кәшәнәһе XIX быуатта ла һаман зыярат ҡылыу урыны булып ҡала.

Суфыйҙар шулай уҡ Алтын Урҙаны исламлаштырыуҙа мөһим роль уйнай. Алтын Урҙаның иҫәп буйынса дүртенсе хакимы Берке хан Бохараның Ҡобрауия суфыйҙар йәмғиәте шәйехе Сәйфетдин Бәхәрзи тарафынан Ислам диненә ылыҡтырылып, уға мосолман йолалары өйрәтелә. Үзбәк хан хакимлығы осоронда Чингизидтар династияһының ошо ян тармағында Ислам айырата нығый, уның үҙен суфыйлыҡҡа алыу йолаһын суфыйҙарҙың Йәсәүиә йәмғиәте шәйехе Сәйет Ата башҡара.

Волга-Урал төбәгендә Ҡобрауия йәмғиәте бөтөнләйгә юҡҡа сыға, Йәсәүиә йәмғиәтенең эшмәкәрлеге оҙайлыраҡ дауам итһә лә, көслө булмай. Төрки халыҡтарының барыһына ла тиерлек хас булғанса, Нәҡшбәндиә суфыйҙар йәмғиәтенә башҡорттар һәм татарҙар мөхитендә лә иң йоғонтолоһо булырға яҙған. Суфыйҙарҙың бөйөк остазы Хужа Ғөбәйҙулла Ахрарҙың уҡыусыһы Хужа Мөхәммәт Әмин Булғари Волга-Урал төбәгендә Нәҡшбәндиә йәмғиәтенә ингән беренсе кеше булғандыр, тип уйларға ерлек бар. Хужа Мөхәммәт Әмин Булғари 902 йылда (миләдиҙә 1496 й.) Тәбриз ҡалаһында вафат булған, уның тыуған илендә Нәҡшбәндиә тәриҡәте буйынса ниндәй ҙә булһа эшмәкәрлеге билдәле түгел.

**(Дауамы бар).**

## ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!



# ДӘРЕС ӘҘЕРЛӘШӘМ...

**Мин Өфө колледждарының береһендә уҡыйым. Быйыл һуңғы курстамын, шуға күрә уҡыу йылы башында уҡ, әҙме-күпме аҡса эшләү йүнен ҡайғыртып, үҙемә тура килерҙәй эш урыны эҙләнем. Кем эҙләй, шул таба барыбер.**

Тәүҙә яҡындағы дауаханала кистәрен барып иҙән йыуҙым, унан бағаналарға иғландар йәбештерҙем, курсташтарыма һәм түбән курс студенттары өсөн рефераттар яҙҙым. Ләкин уҡытыусы һөнәрен үҙләштереп йөрөүем дә, балалар менән эшләргә яратыуым да, ошо өлкәлә ниндәй ҙә булһа килемле эш табырға тигән уйға этәрҙе. Репетитор була алмайым, сөнки мин башланғыс кластар уҡытыусыһы булырға әҙерләнәм һәм ниндәйҙер аныҡ предметты төплө итеп аңлата алмайым. Мәсьәлә көтөлмәгәндә хәл ителде. Бүлмәләш ҡыҙым ял һайын апаһына ҡунаҡҡа бара һәм туғанының бала менән дәрес әҙерләүен ниндәйҙер бер яза һымаҡ итеп һөйләй. Ул ҡыҫҡырыш, баланың илауы, көйһөҙләнеүе - ситтән ҡарап тороуы ҡурҡыныс, ти. Мин унан: "Апайың улына дәрес әҙерләшергә ярҙам итеүемә нисек ҡарар икән?" - тип һорағас, ул шунда уҡ апаһына шылтыратты. Уныһы ҡуш ҡуллап риза булды. Икенсе көнөнә үк уларға барып, бала менән танышып, эш хаҡы тураһында килешеп тә ҡайттым. Хәҙер бына икенсе ай мин уларға көн һайын барып, 2-се класта уҡыған Илдарға дәрес әҙерләшергә ярҙамлашам. Беренсе тапҡырында дәрес әҙерләүгә теләмәҫ кенә килеп ултырған бала хәҙер ихлас күңелдән уҡый, яҙа һәм ятлай. 2-2,5 сәғәт эсендә өйгә бирелгән эште тамамлап та ҡуябыҙ. Уҡыуға бик тә һәләтле бала булып сыҡты. Бер ниндәй ҙә көйһөҙләнеү, киреләнеү тигән нәмә юҡ. Әсәһе лә ҡәнәғәт, сөнки улың да нервыһы ҡаҡшамай, ә эшенән һуң өй мәшәҡәттәре менән булыша, ял итә. Өйҙәге көндәлек илау-ҡыҫҡырыштан ялҡып, һуңға тиклем эшендә ултырған атай кеше лә ваҡытында ҡайта.

Күпселек таныштарым балаларынан да бигерәк үҙҙәре каникул еткәнен көтөп ала. Хәҙерге уҡыу программаһының ауырлығы хатта атай-әсәйҙәрҙе лә "бөгә". Шуға күрә, көндәлек дәрес әҙерләүҙәрҙән барыһы ла - атай-әсәйҙәр ҙә, балалар ҙа - арып-ялҡып бөтә. Минең бер танышым әйтмешләй, бала менән дәрес әҙерләгәндә хатта бесәй ҙә йәшенеп тора, ти. Минең килеүем, шуға күрә, был ғаиләгә бөтә яҡлап та ыңғайға булды. Мин дә үҙемдең көндәлек сығымдарым өсөн даими аҡса сығанағы таптым. Әйткәндәй, аҡсаны минә көн һайын түләйҙәр. Уның күләме - 2,5 сәғәт өсөн 150 һум. Улар өсөн дә ҡиммәткә төшмәй, минә лә аҙыҡ-түлек алырға етеп тора. Ашауға стипендияны һәм өйҙән килгән аҡсаны тотонмағас, уларға кейем алам, төрлө мәҙәни сараларға йөрөйөм. Шулай уҡ йәйгеһен ял итергә барыу өсөн йыям. Бына ошондай минең бәләкәй генә "эшҡыуарлығым". Был килемле шөғөл бөтә студенттар өсөн дә ярарлыҡ, тип уйлайым. Шулай ҙа аҡса артынан ҡыуып, үҙеңдең уҡыуыңа зарар килтермәҫкә һәм хәүефһеҙлек тураһында онотторға ярамайҙыр. Күҙгә күренгән бер иғлан буйынса эш иҙлап барырға өндәмәҫ инем студенттарҙы. Ниндәйҙер ойошмаға икән, уйларға була, әлбиттә, ләкин белмәгән-күрмәгән кешенең өйөнә йөрөү айырыуса ҡурҡыныс бөгөнгө көндә. Шуға күрә, ошондай хеҙмәт күрһәтеүегеҙ тураһында таныштарығыҙға әйтегеҙ, дуҫтарығыҙға аңғартығыҙ, барыбер береһенең туғанын ҡыҙыҡһындырасаҡ бындай тәкдим. Аҡсаһыҙ йөрөмәйек, студенттар. Минең тәжрибәмдең кемгәләр файҙаһы тейһә, шат булырмын.

Рәсилә ЙЫҺАНОВА.

**Күптән түгелгә бер командировкам мәлендә Әбйәлил районының Һәйеткол ауылына - ихтирамлы ағинәй, данлыҡлы ҡобайыр башҡарыусы Вәсилә апай Садиҡоваға һуғылдым. Килеремде алдан шылтыратып әйткәйнем. Апай, әбйәлилдәрсә, бишбармаҡ бешереп, буҙа ҡойоп, милли кейемдә әйҙүкләп ҡаршыланы. Үҙенән һәм йортоноң һәр йыһазынан нур бөркөлөп тора. Һөйләшеп һүҙебеҙ бөтмәне. Ҡәләмдәштәремдең, минең яҙғандарҙы, радио һәм телевидение аша сығыштарҙы ятҡа тиерлек белә, күҙәтеп бара. "Һеҙгә күҙ төбәп торам", тип күңелде үстереп ебәрҙе. Ағинәйҙең миңә тип әҙерләгән сюрпризы ла булған икән. Ул да булһа - 10 һорау. Йәшәйешебеҙҙең бер генә проблемаһына ла битараф булмаған, көнө-төнө йәмәғәтселек, милләт хәстәре менән йәшәгән кешене борсоған һорауҙар улар. Әйтергә кәрәк, уларҙа бик ҡыйыу һәм көнүҙәк проблемалар сағылыш таба. Вәсилә апай кинәйәләп-минәйәләп тормай, туп-тура ярып һалды һорауҙарын.**
**Элек апайға һуғылғанда үҙем уға һорауҙар биреп, бәхәс ҡорһам, гәзиткә материал әҙерләһәм, был юлы ролдәрҙе алыштырҙыҡ. Шул әңгәмәбеҙҙе гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ. Бәлки, ошо "Уҡыусынан ун һорау" рубрикаһын дауам итеүселәр ҙә табылыр.**

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.



# ХАЛҠЫБЫҘ

## өҫтөбөҙҙәге кейемебеҙ ҙә

**▸ Башҡортостан телевидениеһы аша йыл һайын барған "Байыҡ" бейеү бәйгеһенә мөнәсәбәтең нисек, ҡустым? Ул конкурс нисек кенә кәрәкле һәм әһәмиәтле булмаһын, бер төрлөгә әүерелә бара түгелме? Туктауһыҙ ашаһаң, иң тәмлеһе тип иҫәпләгән ризығың да бүктерә, туйҙыра бит. Шуның кеүек. Уны йыл һайын үткәреү мотлаҡ кәрәк тип иҫәпләйһеңме?**

- Борсолоуҙарыңды аңлайым, Вәсилә апай. Милләтебеҙ зыялылары араһында шундай фекер йәшәй: миллиард-миллиард долларҙар әйләнгән сәнғәт, икешәрөсәр стандарттарға ҡоролған сәйәсәт донъяһы беҙҙең халыҡҡа ситен, беҙҙең булмыш ундай ҡиммәттәрҙе ҡабул итмәй. Беҙ иһә меңәр йылдар һуҙымында формалашҡан мәҙәниәтебеҙ, сәнғәтебеҙ, әҙәбебеҙ менән көслө. Шуның өсөн дә "Байыҡ" телевизион конкурсының үтеүен мин һәр йәһәттән ыңғай баһалайым. Беҙҙекеләй бай мираҫлы бейеү сәнғәттәре булһа, башҡа милләттәр ҙә шундай конкурстар үткәрер, әйткәндәй, йыл һайын ғына түгел, йыл әйләнәһенә үткәрер ине. Ә бына икенсе бер мәсьәлә: уны камиллаштырыуға килгәндә, һинең менән килешәм, Вәсилә апай. "Байыҡ" тигән повесьмда башҡорт бейеүенә шундай мәғәнә һалғайным: "Донъяға яралғандан бирле әйәр өҫтөнән төшмәгән башҡорттоң йөрәге ат тояғы тауышына көйләнгән, шуға күрә уны ҡуҙғатыр өсөн дә бейеүебеҙҙә тояҡ тауышы ишетелергә тейеш. Ат тояғы тауышы ишетелдеме - башҡорттоң да йөрәге дөпөлдәп, ҡупҡалйый башлай..."

Шуға күрә лә, бейеү нисек кенә оҫта, хәрәкәттәр камиллығы менән башҡарылмаһын, әгәр ҙә унда ат тояғы тауышы ишетелмәһә, ул минең рухыма тәьҫир итмәй. Был йәһәттән фекерҙәремде күп тапҡырҙар яҙғаным да булды. Әлбиттә, камиллыҡтың сиге юҡ, бер төрлөлөктән ҡотолоу юлы ижадта. Был хәл тик бер бейеү сәнғәтенә генә ҡағылмай: донъяла бер-береһенә оҡшаған игеҙәк йырҙар, шиғырҙар тыуа, кинолар төшөрөлә. Сәнғәт ул ижад ителгәндә генә зауыҡлы һәм ҡыҙыҡлы. Ижад туҡталған урында халтура башлана. Ә "Байыҡ" бәйгеһенә килгәндә, унда яңынан-яңы бейеүҙәрҙең барлыҡҡа килеүе, конкурс репертуарының йылдан-йыл тулылана барыуы уның оҙон ғүмерле булырына ышаныс, өмөт уята.

**▸ Республикабыҙҙа киң ҡолас алған ағинәйҙәр хәрәкәте хаҡында ла фекерҙәреңде белгем килә, Әхмәр ҡустым? Һин районлар, ауылдар буйлап күп йөрөйһөң, иғтибар ҙа итәһеңдер, мин, мәҫәлән, ағинәйҙәрҙең сәхнәгә менеүе менән һис тә риза түгелмен. Нимә генә тимә, сәхнә менән тормош - икеһе ике нәмә, ағинәйҙәр сәхнәлә түгел, тормошта булырға тейештәр. Ағинәйҙәрҙең барыһы ла ҡашмау кейеп йөрөй, һуң ҡашмауҙы әүәле килендәр генә кейгән бит...**

- Сәхнә менән тормоштоң айырымлығы хаҡындағы фекерегеҙ менән килешәм, Вәсилә апай. Был хаҡта мәшһүр шағирыбыҙ Рәйес Түләктән дә көслөрәк итеп әйтеп булмаҫ. Ул үҙенең "Башҡортлоҡ" тигән шиғырын шулай тамамлай:

*Эй, башҡортлоҡ!*
*Сәхнәләрҙән төшкәс,*
*Сисеп ырғытылған еләнеңдәй,*
*Һүтеп ырғытылған толомдай...*

Әммә был фекер ағинәйҙәр хәрәкәтенең зарурлығын инҡар итеүгә ҡоролорға тейеш түгелдер. Быны һин был хәрәкәттең башында йөрөгән, "1-се һанлы ағинәй" тигән танытма алған кеше булараҡ минән дә яҡшыраҡ аңлайһың. Беҙгә хәҙерге ваҡытта халҡыбыҙҙың рухын күтәрерҙәй барлыҡ саралар ҙа мөһим. Ул сәхнәлә булһынмы, тормоштамы - файҙаһы ғына булһын. Сәнғәттең, мәҙәниәттең әһәмиәте һуңғы сиктә тормошто йәмләүҙә, камиллаштырыуҙа сағылыш тапҡанда ғына беленә. Икенсенән, сәхнә ул шартлы урын, шуға күрә ҡашмауға бәйле һүҙҙәреңде лә аңларға була. Был йәһәттән мине Ҡорған өлкәһендәге ағинәйҙәрҙең әйткән һүҙҙәре һоҡландыра. Башҡортостандан барған делегация вәкилдәре уларҙан: "Ниңә мәктәптәрегеҙҙең тәҙрәләрендә ҡорған булмаһа ла, үҙегеҙ шундайын зауыҡлы милли кейем кейгәнһегеҙ?" - тип һорағандар. Беләһеңме, Вәсилә апай, улар нимә тип яуаплағанын? "Беҙҙең рухы тәҙрәбеҙҙәге ҡорған түгел, өҫтөбөҙҙәге кейемебеҙ һаҡлай", - тигән улар.

Өсөнсөнән, тәбиғәттә, йәмғиәттә һәм милләттә "көслө кеше" тигән вакант урын бар. Ул урынды кемдер яуларға тейеш. Ағинәйҙәр хәрәкәте ана шул урынды тулыландырыу маҡсатында барлыҡҡа килгәндәр, тип уйлайым. Ир-ат аҡса эшләйем, донъя көтәм, тип, Себерҙәргә, башҡа тарафтарға сығып киткәндә тылды ла ағинәйҙәр һаҡлай. Һөҙөмтәлә бер нисә йыл эсендә ауылдарыбыҙҙа йәм ҡунды. Хәҙер ҡайһы ғына ауылға барма, бөтә урындарҙа ла милли кейемдәге ағинәйҙәр ҡаршылай. Милли кейем менән бергә рух та әйәреп ҡайта. Шул хаҡта ла онотмайыҡ.

**▸ Түрәләрҙең дингә мөнәсәбәте тураһында нимә әйтерһең? Был йәһәттән уларҙың эшмәкәрлеге һиңә оҡшаймы?**

- 1917 йылда дин дәүләттән айырылғандан башлап беҙ атеистик принципҡа ҡоролған илдә йәшәйбеҙ икән, түрәләрҙән нимә көтәһең инде? Шул уҡ ваҡытта дингә тиклем халыҡ булып формалашҡан ҡәүемдәр иманһыҙ булған тип әйтеп булмаған һымаҡ, түрәләрҙең араһында имандары булғандары ла диниһеҙ булыуы бар. Был йәһәттән башҡорт халыҡ йыры "Түрәкәй"ҙең

✓ *Әгәр ҙә ҡарттар һәм балалар йорттары булмаһа, уларҙы ябыу ихтыяжы ла тыумаҫ ине. Шуға күрә лә беҙгә иң тәүҙә ундай йорттарҙы булдырмау сараларын табырға кәрәктер, тип уйлайым.*



ошо юлдарын килтереү урынлы булыр:

*Был түрләлек һиңә,*
*эй, килешерме икән,*
*Аҡылдарың камилға күрә...*

Минең ҡарамаҡҡа ошо йыр һүҙҙәрендә барыһы ла әйтелгән һымаҡ. Хәйер, быны өсөн айырым һөйләшеү кәрәк булыр ине.

▸ **Ниңә юҡ, туризымды үҫтерергә тейешбеҙ. Әммә миңә ситтән килеүселәрҙең мәмерйәләребеҙҙе ҡыҙырыуы, ер-һыуыбыҙҙы, тәбиғәтебеҙҙе тәләфләүе оҡшап етмәй. Һин был мәсьәләгә нисек ҡарайһың?**

- Әле тәү асылындағы тәбиғи урындарыбыҙ, әҙәм ҡулы әллә ни ҡағылып өлгөрмәгән ер-һыуыбыҙ байтаҡ. Бына шул урындарҙы һаҡлап ҡалыу өсөн дә уларҙы ҡурсаулыҡ йә туристик зона итеп законлаштырыу мөһим. Был осраҡта ундай урындарыбыҙ ситтәргә һатылмаясаҡ, ҡуртымға бирелмәйәсәк. Бында мәсьәләгә ике яҡлы ҡараш талап ителә, миңә ҡалһа. Халыҡта шундай әйтем бар: урман айыуҙы һаҡлай, айыу урманды һаҡлай...

▸ **Беҙҙә бер мәл күп ҡатын алыуҙы законлаштырыу мәсьәләһе ҡалҡып сыҡты ла, шул рәүешле онотолдо, буғай. Һин был йоланы тергеҙеү яҡлымы?**

# РУХЫН...

## һаҡлай бит

- Күп кенә һорауҙарға яуапты тарихыбыҙҙан таба алабыҙ. Шундай һорауға яуап биреп ҡарайыҡ: "Элек атай-олатайҙарыбыҙ икенсе, өсөнсө ҡатынды Ислам дине рөхсәт иткән өсөн генә алдымы икән?" Әлбиттә, улай түгел. Сөнки Ислам диненә тиклем үк туҡтауһыҙ яуҙар, һуғыштар булған. Уларҙа күп һандағы ир-азаматтар ҡорбан булып, ҡатындары, кәләштәре тол ҡалған. Ҡатын-ҡыҙҙың әсәлек потенциалын тулыһынса файҙаланыу, ошо юл менән халыҡтың демографик хәлен яҡшыртыу, ҡорбан булыусының балаларын етем итмәү өсөн тол ҡатындарҙы иҫән ҡалған ир-аттар икенсе, өсөнсө бисәлеккә алған. Хәҙерге заманда ла, нисбәттәргә күҙ һалғанда, ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда күпкә артыҡ. Ҡыҙҙарыбыҙ башҡа халыҡтарҙы арттырып, ғүмерҙәрен яндырмаһын өсөн дә кәрәк беҙгә был институт, тип иҫәпләйем мин.

▸ **Хәҙерге ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙың хаяһыҙлығы ҡайҙан килә икән? Һин был турала уйланғаның бармы?**

- Диндә, ирҙәр менән ҡатындар бер-береһенең кейеме, тигән аңлау бар. Ошо сағыштырыу күҙлегенән ҡарағанда, әгәр ҙә ир кеше бысраҡ кейемдә йөрөй икән, бында үҙе гәйепле. Һис юғы, ул кейемен ҡатынынан йыуҙыра ала. Йәки булмаһа, киреһенсә, бысраҡ кейемдәге ҡатын үҙенән башҡа кемде гәйепләргә тейеш һуң? Шулай ҙа, ғаиләлә һәм йәмғиәттә ҡатын-ҡыҙ хаяһыҙлығына юл ҡуйыла икән, бының өсөн иң беренсе нәүбәттә үҙ урынында булмаған, үҙ вазифаһын үтәмәгән ир-ат гәйепле.

▸ **Артистарҙың күбеһе хәҙер хәттин ашты. Уларҙы телевизор аша ла күрһәтәләр, радио аша ла йырлаталар, гәзит-журналдарҙың ҡайһыһын ғына уҡыма, унда ла тулғандар. Уларҙың артыҡ "шашыныуында" ниндәй сәбәптәр бар тип уйлайһың?**

- Сәбәбе ябай ғына, апай, сәнғәт хәҙерге ваҡытта эшҡыуарлыҡтың иң мөһим тармаҡтарының береһенә, заман теле менән әйткәндә, шоу-бизнесҡа әүерелде. Унда ҙур суммалағы аҡсалар әйләнештә йөрөй. Ә ҡайҙа аҡса, унда криминал, тәртипһеҙлек, хаяһыҙлыҡ, енәйәт. Бында башҡа төрлө аңлатманың булыуы мөмкин түгел. Шуға күрә был донъяны "сәнғәт" тип атап та булмайҙыр.

▸ **Хәҙерге ваҡытта, ҡустым, беҙҙең илдә иң ҙур проблема - эшһеҙлек. Ә мине шул йәһәттән бына нимә аптырата: илебеҙ етәкселәре граждандарҙы эш менән тәьмин итеү проблемаһын алға сығарыу урынына спортты үҫтереүҙе беренсе урынға ҡуя. Минеңсә, был дөрөҫ түгел. Ә һин бына ошо хаҡта нимә уйлайһың?**

- Һинең был һорауың, Вәсилә апай, бала саҡтағы ҡайны хәтирәләремде уятты. Әгәр ҙә урамда онотолоп китеп уйнаһаҡ, әсәйҙәр беҙҙе: "Йөрөйһөгөҙ шунда эт һуғарып, тиҙәк тибеп, елфруз һымаҡ..."- тип әрләп өйгә ҡайтарып эшкә ҡуша торғайны. Әммә беҙ улар ҡушҡан эште тиҙ генә башҡарып, киренән урамға йүгерә торғайныҡ. Әсәйҙәр ул ваҡытта уҡ беҙҙең урамдағы уйындарҙы, йәғни спорт менән шөғөлләнеүебеҙҙе "эт һуғарыу", "тиҙәк тибеү", "бушты бушҡа ауҙарыу" тип кенә баһаланы. Ә беҙ тап шундай уйындар ярҙамында кемдер менән ярышырға, сәмсел булырға өйрәндек һәм үҙ ғүмеребеҙҙә нимәләргәлер өлгәштек тә кеүек. Хәҙерге балалар иһә бындай уйындарҙы ла уйнамай, өйҙәрендә интернетҡа, замандың башҡа төрлө тәтәйҙәренә ҡапланған. Ошо күҙлектән ҡарағанда, хәҙерге баланы, үсмерҙе ошондай зарарлы йоғонтоларҙан айырып өсөн булһа ла спортҡа йәлеп итергә кәрәктер. Был - беренсенән, икенсенән, хәҙерге заманда спортҡа бәйле күп һандағы һөнәрҙәр барлыҡҡа килде.

▸ **Илебеҙҙә ҡарттар һәм етем балалар йорттары артыуына бер зарланһаҡ, хәҙер килеп уларҙы яптырмай һаҡлап ҡалыу ҙа проблема булып тора. Шулай түгелме?**

- Һәр халыҡтың, һәр дәүләттең кимәлен ҡарттарға һәм балаларға ҡарата булған мөнәсәбәт билдәләй. Мостай Кәримдең "Ай тотолған төндә" трагедияһына шундай фекер ҙә һалынған: үҙ диуанаһын ҡарай һәм аҫырай алмаған, донъя бәрәҙәгенән баш сөйгән илдә бәлә килер. Дәрүиш башҡорттарҙың ошондай йола-сифатын бик оҫта файҙалана һәм илгә бәлә килеүенә булышлыҡ итә.

Әгәр ҙә ҡарттар һәм балалар йорттары булмаһа, уларҙы ябыу ихтыяжы ла тыумаҫ ине. Шуға күрә лә беҙгә иң тәүҙә ундай йорттарҙы булдырмау сараларын табырға кәрәктер, тип уйлайым. Бындай йорттарҙың асылыуы ғаиләнең үҙ вазифаһын үтәмәүҙән килеп сыҡҡанын да онотмайыҡ.

▸ **Йәш ҡыҙҙарҙың яңы тыуған сабыйын ташлап китеүе хаҡында һуңғы ваҡыт телевизорҙан йыш күрһәтәләр. Шул хәлдәрҙе күреп йөрәгем яна. Бындай выжданһыҙлыҡтан ҡотолоп була тип уйлайһыңмы?**

- Әгәр ҙә әсә кеше йөрәгенән ярып сыҡҡан иң ҡәҙерле йән эйәһен ташлап китеүгә тиклем барып етә икән, бында сәбәптәр хаҡында ла уйланыу лаҙым. Күп осраҡта сәбәптәрҙең яртыһы тиерлек социаль мәсьәләләргә барып ялғана. "Социаль" дәүләти төшөнсә, шулай булғас, әсә кешене ошо хәлгә алып барып еткергән дәүләтте беҙ бер нисек тә аҡлай алмайбыҙ.

Сәбәптәрҙең ҡалған яртыһы шәхси факторға, тәрбиәгә, иманға бәйле. Беҙ был йәһәттән күп осраҡта "Әсәй кеше шулай булырға тейеш, былай булырға тейеш, улай булырға тейеш түгел" тигән әҙер ҡалыптарға таянып фекерләргә яратабыҙ. Тәбиғәттәге "күкүк әсәй" күренешенә генә күҙ һалайыҡ. Инә кәкүк йомортҡаһын сит ояға һалған саҡта тәбиғәт уның алдына себешен һаҡлап ҡалыу маҡсатын ҡуя. Сөнки ул нәҡ шул мәлдә ағыулы ҡарышлауыҡтар менән туҡлана был ҡош, әгәр ҙә себештәрен үҙе баҫып сығарһа, уларҙы ағыулап үлтерәсәк икәнен белә.

Хәҙер иһә үҙ балаһын урамда йә балалар йорто тупһаһында ҡалдырып киткән ҡыҙҙы кәкүк менән сағыштырып ҡарайыҡ. Әгәр ҙә бала тапҡан ҡыҙ үҙ балаһын билдәһеҙлеккә ҡалдырып китеүгә тиклем барып еткән икән, был бик етди ҡарар һәм ундай ҡыҙ барыбер ҙә үҙ балаһына лайыҡлы әсәй була алыр инеме икән? Икенсенән, шундай хәлиттәге әсәй, сабыйын ташламаған хәлдә лә, уға ниндәй миҡдарҙағы ағыуын эсерер ине икән? Әгәр ҙә мәсьәләгә ошо рәүешле ҡарағанда, үҙ балаһын сит тупһала ҡалдырып китеүсе ҡыҙҙы аңларға була. Айырма шунда ғына: инә кәкүк тәбиғәте ҡушыуы буйынса был аҙымға бара, ҡыҙ иһә аңлы рәүештә сабыйынан ҡотола, кәкүклек асылына яраштырып әйткәндә, балаһын "үҙ ағыуынан" ҡотолдора. Кем белә, бәлки балаһы, ысынлап та, яҡшы ата-әсәләргә, яҡшыраҡ йәшәү шарттарына барып юлығыр ҙа, әммә донъяла әсәйҙе башҡа кеше алыштыра аламы икән?

**Вәсилә САДИҠОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**РЕДАКЦИЯНАН:**
**Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! Яңы рубриканың бисмилләһына әңгәмә тәҡдим иттек. Был рубриканың артабанғы яҙмышы һеҙҙең әүҙемлеккә бәйле буласаҡ. Үҙегеҙ ҡайһы билдәле яҙыусыға, шағирға, журналисҡа, сәйәсмәнгә йә башҡа һөнәр эйәһенә һорауҙар биргегеҙ килә, шулар исеменә 10 һорау төҙөп, беҙгә ебәрә алаһығыҙ. Беҙҙең бурыс - ул һорауҙарҙы адресатҡа еткереп, һеҙҙең икәү-ара әңгәмәне гәзиттә баҫтырып сығарыу. Яуабын таба алмаған, үҙегеҙҙе борсоған һорауҙарығыҙға яуапты кем ауыҙынан ишеткегеҙ килә? Әйҙәгеҙ, әүҙемерәк булығыҙ!**

*ҺАБАҠТАР*

# ХӘЛ ИТӘ АЛМАҺАҢ...

## ул мәсьәләгә ҡарашыңды үҙгәрт



**Оло йәштәге бер танышым бар. Аҙмы-күпме - һикһән йәшен тултырҙы быйыл. Аралашып йәшәүебеҙгә егерме биш йыл тирәһе ваҡыт үткәндер. Йәш арабыҙ ҙур булһа ла, күп фекерҙәребеҙ уртаҡ, шуға ла дуҫлығыбыҙ оҙаҡҡа һуҙылғандыр, тип уйлайым.**

Өлкән әхирәтемдең иғтибарҙы йәлеп иткән иң мөһим сифаты - тормошто яратыуы. Был хаҡта ул, әлбиттә, һөрән һалып йөрөмәй. Ошо һыҙатын йыш ҡына башҡаларға ла өлгө итеп ҡуям мин. Тормошҡа ғашиҡлығы ябай ғына күренештәрҙә лә сағыла. Мәҫәлән, гәзәти көнитмешенә ниндәйҙер яңылыҡ индерергә тырышыуынан да быны тәҫмөрләргә мөмкин. Һикһәнгә тулғансы пенсияны аҙ булды. Әммә аҡсаһын коммуналь түләүҙән, дарыуҙан, аҙыҡ-түлектән арттырып, өҫтөнә ниндәйҙер яңы бер нәмә һатып ала йәки өйөндә нимәнелер яңырта. Кухня таҫтамалын булһа ла алыштырып ҡуя ул. Түшәк кәрәк-ярактарын, һауыт-һабаһын да төҫө, биҙәге уңғансы тотонмай. Ямғыр яуһа - уның тамсыһынан, ҡар яуһа- уның бөртөгөнән матурлыҡ табып, балаларса ҡыуана.

Бынан бер нисә йыл элек аяғын һындырып, дауаханаға яткайны. Шунда уның һаулығы өсөн нисек көрәшкәнен күреп, хайран ҡалғайным. "Миңә нисек тә торорға кәрәк!" тип, үҙ-үҙенәме, әллә эргәһендәге кешеләргәме тиҫтәләгән-йөҙләгән тапҡыр әйтә ине. Йәйен-ҡышын тәҙрә төбөндә сәскә атҡан гөлдәрен уйлап хәсрәтләнде. Торорға, янынан аяҡҡа баҫырға уның шул тиклем теләге ҙур булды. Һөйәк туҡымаһын нисек тиҙерәк уңалтыу, нығытыу тураһында медицина белешмәләрен алдырып уҡыны, йәш саҡта алған энциклопедияларын янына аҡтарҙы, врачтар менән кәңәшләште, үҙе һымаҡ имгәнгән кешеләрҙең тәжрибәһен өйрәнде. Һынған һөйәк буйынса бөтә белгәнен, ишеткәнен, уҡығанын бергә туплап, алтын урталыҡты табып, операцияһыҙ барыбер аяғына баҫты.

Күптән түгел уның тағы бер һоҡланғыс сифатын астым.

- Тормоштан, кешеләрҙән, күршеләрҙән ҡәнәғәт булырға өйрәнә башланым, - тип әйтеп һалды ул.

Туғыҙынсы тиҫтәһен ваҡлаһа ла, ул һаман үҙ өҫтөндә эшләй, холоҡ-фиғеленең ыңғай-кире яҡтарын анализлай ҙа баһа! Ысынлап та, йыш ҡына күрше-тирәһе шаулауына, экологияға, илдә барған сәйәси ваҡиғаларға, магазиндағы аҙыҡ-түлектең сифатһыҙлығына, хаҡтарға зарланғанын ишеткәнем бар. Был холоҡ бөтәһендә лә бар, тип, уға иғтибар ҙа бирмәй инем. Ә ул ошо ҡылығын кире сифат тип, унан ҡотолорға уйлай икән дә.

- Нисегерәк ҡәнәғәт булырға өйрәнәһегеҙ? - тим.

- Иң беренсе, быға тиклем мине тынысһыҙлаған, хәүефкә һалған, борсоған күренештәр менән ризалаша башланым. Күпме тырышһам да, күршемдең төн уртаһына тиклем телевизор ҡарарға яратыуын, һатыуҙағы аҙыҡ-түлектең сифатын, хаҡын мин бер нисек тә үҙгәртә алмайым бит. Ошоға тиклем ошо ябай ғына нәмәне аңламағанмын. Әрләшеп-бәхәсләшеп, нисек тә булһа һүҙемде һүҙ итермен тип уйлап, үҙемә лә, башҡаларға ла тынғылыҡ бирмәгәнмен икән. Аллаға шөкөр, күршем эскесе йәки янъялсы түгел. Аҙыҡ-түлек магазинында ҡытлыҡ юҡ, теләгәнеңде һайлап алырға мөмкин, - ти ул.

Проблеманы хәл итә алмаһаң, уға ҡарашыңды үҙгәрт, тигән хәҡиҡәткә тұҡһанға аяҡ баҫҡас ҡына төшөнөп, камиллашыуҙың тағы бер баҫҡысына күтәрелде ул. Бына бит, үҙгәрәм тиһәң, һикһәндә лә, туҡһанда ла үҙгәрергә була. Тик үҙең өҫтөңдә эшләргә генә кәрәк. Юғиһә, холоҡто үҙгәртеп булмай тип яңылышабыҙ... Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт?

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

✓ ***Шулай, ирле-ҡатынлы парлашып, бер арбаға ултырып, сәфаһәтле сәфәргә сыҡты, тәгәрмәстәр тәгәрләгән һайын, өй кәрәк-ярағын уңлы-һуллы һелтәп барҙылар. Берҙән-бер көндә аҙаҡҡы һыйырҙарын да һуйып оҙаттылар...***



# Үрмәксе ауы

Сабит ФАЗЛЫЕВ

Хикәйә



Ғүмерендә араҡыны ауыҙына алмаған ҡыҙ әле кейәүгә сыҡҡас та шайтан һыуына иҫе китеп бармағайны. Ауыл тормошонда ҡайнап, ҡунаҡҡа ла йөрөнөләр, өмәләрҙе лә ҡалдырманылар, Сәлим ҡаҡбай булып ҡатынына йәбешеп ҡайтыр ине, Әклимә ҡойолған шыйыҡсаға ҡағылманы. Хөкүмәт ярҙамы бөлдөрҙө йәш әсәне, ҡулына эләккән мул аҡсанан башы әйләнде, магазиндан аҙыҡ-түлек йәнәшәһенә "ярты" йәшереп өйгә ташыу ғәҙәтенә әүерелде. Оҫта ҡуллы ире ауылдаштарына ялланырға барған һайын "ҡыйыш тейәп" ҡайтты, йә булмаһа, бураған бураһы янында, йә урамда аунап ятып ҡалыр ине. Йыш ҡына бахмурҙан ауырыған Сәлим тыйманы ҡатынын, ирендә ҡайғыртаһың - маладис, тигән булып, сәкәштерергә шешәләш итеп, аҙымлап мүкле, һаҫыҡ һаҙлыҡҡа һөйрәне. Хужабикә шулай яйлап эскелеккә тартылды, үҙен тыйырға ихтыяр көсө етмәне, капитал бөткәндә ул "йәшел йылан"һыҙ йәшәүҙе күҙ алдына ла килтермәй ине. Шулай, ирле-ҡатынлы парлашып, бер арбаға ултырып, сәфаһәтле сәфәргә сыҡты, тәгәрмәстәр ҡыйыш-мыйыш тәгәрләгән һайын, өй кәрәк-ярағын уңлы-һуллы һелтәп барҙылар. Берҙән-бер көндә аҙаҡҡы һыйырҙарын да һуйып оҙаттылар...

Ҡатын өй тупһаһын көскә ашатланы. Уратып алған бөтә мөхит ытырғаныс уның өсөн, төклө аяғы менән мендәргә баҫып килен булып төшкән ошо йорт та шыҡһыҙ хәҙер. Ике яҡлы ғына булһа ла урамға йәм бәреп торҙо был өй ваҡытында, һарай тулы мал-тыуар, баҡырышып, күршеләрҙе сәмләндерҙе, йәй аҙағында баҡса түтәлдәрендә ҡауын-ҡарбузы тәгәрләште, һуған-һарымһаҡтары бау-бау бәйләнеп, көҙөн генә өлгөрәсәк кәбеҫтәләр йәнәшәһендә аунаны...

* * *

Ҡайны-ҡәйнәһе вафат булғандан бирле майланмаған күгәндең йәмһеҙ сыйылдауы Әклимәнең күңелен болғатты. Ул ишекте шығырлатып ҡыҫты ла, йөгөнөкләп уҡшырға тотондо. Әммә буш ашҡаҙандан тышҡа сығырлыҡ һут ҡалмағайны, эс-ҡарыны өҙөлөрҙәй тартылды. Ҡатын ҡаҡлас тәненең ҡалтырауынан туҡтай алмай, "У-у-уй!" тип үкерҙе, сүкәйгән килеш ярылырҙай булып ауыртҡан башын ҡыҫты.

- Сәлим, Сәлим, тим, һин ҡайҙа? - Ул урындыҡ аҫтын байҡаны. - Тап инде...

Өңдән ауыр ыңғырашыу ишетелде. Артынан иренең боҙҙай һалҡын хәлһеҙ тауышы иҙән өҫтөнән һығылып сыҡҡандай булды.

- Әмәл ҡалманы, Әклимә... Күршегә ин... Нимә булһа ла әбишәйт ит...

Сәлимдәрҙең күршеләре малғыуарҙар. Һәр тинде һанап көн итә ирле-бисәле, мөмкинлек тыуған һайын бол йыйнайҙар. Хужаның бармағы үҙенә табан кәкере, ҡушматы ла уның Плюшкин, урамда аунаған тутыҡ ҡаҙауҙы ла өйөнә ташый, тиҙәр. Көнөнә ике һалһын, тип тауыҡтарын да ҡара таңдан кетәк борҡотоп ҡыуып сығара, имеш. Арҡыры ятҡан әйберҙе күтәрмәйсә үтмәй инде, ҡыйһай йыйнап, күңел тыныслығы таба бөхил ир. Сәлимдең ике феләге, бер күнәге күптән инде ялтырап, келәт түрендә урын алған, эшҡыуарҙың самогон аппараты туҡтауһыҙ тамсылап улъя килтерә, мөгәрәбе төбөндә һалдаттарҙай теҙелгән көмөшкәләр алмашҡа киләһе ниғмәт көтә.

Арт ҡапҡанан тәртәнләгән шәүләне хужа саҡрымдан таныр ине. Йәһәтләп ҡаршы төштө.

- Нимә кәрәк? - Кәримдең дорфа өндәшеүенә Әклимә яһалма илауланы:

- Кәрим ағай, ҡотҡар, көтәсәккә бер ярты ғына...

Кәрим-Плюшкин күрше ихатаһында һыйыр мөгөҙөнә лә элерлек нәмә ҡалмағанын бик яҡшы белә, шуға төйтәйеп:

- Йоҡ миндә ярты! Зәйнәбкә бар - магазин тулы араҡы! - тип яуапланы.

- Кәрим ағай, үлтермә инде, һорағанынды бирәм... - Ҡатын түҙемһеҙләнеп, бүҫелгән еңен ыуаланы, мөлдөрәп, хужа йөҙөнә баҡты. Кәрим ҡапыл һөмһөҙ ҡарашын йәш ҡатындың йоҡарған, әммә килешле һын-һыпатына төшөрҙө лә, көлөмһөрәне:

- Һорағанымды, тиһең инде? - Плюшкиндың ҡыҫыҡ күҙҙәре майланды, ҡаймаҡ урлаған бесәй шикелле, алан-йолан ҡаранып, тауышын кәметте:

- Кисен алкашыңды йоҡлат, инеп сығырмын.

Әклимәгә әлеге мәлдә барыбер ине, теләгенә ирешһә, булды, тәү маҡсаты - баш төҙәтеү, аҙаҡ күҙ күрер, тумбыҡ башында уй ҙа йүгереп үтте: "Төнгөлөкккә бикләнәм дә ятам, ишектең биге ныҡ". Шуға форсаттан файҙаланып ҡалырға тырышты:

- Бер литр, ағай, шунһыҙ ул йоҡламай...

Ут күршеһе инеүсене тағы бер ҡат ҡыҫыҡ күҙҙәренән үткәрҙе лә, ҡәнәғәт ҡалды, шыбырланы:

- Ҡайт. Рәшәтке аша ашнағың тәңгәленән ығышҡан бағана төбөнә һалырмын. Ҡара, алдар булһаң - икеләтә түләтәм.

Төштән һуң башланған баш төҙәтеү шаулап-гөрләп дауам итте. Мәй эҙләп урам ҡыҙырған Сәлим ҡорҙашы Ғәлимйән тапҡан бер ҡыуыҡ "тәҙрә йыуғысы" өҫтәл түрен "йәмләгәс", шағарлаҡ ҡороу ҡыҙҙы ғына. Мәктәптән ҡайтҡан балалар түрьяҡҡа үткәндә сәрхүш өсәү бәхәс ҡаҙанында ҡайнай ине. Мәктәп директорынан башланылар, ауыл биләмәһе башлығының тетмәһен теттеләр, спиртлы эсемлеккә хаҡ күтәргән ил етәкселегенә лә шаҡтай эләкте, протокол төҙөп йөҙәткән участковыйҙы ла сәйнәнеләр, артабан сафсата китте. Етмәне, тағы барып әйләнде мәхмүр ҡунаҡ. Балалар йоҡоға талып, урам уттары һирәгәйгәндә, табындағылар ләх ине. Ғәлимйән ауа-түнә ҡайтыу яғына ыңғайланы, өйҙәгеләр һәр кем үҙ урынына - хужабикә урындыҡ яҫтығына морон төрттө, ир төнәгесенә сумды ла иҙәнгә һылашты...

Уҫлаптай ҡулдарҙың тотҡолауынан уянды Әклимә. Ҡараңғылыҡ ҡосағында тәүҙә аңды-тоңдо аңламай, һуйҙайып тик ятты. Хәл-торошто төшөнгәндә көслө әҙәм уны яулағайны инде. Өҫтә ятыусы ҡаты ҡыланды, иҫерек ҡатындың кейемен йолҡҡолаbны, ҡулдарын шаҡарҙы, ғүйә, алйыған. Әклимә сатырлатып көсләүсенең сәстәренә йәбеште, башын төйгөсләп маташты, әммә бәлйерәгән тәндең кәре бөткән шул, бер-ике ҡалҡынырға ынтылды ла, ирекһеҙҙән биреште. Төнгө ҡунаҡ, маҡсатына ирешкәс, бесәй аҙымдары менән шыпырт ҡына сығып һыҙҙы.

* * *

Әбейҙәр сыуағы. Алтын көҙҙөң иң матур сағы. Ауыл тирәләй, йылға, шишмә буйҙарында төрлө төҫтәргә мансылған ағас-ҡыуаҡтар йәлләп кенә, берәмләп япраҡтарын кәйелдерә. Йәй буйына бала-саға сыр-сыуынан арыған-дай тын ҡалған йылға буйҙарында һуғымға һимергән туҡ ҡаҙҙар ҡаңҡылдай. Хоҙай, ҡалған эштәрегеҙҙе тамамлап ҡуйығыҙ, тигәндәй, йомартланып егәрлеләргә аяҙ, йылы көндәрен өләшә. Бөгөн дә иртәнән йылмайып тау артынан ҡалҡҡан ҡояш төшкә табан әүҙемләнде, көлтә-көлтә көләс нурҙарын бар тарафҡа һипте. Ауыл халҡы бындай мөмкинлекте файҙаланып ҡалырға тырышты, әлбиттә, кемдер урманға юлланды, бәғзеләр ҡышҡа әҙерлекте ҡараштырҙы, дәртләнеп китеп һылауға тотонған тернәкселдәр кәртә-ҡура тирәһендә мәж килде. Клуб ҡаршыһында яңғыҙ йәшәгән Шәмсениса әбей ҙә бөгөн күрше ауыл егеттәренән утын алдыра. Туҡһанға етеп барған әбей һелкетә баҫып, елкенеп йөрөй, ыҡсым ихатаһына инеп боролған тракторҙың әле бер, әле икенсе яғына сығып, бойороҡтар яуҙыра. Әммә оҙон остары ергә тейә яҙып тейәлгән төрлө ағастан кәйефе боҙолдо.

- Сытырын әрәм иткәнһегеҙ, өҫтөнә өйөргә була бит инде шуны, - тип өҙгөләнде ҡарсыҡ. Тракторсы кабина ишеген шапылдата ябып төшкәс:

- Унынһын нишләтәһең йөктө боҙоп! Ошондай уҡ телешкы утын тағы бер килтерәм кәрәк булһа. Бер мең өҫтәһәң, инәй, түмәргә лә бысып бирәм, - тине лә, бушатылған бүрәнәләрҙе барлап, әбейгә тексәйҙе. - Теләһәң - өйөп биреү ҙә бер ни түгел.

- Атаҡ, яҙын утъяҡҡысҡа нимә яғам? Шытырлап янған сытырға етәме ни ул? - Ҡыш үткәреп, күк үләнгә баҫырға өмөтләнгән Шәмсениса әбей ҡара тапһыҙ ағартылған йәйге мейесенә ишараланы.

- Валютаң булһа, хәҙер елдереп барып киләбеҙ уны. Күҙ бәйләнгәнсе, сатыр-соторың ишек алдында ятыр, - тип йәнләнеп китте тракторсының ҡаҡланған балыҡтай йоҡа иптәше.

- Нимә тинең, улым, аңламай ҡалдым һүҙеңде? - Әбей әле теремек, үткер ҡарашын утын һатыусыларҙың аптыраулы сырайҙарында йүгертте.

Ҡаҡашып ҡатҡан егет бармағын эйәк аҫтына төрттө:

- Мәгәрис инде, инәй, мәгәрис.

- Ҡу-у-й, балаҡайҙар, ул хәрәм ашығыҙҙы ғүмерҙә ауыҙыма алғаным юҡ, Аллаға шөкөр, булышмайым да, берәйһенә әйтеп, туғай ботаҡ-һатағын хәстәрләрмен әле. - Шәмсениса әбей егеттәргә тәғәйенләнгән аҡсаны тотторҙо ла, юлығыҙҙа булығыҙ, тигәндәй, йәштәрсә ҡыймылдап, өйөнә атланы. Тракторсы ир, асыуланып, иптәшенә ыҫылданы:

- Мин һине араҡыға яллаһыммы? Бөтә уйың - эсеү. Нимә ҡыҫылаһың минең клиенттарҙы өркөтөп. Һиңә нимә, типтереп йәшәү - маҡсатың. Буйҙаҡлығың менән ҡупайып ғүмер үткәрәһең, миңә студент ҡыҙымды уҡытырға кәрәк, малайҙы кейендереп, компьютер алып бирәһе бар. Минекеләр кешенән кәм булып йөрөмәһендәр, тип тырышҡан баш. Мәгәрис, имеш...

Трактор, гөрөлдәп, урамға сыҡты, Шәмсениса әбей тупһаның ике баҫҡысын бер баҫып төштө лә, йыйыштырылған йәмле ихатаһын байҡап торҙо. Утындан ҡәнәғәт ҡалды ул, яҡынлап, шыңғырлап ҡатҡан ағастарҙы һыйпап, әпәй мөнйөгәндәй бөрөшкән ауыҙын ҡыбырлатып, эсенән генә нимәлер һөйләнде. Йәштән юҡсылыҡта көн итеп, бармаҡ башындай икмәккә тилмереп йәшәнеләр, бабайы менән иңгәиң терәшеп, һәр табышҡа шөкөр итеп, ғүмер һуҙҙы улар, әммә оя туҙҙырманылар. Ҡарты иртә китте, мәрхүм, таянысы көнө-төнө колхоз эшенән ҡайтып инмәне шул, миктәгәндер балаларын ас итмәйем, тип. Шәмсениса үҙе лә ферма ташламаны, һыйыр һыйпап, осто-осҡа ялғаны. Алтмышынсы йылдарҙа ғына тормош ҡотайҙы бит, халыҡ әпәйгә туйҙы. Хәҙер ҡыҙҙары барыһы ла ҡырҙа, әсәй, кил үҙебеҙгә, уңайлы, гәрәдскуй квәртиргә торошло өйөбөҙҙә йәшәрһең, тиҙәр, юю-юҡ, ҡарты күтәргән нигеҙҙе һыуындыра буламы, әле лә өҫтәл тултырып ризыҡ өйә лә, уйынан ғына бабайы менән сөкөрҙәшеп сәй эсә. Бына эштер-өштөр мәшәҡәттәрен бөтөрөр ҙә, күңелле шыжлаған самауыр артында алған утыны тураһында һөйләп шатландырыр, сынаяҡ түңкәргәнсе, ҡаршыһына ҡуйған ултырғысҡа теклә, ирененән йылмайыу китмәҫ. Хискә бирелеп, ҡыҙҙарын да һағынып иҫкә ала Шәмсениса әбей, ғәзизкәйҙәренән ҡәнәғәт ул. Тәүфиҡлы ҡыҙҙары - әсә ҡанынан киләлер - ярышып донъя көтәләр, кейәүҙәре лә атанан күреп яу сапҡанмы, әллә ҡайны тупһаһынан - иллә йорттары ла береһенән-береһе матур, күркәм. Иншалла, ғүмеркәйҙәр заяға үтмәне, йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәҫлек тоҡом дауам итә уларҙың юлын.

* * *

Сәлим, урындыҡ ҡырына һырғысланған маңлайын бәреп, туңҡаңлап баш ҡалҡытҡанда, ҡояштың яҡты уҡтары ҡорған йыртығы аша мейес ҡорһағын иркәләй ине. Ир күҙҙәрен көскә асып, буш урындыҡҡа баҡты, ҡатыны ҡайҙалыр олаҡҡан, буғай, һиҙемләүенсә, был ваҡытта балалары ла мәктәптә. Ҡиәфәте менән асарбаҡ хәленә еткән хужа бер талай иҙән уртаһында башын тотоп, һерәйеп торҙо. Ниндәйҙер сәйер тынлыҡ. Булмышында сәбәләнгән хистәрҙе аңларға тырышып, бағаналай ҡатты. Үткән төн лаяҡыл булғансы хәмер һемерһәләр ҙә, элеккесә, ҡәбер менән һаташып сыҡһа ла, тәнендә ниндәйҙер еңеллек тойҙо, зиһене лә асылғандай, күңелендә ҡайҙалыр ашҡыныу урғылды. Кемдер уны эҙәрлекләй ҙә һымаҡ, алан-йолан ҡаранды, ул-был һиҙелмәгәс, урындыҡ ситенә сүгәләп, серле тойғолар йомғағын тағатмаҡ булып, ҡарашын иҙәнгә сәнсте. "Тағы күпме эсергә була? Буйтым бүктерҙе. Көн дә бер үк хәл. Аңды юғалтҡансы эсәбеҙ ҙә йығылабыҙ, уянып торабыҙ ҙа, йәнә араҡы эҙләйбеҙ. Һаҙҙа аунаған сусҡа сүрәтенә индек. Ҡандай донъяны пыран-заран килтерҙек. Юҡ, бөгөн үк берәй ҡарарға килергә кәрәк!" Үкенесле үткәндәрен миҙанға һалып, арманы бөткән ир һалҡын, толҡаһыҙ өй эсен һөҙҙө. Ҡарашын мөйөштә йыбырлаған бөтмөр

✓ *Үҙенсә ололап-башҡортсалап, ҡоҙа, тип яҙырға уйлаған ул. Әммә телефонында башҡорт хәрефтәре булмағас, ҡоҙа урынына коза килеп килеп сыҡҡан. Быны аңлап алғас, ҡоҙаһын ул да шаяртырға булған.*



үрмәксе алды. Оҙаҡ аулаған ҡуңғыҙҙы электергән бит теге яуыз, ҡотолорға әмәл ҡалдырмай үрмәсләгән бөжәкте. Аяҡ-ҡулдары сырмалған ҡорбанға тештәрен уптырып, йәшәү һуттарын кинәнеп һура. Бахыр ҡуңғыҙҙың яҙмышы хәл ителгән, ярҙам итерлек нәсел-нәсәбе лә юҡ.

Сәлимдең кипкән тамағынан һыҙланыу ауазы һығылып сыҡты. Нишләптер үҙен меҫкен ҡуңғыҙ менән сағыштырҙы, ыңғайына йәне көйҙө, ҡапыл уянған намыҫы ғазапланды, ҡылған сәфәләттәре өсөн оялыу тойғоһо кисерҙе. "Ҡайтарып булырмы элекке ҡотло, бәрәкәтле тормошто, ҡайтанан гөрләтеп йәшәргә дәрт-дарман табырмы? Юҡтыр. Мынау һаҙлыҡтан үрмәләргә көс тә, теләк тә юҡ, донъя көтөргә мөсһәҙләндем. Нәҡ үрмәксе ауындағы ҡуңғыҙ мин. Ҡотолоу юлы шулай ҙа бар. Ҡасандыр ишеткәйне: һап-һау биш бала атаһы "төшөрөп" йөрөгәндә берҙәнбер көндө серле шарттарҙа үлеп ҡала. Мендәренә тонсоҡҡан, тиҙәр. Әллә тонсоҡҡан, әллә тонсоҡторғандар, Хоҙай белһен. Ни булһа ла, аҙаҡ тол ҡатын, балаларына атайһыҙлыҡтан байтаҡ аҡса юллап, йылмайып-көлөп йәшәп китте. Ундай хәлдәр йыш хәҙер. Әллә мин дә?.. Мин булмаһам, бәлки, бисә эсеүен ташлар, балалар өсөн пенсиә алһа, һәүетемсә йәшәп китәр..."

Сәлим һикереп тигәндәй торҙо, кире уйлауҙан ҡурҡып, тиҙерәк ихатаға атылды. Ниндәйҙер ҡайнар ағым уны мәңгелеккә әйҙәне, әйтерһең, артынан этәләр, йылдам атлап, буш лапаҫҡа табан ашыҡты, ыңғайына бил ҡайышын һыпырҙы. Ҡулдары йылғыр эш итте, кемдер ярҙам иткәндәй, кәрәкле төйөн үҙенән-үҙе төйнәлде. Быуына элмәк әҙер ҙә. Өлгөрҙө. Аяҡтары тулғанып һәлберәүгә ҡапҡа тышына тормоҙдарын сыйылдатып, еңел машина килеп туҡтаны. Ишектәр бер юлы асылып, эстән биләмә башлығы, мәктәп директоры, полиция инспекторы, район вәкиле төштөләр. Килеүселәр ҡапҡаны үтеүгә, ҡайҙандыр ҡапыл иҫкән ел мунса ишеген шаҡарҙы. Асыҡ соланда урҙаға аҫылынған ҡатын кәүҙәһе барыһын да шаҡ ҡатырҙы. Көслө ел өйрөлтмәгә әйләнеп, мунса иҙәненән күтәрелгән ҡағыҙ киҫәген саҡырылмаған ҡунаҡтар алдына осорҙо. Күтәрҙеләр. Ҡағыҙға ҡабалан ғына, һуҙып, шундай һүҙҙәр яҙылғайны: "Сәлим, ауырыйым мин, йәшәгем дә килмәй, эсеүҙә ташла, балларҙы кеше ит". Әле генә тымған ел, ҡабат ҡотороп, килеүселәрҙең иғтибарын йүнәлтергә теләгәндәй, өй хужаһының йәнһеҙ кәүҙәһе бәүелгән лапаҫтың япмаһын ҡутарып бәрҙе. Япма кисәге һауала өйөрөлөп-сәйерөлөп, күрше кәртәһенә барып төштө. Ел, үҙ бурысымды үтәнем, тигәндәй, ҡушарлап үҫкән тирәктең һары япраҡтарын услап-услап өҙгөләне лә, ҡайҙалыр китеп юғалды...

(Аҙағы. Башы 11-12-се һандарҙа).

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




### Халдар нисек, коза!

Бер мәл берәүгә ошондай смс-хәбәр килгән: "Халдар нисек, коза?"

Был юлдарҙы уҡығас, уның ауыҙы бер аҙ кәүшәйә төшкән. Берәү һине, кәзә, тип сәләмләп торһа, үпкәләмәгән ерҙән үпкәләрһең шул. Етмәһә, яҡын ғына ҡоҙаһы шулай өндәшә бит әле. Бер аҙ тынысланғас, аңлай төшкән. Был смс-хәбәрҙе ҡоҙа бит яңылыштан ғына ошолай яҙған. Үҙенсә ололап-башҡортсалап, ҡоҙа, тип яҙырға уйлаған ул. Әммә телефонында башҡорт хәрефтәре булмағас, ҡоҙа урынына коза килеп килеп сыҡҡан. Быны аңлап алғас, ҡоҙаһын ул да шаяртырға булған. Ул ошондай смс-хәбәр ебәргән: "Халдар хайбат, баран".

Үҙе яуап ебәргән, ә үҙе ҡурҡа төшкән. Әгәр ҡоҙаһы уның шаяртҡанын аңламаһа... Шул арала ҡоҙаһынан яуап та килгән: "Ха-ха, мин ул маганала тугел сыват".

### Күҙ тейеүгә бирешмәгән һыйыр

- Эй, күрше, бынау күрше ҡатындың күҙе насар ҙа инде. Уның бер генә ҡарауы етә, шул нәмәгә күҙе тейә лә ҡуя. Шул күрше ҡатын арҡаһында бер эшем дә уңмай, тормошом да алға бармай. Ағай, еңгәйгә әйт әле, минең кәләш менән һөйләшеп алһын...

Бына шулай кинәйәле һөйләп зарлана миңә күрше. Минән күпкә йәш булһа ла яман башлы ул. Бына бит, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ. Минең ҡатынды күрше ҡатындан һалдырып, ҡалай "маҡтап" тора. Шул уҡ ваҡытта кәрәк ерендә, ағай-еңгәй, тип өтәләнеп тора. Әйткәндәй, күршеләрҙең ошо арала мөнәсәбәттәре бер аҙ боҙолоп тора. Аҙна элек кенә уларҙа һаут-һаба шылтырағаны хатта беҙгә ишетелә ине. Хәҙер хәл хөртәйеп төпкәрәк инеп баралыр, күрәһең. Аңлашыла, күршегә тиҙ арала ярҙам кәрәк.

- Ярай, һөйләшермен. Бөгөн-иртәндән дә ҡалмай сәйгә саҡырып алыр килендә.

Күршене әйтәм, ыңғай яуапты ишеткәс, исмаһам, бер йылмайһасы. Юҡ, ул барыбер ауыр көрһөнөп, моңһоу ғына һүҙен дауам итә.

- Күрше, бынау помидор-ҡыяр үҫентеләренә ҡара әле. Уларға күрше ҡатын көртәләү аша бер генә тапҡыр үрелеп ҡараны. Була шул бер генә күҙ һирпеүе етте. Бына хәҙер улары һулып ултыра. Теге аҙнала тауыҡ себештәре алғайныҡ. Күрше ҡатын урамға инеп, шуларға ҡарап, бер генә тапҡыр һоҡланып ҡарап торҙо. Йүгереп барған себештәр алға һөрләгәшеп-тәгәрәшеп китеп йән бирҙеләр. Йәшенеп өлгөргәндәре генә тере ҡалды.

Ысынлап та, күршеләрҙең хәле үтә хөртәйеп киткән икән. Аҙна буйы үҫентеләргә һыу һипмәнән, аҙна буйы себештәрҙе ашатмаһаң, әлбиттә, улар яйлап һулыпүлеп бөтәсәк. Бөгөндән ҡалмай ярҙам кәрәк. Шул арала күрше һарай яғына ҡарап, тәрән көрһөнөп ҡуя.

- Һыйыр нисек сыҙап йөрөйҙөр инде...

### Илһам килмәй!

Бер мәл баш мөхәррир үҙенең хеҙмәткәрен бер аҙ тәрбиәләп алырға булған.

- Хатта ғына матур яҙа инең, ҡустым. Матур-матур мәҡәләреңә ҡыуана инем. Хәҙер бер аҙна инде һинән бер йүнле әйбер күргәнем юҡ. Нимә булды һиңә?

Уныһы тәрән итеп көрһөнөп, ошолай яуап биргән.

- Илһам килмәй.

Нишләптер баш мөхәррир ҡапылғара уны аңламай ҡалған һәм һорай ҡуйған.

- Аныһы кем тағы?

Хеҙмәткәр тәүгеһенән күпкә тәрәнерәк итеп көрһөнөп ҡуйған.

- Эшлә инде бына ошо кеше менән.

### Миңә малайҙы ҡурҡытырға ине!

Был хәл, әгәр тыңламаһаң бабайҙың тоғона һалып ебәрәм, тигән мәлдә булған. Элек бит бәләкәй балаларҙы шулай ҡурҡыта торғайнылар. "Ана, урам буйлап бер ямаҡай бабай йөрөй. Уның ҙур тоғо бар. Ул һәр өйгә инә, тыңламаған илаҡ балаларҙы йыйып алып китә. Әгәр тыңламаһаң, уйынсыҡтарыңды йыйып алмаһаң, шул ямаҡай бабайҙың тоғона һалам да ебәрәм. Теге юлы, минең малайым мине тыңлай, тип бушҡа алдап ебәргәнмен. Бына был юлы алдап тормайым. Был малай илаҡ, тыңламай, тип дөрөҫөн әйтәм дә тоғона һалам да ебәрәм", - тип әйткәнгә ышана торғайны бит ул замана балалары.

Бер мәл йәш атай үҙенең малайын ошолай ҡурҡытырға булған. Ә малайы оҙаҡ ҡына уйланып ултырған да ошолай һорау биргән.

- Атай, ә ямаҡай бабай нисек була?

Малайының был һорауына йәш атай үҙе аптырап ҡалған. Ысынлап та, ямаҡай бабай нисек була һәм уны балаға нисек аңлатырға? Оҙаҡ ҡына уйлап ултырғандан һуң йәш атай ҡояш һымаҡ йылмайып ебәргән. Хәҙер, улым, тиған дә күршеләренә йүгереп инеп киткән. Ә күршеһе, йомшағыраҡ итеп әйткәндә, артыҡ матур булмаған. Йәш атай йүгереп барып ингән дә шунда уҡ йомошон әйткән.

- Һаумы, ағай. Миңә һинең бер фотоң кәрәк ине. Ҙур фотоң булһа, бигерәк һәйбәт.

Күршеһе сәбәбен артыҡ төпсөнөп тормаған. Сумаҙанын асып ебәргән дә иң өҫтә ятҡан фотоһын алып уға һонған.

- Ошо барамы, ҡустым?

Был фотоға күҙ һалыу менән йәш атай ҡыуанып киткән. Был фотола күрше ағай, ысынлап та, үтә "матур" булғандыр инде. Күршеһе шаярта биреп һорай ҡуйған.

- Әллә, иҫтәлеккә, тип яҙып бирәйемме, ҡустым?

Йәш атай үҙенең йәшлегенә барып ошолай яуап биргән.

- Юҡ, уныһы кәрәкмәй. Миңә малайҙы ҡурҡытырға ине!

**Шәрип ЯҠУПОВ.**

ТЕЛ ТӨБӨ… ЮМОР

# КӨЛӨП АЛ, ӘЙҘӘ!



**1 апрель - бысраҡ айҙың "Артың бысранған", тип, бер-береңдә һемәйтеү, көлкө яңыртыу йолаһы башҡарыла торған көнө; урыҫтарҙың ысынды ла ялған тип ҡабул итә торған байрамы.**

**Йылмайыу** - үҙеңдә йыл әйләнәһенә май ҡояшындай хис итеү; урыҫса - "улыбка", йәғни ирен салшайтыу мәғәнәһендә.

**Карикатурасы** - әҙәм балаһының көлкөлө, кире сифаттарын ҡарап, күреп алып, һүрәтҡә төшөрөп, шаҡ ҡатырыусы рәссам; урыҫса - "тот, кто из мухи делает слона".

**Көлөү** - ха-ха-оа, хи-хи-ое һымағыраҡ тауыштарҙы ҡаттан-ҡат сығарыу исулы, тауыҡ ҡытҡылдағанына, бейә кешнәгәненә, айғыр ыржайғанына оҡшаш; урыҫсаға "ржать", "скалиться", "строить рожу", тип тәржемә ителә.

**Көлкө** - ауыҙыңды ҡолағына еткәнсе йырҙыра, һынды ҡатыра, эсте тырната, йығылып ятыу хәленә еткерә, илата, хәлде бөтөрә торған, үтә йоғошло тип табылған күренеш; урыҫтар ошо һүҙҙе урыҫса әйтеүҙе гонаһ тип иҫәпләмәй, йәнәһе, "смех - не грех".

**Көлкө ҡапсығы** - ауыҙын асып, бер һүҙ әйтеү менән тирә-яҡтағылар туҡтауһыҙ хихылдай, хахылдай, ихахайлай башлай торған көлкө әйәһе; урыҫса варианты - "шут гороховый".

**Көләмәс** - көлдөргөс; урыҫтар башҡорттарҙың Чапай менән Анна тураһындағы көләмәстәрен анекдот итеп һөйләргә әүәҫ.

**Көләс** - 1. Көл-ҡоромға буялған йөҙөңдөң көҙгөләге сағылышы; 2. Яртылаш көл, үҙе ләс күмәс. Урыҫтар "колобок", тип йөрөтә.

**Ҡаҙан** - теге донъяла гонаһтан ҡарайған йәндәрҙе ҡайнатып агарта торған кер йыуыу агрегаты; урыҫса "казан" була.

**Ҡыҙыҡ** - 1. Күҙ ҡыҙҙырғыс нәмә; 2. Ҡыҙыҡай һүҙенең ҡыҫҡартылған варианты; 3. Башҡорттарҙа көлкө оҫтаһының ҡушаматы. "Яңы урыҫтар" телендә - "косяк".

**Ҡытыҡ** - көлкө кетәге; урыҫтар әлегә бындай һүҙҙе белмәй.

**Ҡытыҡ килеү** - кетәктәге тауыҡтар һымаҡ, бер туҡтауһыҙ ҡытҡылдаһы килеп, көлөп ыҙаланыу; урыҫтар "курам на смех", тиһәләр ҙә, телдәрендә "ҡытыҡ килгәндә кеткелдәп көлөү" тигән төшөнсә юҡ.

**Мәҙәк** - табып алыу менән күҙҙәр йылтырап, ауыҙ йырылып китә торған нәмә; урыҫса - "медяк".

**Мәрәкә** - көлдөрә-көлдөрә кеше башын ҡаңғыртыу; урыҫсаһы - "морока", "шутки скомороха".

**Ожмах** - теге донъялағы коммунизм; урыҫса "шалаш жениха с невестой" тигәнгә тура килә.

**Сатира** - ҡатын-ҡыҙ түгел, сөнки уны бер кем дә яратмай; гонаһ ҡылған әҙәмдең ҡиәфәтен өтөп, ҡыҙарта йә ҡарайта, ә йәнен көйҙөрөп алырҙай һүҙҙәрҙән ғибрәт; сәпкә тейгән уҡтай, сат йәбешеп, гонаһ эйәләренең "ауыҙын йыра" торған нәмә. Урыҫтың "шестерить" һүҙенә яҡын.

**Вәли ИҘРИСОВ төҙөнә.**

(Дауамы бар).

ИНТЕРНЕТТАН



## СӘЙҘЕ ҺЫУЫТЫП ЭС

■ Көнсығыш Финляндия университеты белгестәре омега-6 майлы кислоталары ғүмер оҙайлығына тәьҫир итә, тип раҫлай. Бынан тыш, улар йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмай. Кеше организмын бындай майлы кислоталар менән байытыуҙа туҡланыу ҙур роль уйнай. Уның төп сығанағы - үҫемлек майҙары, сәтләүектәр.

■ Пубертат осоронда гормональ фон үҙгәреп тора, был иһә кешенең үҙен тотошонда ла үҙгәрештәргә килтерә. Шуға ла үҫмерҙәрҙең ҡайһы бер ҡылыҡтарын гормональ үҙгәрештәргә япһарырға күнеккәнбеҙ. Әммә Америка ғалимдары, үҫмерҙәрҙең социаль ҡылыҡтарына гормондар тәьҫир итмәй, тип раҫлай. Буффало университеты белгестәре себер алйырҙандарында һынауҙар үткәргән. Йылы миҙгелдә тыуған был йәнлектәрҙә енси өлгөрөү тиҙерәк бара, уларға хатта 30 көн дә етә һәм улар ошо уҡ йылда нәҫел килтерә ала. Һыуығыраҡ осорҙа тыуған алйырҙандар енси йәһәттән 100-сө көнгә генә өлгөрөп етә. Ә социаль йәһәттән өҫтөнлөк яуларға тырышыу алйырҙандарҙың барыһында ла бер үк мәлдә була, бында енси өлгөрөү йәки өлгөрмәү роль уйнамай. Шуға ла белгестәр үҫмерҙәрҙең социаль ҡылыҡтарына гормондар тәьҫир итмәй, тип белдерә.

■ Балалар йәшелсә ашарға яратмай. Пенсильвания университеты белгестәре уларҙың йәшелсәләргә мөнәсәбәтен үҙгәртеү өсөн тәмләткестәр ҡулланырға тәҡдим итә. Хатта мәктәп ашханалары өсөн дә был бик ҡулайлы. Һынауҙарҙа 100 уҡыусы ҡатнашҡан. Уларға тәүҙә май һәм тоҙ өҫтәлгән төрлө йәшелсәләр тәҡдим ителгән. Һуңынан ошо уҡ йәшелсәләр тәмләткестәр менән бирелгән. Аҙаҡтан ҡатнашыусылар һәр блюдоға баһа биргән. Уҡыусыларға күберәк тәмләткестәр өҫтәлгән брокколи, төҫлө кәбеҫтә, ҡара борсаҡ оҡшаған. Улар мәктәп ашханаһында бирелгән ризыҡтарҙың тәме мөһим булыуын билдәләгән. 4 уҡыусының 3-өһө йәшелсәнең тәме оҡшамаған өсөн ашамай. Бынан тыш, мәктәптә бирелгән йәшелсәләрҙе уҡыусыларҙың яртыһы бөтөнләй ашамай. Дәрсен, ҡара борос, чили поропошогы, орегано, базилик, тмин, карри, шалфей кеүек тәмләткестәр был хәлде ыңғай яҡҡа үҙгәртергә мөмкинлек бирә, тип иҫәпләй белгестәр.

■ Сәйҙе, ҡәһүәне күп эсһәгеҙ ҙә, ҡайнар итеп эсеү ғәҙәтен ташлағыҙ, сөнки ҡайнар эсемлектәр сәләмәтлеккә зыян килтерә, ти белгестәр. Был ҡыҙыл үңәс яман шешенә килтереүе бар. Тикшеренеүҙәр бер юлы бер нисә илдә - Ҡытайҙа, Иранда, Төркиәлә, Көньяҡ Америкала барған. "Кайнар" тип Цельсий буйынса 65 градустан юғарыраҡ температура иҫәпләнә. Күпселек илдәрҙә ҡәһүә һәм мате кеүек эсемлектәрҙе ҡайнар көйөнсә эсәләр. Шул уҡ ваҡытта, ҡәһүә лә, мате ла канцероген эсемлектәргә инмәй. "Эсемлектәрҙең составы түгел, ә уларҙың температураһы хәүеф тыуҙыра", - ти белгестәр. Ҡыҙыл үңәс яман шеше онкологик ауырыуҙар араһында донъяла - һигеҙенсе һәм үлем осрағы менән тамамланыу йәһәтенән бешенсе урында тора. Шуға ла яңы ғына ялған сәй дүрт минут тирәһе торорға, тимәк, һыуынырға тейеш. Шулай уҡ һөт һалып эсеү ҙә яҡшы.

КӨЛКӨФӨ

# БЫҒА БАЙМАҠТАРҘЫҢ ҒЫНА БАШЫ ЕТӘ!

**Бына халыҡ Бөйөк Ватан һуғышына арналған кисәгә йыйылды. Сара һәүетемсә генә башланып китте. Тәүҙә бик йөкмәткеле доклад булды. Унан һуғыш ветерандары һөйләне. Аҙаҡ тыл ветерандарына һүҙ бирҙеләр. Әлбиттә, уларҙың һөйләгәне берәүҙе лә битараф ҡалдырманы. Ысынлап та, улар бик тулҡынланып, ауыр һуғыш йылдарын иҫкә алды. Аҙаҡ Бөйөк Еңеүгә берҙәй тос өлөш индергән һуғыш һәм тыл ветерандарына ҡиммәтле бүләктәр тапшырҙылар. Шунан кисәнең икенсе өлөшө башланып китте. Урындағы һәүәҫкәр әртистәр Бөйөк Ватан һуғышына арналған спектакль әҙерләгәйне. Дөрөҫөн әйткәндә, залда ултырғандарҙың күбеһе ошо спектаклде ҡарар өсөн килгәйне.**



Спектакль бик матур ғына башланып китте. Һәүәҫкәр әртистәр бар тырышлыҡтарын һалып уйнап йөрөйҙәр ине, уйламағанда бер сетерекле хәл килеп тыуҙы. Сәхнәнең иң алдына һәм ҡап уртаһына ултыртылған тауышкөсәйткес эшләмәне лә ҡуйҙы. Халыҡ уны колонка тип атай. Бына шул колонка тик торғанда көҙәләнә башланы. Йә ул бөтөнләй өндәшмәй, йә ҡапылдан ғына бар көсөнә ҡысҡыра башлай. Тамам теңкәгә тейҙе был. Бындай хәлдә бер генә сара бар - уны ҡараштырып, бер аҙ "өшкөрөп" алыр кәрәк.

Күптәр, моғайын, әртистәр халыҡтан ғәфү үтенеп, тамашаны туҡтатып торғандыр ҙа, колонканы йүнәтә башлағандарҙыр, тип уйлағандыр әле. Бәлки, был хәл башҡа урында була ҡалһа, тап шулай итерҙәр ине. Ләкин Баймаҡта түгел. Баймаҡтар был хәлде үҙҙәренсә, баймаҡтарса ғына хәл иттеләр. Тамашаны туҡтатып торманы улар, ә килеп тыуған хәлгә яраҡлаштырып, спектаклде дауам иттеләр.

Бына бер мәл сәхнәлә бер үҙе тороп ҡалған әртист сәхнәнең иң алдына килеп, әлеге лә баяғы колонкаға һуғып, ошолай тип ҡысҡырып ебәрҙе.

- Иптәш командир, бәйләнеш өҙөлдө. Тиҙ арала элемтәсе кәрәк. Әгәр бәйләнеш булдырылмаһа, беҙҙең төркөмдө немецтар һәләк итәсәк...

Әллә залда ултырған халыҡ ишетһен тип, әллә сәхнәнең теге яғында йөрөгән һәүәҫкәр режиссер ишетһен типме, бар көсөнә ҡысҡыра, көсәнә. Ә шулай ҙа уны ишеттеләр, буғай. Сәхнә артында дөбөр-шатыр йүгерешкәндәре, ашығып, ниҙер эшләгәндәре хатта залда ултырыусыларға ла ишетелеп торҙо. Бына бер мәл сәхнәгә шыуышып ҡына ... урындағы электрик килеп сыҡты. Ул әртист түгел, спектаклдә ул уйнамай. Ә шулай ҙа уға әртис-элемтәсе ролен инергә тура килгән. Шуға күрә уға, шартына килтереп, ҡыҙылармеец кейемен кейҙергәндәр. Һәүәҫкәр режиссер үҙенсә бик ҡулай юлын тапҡан. Йәнәһе лә, колонка эшләмәүе спектакль шартына тура килә, был хәл алдан уҡ шулай ҡаралған. Бына шуға әле элемтәсе элемтә булдырыу өсөн шыуышып китеп бара. Эштең айышына төшөнгән халыҡ көлөшә башланы. Аптырағас, сәхнәлә яңғыҙ ҡалған әртис үҙе лә көлә башланы. Бер мәл залда көлөшөү күпкә көсәйә төштө. Бушҡа түгел икән. Баҡтиһәң, апаруҡ араны шыуышып үткән электрик-ҡыҙылармеец кире яҡҡа шыуышып бара икән. Бына һиңә - мә, ул "йылға" аша шыуышып сығып барған икән, шуға кире боролған. Шартына килтереп, сәхнәгә ҡуйылған бәләкәй генә күпер аша шыуышып үтеп, колонкаға саҡ килеп етте ул. Шунан инде тотондо уны соҡорға. Ә сәхнәләге һәүәҫкәр әртис тик тормай, уны ҡабаланды.

- Давай, брат, шәберәк бәйләнеште булдыра һал. Иптәштәр һәләк була бит...

Ә үҙе сәхнәнән дә сығып китмәй. Электрик-әртистең бер үҙен ҡалдырыу ярамаҫ, тип уйлайҙыр инде, күрәһең. Бәхетенә күрә, телгә бай булып сыҡты ул. Сәхнәнең иң алдына килеп баҫып алды ла, ҡулдарын һелтәй-һелтәй, элемтәселәр тураһында һөйләй башланы.

- Бына, күрәһегеҙме, әле беҙҙең алда телгә бик алынып бармаған, китаптарҙа ҡаһарман итеп күрһәтелмәгән һуғыш геройы ята. Ҡарағыҙ, күрегеҙ, уның эше тәү ҡарамаҡҡа ғына ябай. Ә ул бит мөһим эш башҡара. Һуғыш ваҡытында бәйләнеште ваҡытында булдырыу ғына күпме кеше ғүмерен һаҡлап алып ҡалды. Уйланайыҡ әле ошо турала, кешеләр. Кинолар ҙа күргәнебеҙ бар бит, ҡайһы ваҡыт улар тимер сымдарҙы тештәренә ҡыҫып, бәйләнеш булдыра. Бахыр булып түгел, батыр булып үлгән улар. Ундай батырҙар булмаһа, оло еңеү ҙә булмаҫ ине. Бына әле лә беҙҙән ваҡытында хәбәр ала алмаған иптәштәребеҙ аптырашып ултыралыр әле. Шуға, тиҙ арала бәйләнеш кәрәк. Уларҙы һәләк итергә беҙҙең элемтәсе юл ҡуймаясаҡ. Тик үҙе генә токтан-моктан һуғылып, әрәм булмаһа ярар ине, дошман пуляһы йәнен ҡыймаһа ине, бәйләнеште булдыра алһа ине...

Шул арала халыҡ тыйнаҡ ҡына көлөшә башланы. Был көлөшөүҙең тиккә түгел икәнен һәүәҫкәр әртис тә һиҙҙе. Шуға күрә ул ҡапыл ғына электрикка күҙ ташланы. Ә уныһы был ваҡытта... эшен ташлап, күперҙән кире шыуышып сығып бара ине. Еренә еткереп "өшкөрә" алмаға ул колонканы, уныһы барыбер көҙәләнеүен ташламаны. Бындай хәлде көтмәгән һәүәҫкәр әртис барыбер аптырап ҡалманы, яуабын тиҙ тапты.

- Бына, күрҙегеҙме, элемтәсенең эше ниндәй ауыр икәнен. Ямғыр һымаҡ яуған пулялар аҫтында ятып тикшерҙе, ә уныһы, ҡәһәрең, төҙәк булып сыҡты (ул колонкаға һуғып-һуғып алды). Әле элемтәсе уға килгән тимер сым өҙөлгәнме-юҡмы икәнен тикшерә-тикшерә шыуышып китеп бара.

Шул арала электрик-элемтәсе шаршау артына инеп юғалды. Ә беҙҙең герой өмөтлө тауыштар менән уны оҙатып ҡалды. Үҙе теләмәнә лә, тауышы бигерәк моңһоу сыҡты уның.

- Имен-һау ғына әйләнеп кил инде.

Сәхнәлә әртисебеҙ тағы бер үҙе ҡалды. Ә шулай ҙа ул артыҡ бер нәмә лә һөйләп өлгөрмәне. Халыҡ дәррәү көлөшә башлағас, һөйләй башлаған еренән ҡапыл туҡтап ҡалды һәм... үҙе лә көлә башланы. Сөнки сәхнәгә шыуыша-шыуыша таныш электрик-әртис һәм... ауылдағы "һәүәҫкәр-электрик" килеп сыҡты. Уныһына ла, шартына килтереп, ҡыҙылармеец кейемен кейҙергәндәр бит әле. Беҙҙең ысын һәүәҫкәр әртис уныһын әллә танымаған, әллә ҡапылғара албырғанып ҡалды, шуға күрә, үҙе лә һиҙмәҫтән, әйтә ҡуйҙы.

- Бынынһы кем тағы.

Ә шулай ҙа үҙен ҡулға тиҙ алды һәм тапҡыр яуабын таба ла һалды.

- Бәй, танымай ҙа торам. Был бит беҙҙең күрше батальондың элемтәсеһе.

Әртисебеҙ еңел тын алып ҡуйҙы ла тағы әҫәрләнеп һөйләй башланы.

- Бына шулай, иптәштәр, тормошта ла, һуғышта ла, табында ла ысын дуҫтар кәрәк. Уларһыҙ бер нисек тә булмай. Бына бит, күрше батальондың элемтәсеһе иптәшенә ярҙамға килгән, бер ҙә баш тартмаған...

Икәү икәү инде. Күп тә үтмәне, ике электрик колонканы еренә еткереп "өшкөрөп тә" ҡуйҙы. Улар шыуыша-шыуыша кире сығып китте. Ә һәүәҫкәр әртис уларға рәхмәттәрен яуҙыра-яуҙыра, эргәләренән атлап барҙы. Аҙаҡ үҙе еңел тын алып әйтеп ҡуйҙы:

- Иптәш командир, бәйләнеш булдырылды.

Шунан ул, ҙур эш башҡарғандай, халыҡҡа баш эйеп ҡуйҙы. Артабан инде спектакль маражаһыҙ ғына дауам итте һәм һәүетемсә тамамланып ҡуйҙы. Аҙаҡ һәүәҫкәр әртистәр менән бергә теге ике электрик та сәхнәгә сығып, халыҡҡа баш эйҙе. Башҡаларға ҡарағанда халыҡ уларға ихласыраҡ ҡул сапты...

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

*МАТУР ХӘТИРӘ*

# ИҪТӘЛЕКТӘРЕМ...

## көлөү тураһында

Бер көн Мәскәү метроһында ҡайҙалыр китеп барабыҙ. Солтанова Римма ҡысҡырып, бүтәндәр ҙә ишетерлек итеп башҡорт телендә беҙгә нимәләр һөйләй. Мин: "Римма, бүтәндәр аңламай бит, русса һөйлә", - тип уны тәнҡитләйем. Ә Римма: "Бик һәйбәт, аңламаһындар, көнләшһендәр. Улар бер телде генә белә, ә беҙ ике телдә иркен аралашабыҙ, хатта һүҙлек ҡулланып, сит илдәр мәҡәләләрен уҡый алабыҙ. Улар беҙҙе "иностранкалар" тип тә ҡабул итәләрҙер", - тип әйтеп тә өлгөрмәне, бер иҫерек ир: "Это, наверное, хунбен-бийки!"- тине (Ул йылдарҙа Ҡытайҙа "Культурная революция" тип аталған түңкәрелеш бара ине). Бигерәк тә мин, ҡап-ҡара башҡорт балаһы, ҡытай студенттарына оҡшағанмын. Ул ирҙең һүҙҙәрен ишетеп, ҡурҡып, тынып ҡалдыҡ беҙ. Шул саҡ бик йыуан кәүҙәле ҡатын беҙҙе яҡлап: "Матур, ягымлы телдәрендә һөйләшһендәр әйҙә!" - тип әйтеүе булды, теге эсеп алған ир: "А ты молчи, балерина!" - тип екерҙе. Бөтөн вагон халҡы гөр килеп көлә башланы. Әлдә диктор туҡталышты иғлан итеү менән вагон ишектәре асылды һәм беҙ йүгереп сығып өлгөрҙөк. Әлбиттә, беҙҙе яҡлайым, тип, үҙенә эләккән ул илбәтһеҙ, һимеҙ кәүҙәле "балеринаны" йәлләнек...



* * *

Әбыл күмәкләшеп көлөү, беренсе һанлы балалар йортонда, әле беҙ мәктәптә лә уҡымаған саҡта яңғыраны. Тәрбиәсе апай ултырғыстарҙы түңәрәк яһап теҙеп, уларға беҙҙе ултыртты ла, тағы бер ултырғысты түңәрәк уртаһына ҡуйғас: "Балалар, был ултырғыста ултырыусы берәй хәйлә уйлап табып, һеҙҙе көлдөрөргә тейеш", - тип әйтеп, матур уйын өйрәтеп, бүлмәнән сығып китте. Иң беренсе булып Павлик ашығып, йүгереп барып ултырғыска ултырҙы. Ул йә күҙҙәрен аҡайтты, йә телен сығарҙы, йә уңға-һулға бөгөлдө, тик беҙгә ҡыҙыҡ тойолманы, беҙ көлмәнек. Павликтан һуң ап-аҡ сәсле, зәп-зәңгәр күҙле Бөрйән ҡыҙы, яҡташым Маһинур (йылға ярындағы таштар кеүек төрлө-төрлө Бөрйән балалары. Зәп-зәңгәр күҙле, ап-аҡ сәсле, йәп-йәшел күҙле, ерән сәсле, минең кеүек ҡап-ҡара күҙле, ҡара сәсләләр) ултырғысҡа барып ултырыуы булды, ҡысҡырып көлөп тә ебәрҙе. Уның көлөүенә беҙ ҙә ҡушылып, гөр килешеп көлә башланыҡ. Маһинурға "бөтөн төркөмдө көлдөрөргә" тигән вазифа бик ҡыҙыҡлы тойолғандыр. Ул туҡтай алмай көлә, беҙ бөгөлөп көләбеҙ, хатта тәрбиәсе апай ҡурҡып, йүгереп килеп инде лә, борсолорлоҡ сәбәп юҡ икәнен күреп, тынысланып, беҙгә ҡушылып көлөп алды. Шунан: "Йә, тағы ла кем бөтөн төркөмдө көлдөрә алыр?" - тип һораны. Тик бер кем дә Маһинурҙан да оҫта көлдөрә алыуына ышанмағандыр, шуға үҙе матур, үҙе ҡыҫҡа уйын тамамланды.

Яҡташым Маһинурҙың бер һүҙ ҙә әйтмәй, сәйер ҡыланмай, ихлас көлөүе, беҙҙе лә көлдөрөүе, әлбиттә, ғүмергә иҫтә ҡалды. Әле лә был иҫтәлегемде яҙғанда йылмаям...

* * *

Бик күптән булды был хәл. Әле һаман иҫемә төшөрөп, йылмайып алам. Ирем менән Кудеевка кирбес заводына командировкаға барып, электричкала Өфөгә ҡайтып бара инек, туҡталыштарҙы иғлан итеүсе: "Остановка "Чуваш-Куба", - тине. Бер ҡатын янында ултырған ирҙән: "Ни сәбәп менән бындай атама биргәндәр, нимәне аңлата ул?" - тип һораны. Ир ҡыҫҡа ғына итеп: "Сыуаштар күп бында, тигән һүҙҙәр ул", - тип аңлатыуы булды, һорау биреүсе ҡатын ҡысҡырып көлөп ебәрҙе, уға яҡында ултырғандар ҡушылып көлә башланы. Был ҡатындың көлөүе шундай йоғошло булып сыҡты, уның ни сәбәп менән көлөүен белмәгәндәр ҙә уға ҡушылдылар. Ә ул ҡатын, "Сыуаштар күп", тип ҡабатлай ҙа, тағы ҡысҡырып көлә башлай. Уға тағы бар халыҡ ҡушыла. Шулай күҙ йәштәребеҙҙе һөртә-һөртә бик оҙаҡ көлөштөк. Сәбәбен белмәй көлөүселәрҙең дә күңелдәре күтәрелеп, ниндәйҙер рәхәтлек кисергәндер, тип уйланым мин...

Бына шулай, дуҫ булып, ихлас көлөшөп йәшәргә яҙһын беҙгә киләсәктә лә.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!*

# КҮНЕКМӘЛӘР ЯРҘАМ ИТТЕ



**Ғәҙәттә, кем менәндер осрашһаҡ, иң элек хәл-әхүәл белешәбеҙ. Һуңғы ваҡытта ҡайһы бер осраҡта "Хәлдәрең нисек?" тип ник һораған көнгә төшәһең. Шунда уҡ зарланыуҙар башлана.**

Күптән түгел генә үҙем дә шундай хәлгә тарый яҙҙым. Һин дә мин йөрөгәндә, ҡапыл уң ҡулым ауырта башланы, ҡулбаштан ҡыбырлатып та булмай, терһәктән саҡ бөгөп, эсемде ҡосаҡлап ҡына йөрөйөм. Дауаханаға барып тикшерелгәс, шунда уҡ, операцияға, тип, анализдар тапшырырға ҡуштылар. Күңел бер ҙә генә операция тигәнде ҡабул итмәй, ләкин ҡулды ла ҡыбырлатып та булмай. Йөрөйөм шулай ни эшләргә белмәй, баш ҡатырып. Яйлап анализдар тапшырып бөттөм. Шул ваҡытта бер танышымды осраттым. Уның менән хәл-әхүәлдәр һорашып, үҙемдең хәлдәр менән таныштырҙым. Ә ул иҫе китмәй генә: төрлө үҙәктәрҙе рекламалайҙар бит, барып ҡара ине", - тип әйтеп ысҡындырҙы. Аптыраған өйрәк арты менән һыуға сума, тигән кеүек, операцияға тиклем бөтөн ысулдарҙы ла ҡулланып ҡарайым әле, тип, тәүәккәлләнем.

Бер үҙәккә барып, проблеманы һөйләп биреп, рентген һүрәтен күрһәттем. Көлөштөләр ҙә, бер бүлмәгә алып инделәр. Уң ҡулыңа ошо ҡулсаны ал, тиҙәр. Көләһегеҙме әллә, мин бит ҡулымды бөтөнләй күтәрә алмайым, тием. Артыҡ иркәләтеп торманылар, ҡулымды күтәрҙеләр ҙә ҡулса тотторҙолар. Ауыртыныуҙан ҡысҡырып ебәрҙем, күҙҙән уттар күренде. "Хәҙер бына шундай күнегеүҙәр эшлә", - тип күрһәтәләр. Ауыртыныуҙан ҡысҡырып ебәреүҙән саҡ тыйылып, күнегеүҙәрҙе эшләргә тырышам. Бер аҙ ваҡыт үткәйне, ҡулымдың ауыртыуы ла бөттө, һин дә мин ҡыбырлап, бына тигән хәрәкәтә килә башланы. Оҙағыраҡ эшләгән һайын ҡулым йылдамыраҡ ҡыбырлай... Бер нисә килеүҙән һуң ауыртыу бөтөнләй бөттө.

Бына шулай, операцияға тигән ерҙән, осраҡлы ғына проблемаға хәл итеү юлы табылды. Хәҙер көн һайын гимнастика эшләп, организмды, быуындарҙы, мускулдарҙы нормаль тороштa тоторға тырышам. Һаулыҡтың ҡәҙерен уның бар сағында ғына белмәйбеҙ икән, шуны һәм күнекмәләрҙең ысынлап та ышаныслы дауалау сараһы икәнен аңларға ярҙам итте был хәлем.

**Шәфҡәт БУРАНБАЕВ.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# КИВИ АШАР ӨСӨН...

## биш сәбәп



**С витамины. Уртаса кивиҙа 92,7 мг аскорбин кислотаһы бар. Билдәле булыуынса, был витамин - көслө антиоксидант, талсығыуға юл ҡуймай, иммунитетты нығыта, коллаген барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итә, ялҡынһыныу һәм ҡан һауыу үҫеше хәүефен кәмемә.**

В витамины С витамины менән берлектә бер-берәһенең тәьҫирен көсәйтергә һәләтле. В төркөмө витаминдары (атап әйткәндә В1 һәм В2) нервылар системаһының нормаль эшләүенә булышлыҡ итә, матдәләр алмашыныу процесына йоғонто яһай.

Кивиҙа булған фолий кислотаһы анемияны булдырмай һәм лайлалы тиресәләрҙең зыянланыуынан һаҡлай. Фолий кислотаһы бала табыуҙы планлаштырыу алдынан һәм йөклөлөк ваҡытында бик мөһим.

Йөрәк-ҡан тамырҙары эшмәкәрлегенә йоғонто яһаған калий кивиҙа 3 г, ә уның сәләмәт кеше организмы өсөн талап ителгән тәүлек миҡдары 3-4 г. Был микроэлементҡа ихтыяжды тулыландырыу арҡаһында киви ҡулланыу гипертонияны, шешенеүҙе, йоҡо килеүҙе һәм мускулдарҙың хәлһеҙләнеүенә юл ҡуймай.

100 г кивиҙа булған магний - ул организмдың тәүлек ихтыяжының ҡап яртыһы. Әгәр кешелә ҡороштаҡ, нервылар тартышыуы, быуыусы ауыртыныу, һауа торошона һиҙгерлек күҙәтелә икән, рационға мотлаҡ киви индерергә кәрәк. Шулай уҡ магнийҙың ҡартайыу процесын әкренәйтеүе билдәле.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Үҙгәреү ваҡыты килгәндә һин яңғыҙ түгел!

Беҙ был ергә тирә-яҡтағыларҙы түгел, ә үҙебеҙҙе үҙгәртеү өсөн килгәнбеҙ. Тышҡы донъяла проблемаларҙы хәл итеү юлдарын тапмаясаҡһығыҙ, барлыҡ проблемалар - беҙҙән үҙебеҙҙә.

Ҡайһы бер ваҡыт эшкә барғанда барыһы ла һинең үлемеңде теләгән кеүек тойола. Өйөңдән асыулы сығаһың, кемдер юлыңды ҡыйып үтә йәки кюветка ҡыҫырыҡларға тырыша. Эштән кәйефең ҡырылып сығаһың - мотлаҡ кемдер транспортта этептөртә. Әммә был тороштоң киреһе лә барғашиҡ булғанда тормош ни тиклем матур!

Донъя - ул көҙгө. Йәғни эстән нимә тояһың, тыштан шуны алаһың. Тап шул сәбәпле, тыштағыны үҙгәртергә тырышып, тормошоңдо яҡшыртыу мөмкин түгел. Әгәр урамда кешеләр һине яратмай икән, икенсе маршрут менән йөрөй башлауҙың мәғәнәһе юҡ. Әгәр эшеңдә ихтирам итмәйҙәр икән, эшеңде алмаштырыуҙан фәтеүә сыҡмай, сөнки бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк.

Күбебеҙ донъяны киреһенсә аңларға өйрәнгән. Беҙ: "Әгәр эшең оҡшамай икән, алмаштыр. Ҡатының оҡшамаһы - икенсене эҙлә", - тибеҙ. Әлбиттә, ҡайһы бер осраҡтарҙа эшеңде йәки партнерыңды алмаштырырға кәрәк. Әммә үҙеңдең уйҙарыңды үҙгәртмәһәң, шул уҡ хәлдә йәшәйәсәкһең.

Ниндәй генә хәл-торошта ҡалмайыҡ, бер нәмәне аңларға кәрәк: тормош беҙҙе нимәгәлер өйрәтер өсөн ошо ситуацияға ҡуйған. Сөнки беҙ донъяға белем алыр өсөн тыуғанбыҙ! Аллаһы Тәғәләнән килеп тыуған хәл-торошто үҙгәртеүен һорап ялбарыуҙан мәғәнә юҡ. Әгәр үҙең үҙгәрмәһәң, проблемаларың бер ҡайҙа ла китмәйәсәк.

"Аллаҡайым, зинһар, тормошомдо үҙгәрт", тиһәк, тимәк, был тормошта әле бер нәмә лә аңламайбыҙ. "Миңә үҙгәрергә һәм хәл-торошҡа яңыса ҡарарға ярҙам ит!" тип, хәл-торошҡа мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртеп кенә уны ысынлап үҙгәртә алабыҙ.

Тәү ҡарашҡа, барыһы ла мистикаға оҡшаған. Әйҙәгеҙ, улайһа, мәсьәләгә физиктар күҙлегенән ҡарайыҡ. Өс йөҙ йыл элек Ньютон, донъяның барлыҡ объекттары - билдәләнгән һәм үҙгәрмәүсе ысынбарлыҡ, тип белдергә. Әммә хәҙерге квант физикаһы һәм Гейзенбергтың билдәһеҙлек принцибы икенсе төрлө һөйләй: күҙәтеүсенең ҡарашы күҙәтеү объектына йәки күренешкә аныҡ үҙгәрештәр индерә!

Былардың барыһының да беҙҙең көндәлек тормошобоҙға ни ҡыҫылышы бар? Бар шул: фән, ниһайәт, бөйөк рухи остаздарыбыҙ һөйләгән бөтөн нәмәгә раҫлау таба: объекттар йәки хәл-ваҡиғаларҙы күҙәтеп, беҙ уларҙы үҙгәртәбеҙ. Уйҙарыңды үҙгәртһәң, тормошоң да үҙгәрер. Эске донъяңды үҙгәртеп кенә тормошоңдо яйларға мөмкин. Тирә-яҡтағылар үҙҙәрен яҡшы тоторға һәм һиңә яҡшы мөнәсәбәттә булырға өйрәнгәс кенә йәшәү яҡшыраҡ буласағына ышаныу - мәғәнәһеҙ. Үҙең яҡшы яҡҡа үҙгәрмәй тороп, тормош үҙгәрмәйәсәк.

Ҡыҫҡаһы, кешеләрҙе үҙгәртергә тырышма, үҙеңде үҙгәрт.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



### 2 АПРЕЛЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.30 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тот, кто читает мысли (менталист)". 9-я и 10-я серии. Детективный сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00, 03.05 "Секретарша". Детективный сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Компромат". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Одна жизнь на двоих". 9-я и 210я серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Неподкупный". Криминальный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Братья Карамазовы". Сериал (16+).**
**11.00 Итоги недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.00 "Наши годы" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Бай банса" (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Бизнес-проба" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Спортбар".**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**24.00 "Странные родственники". Худ. фильм.**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

### 3 АПРЕЛЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят!" Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тот, кто читает мысли (менталист)". 11-я и 12-я серии. Детективный сериал (16+).
23.25 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
24.00 "Секретарша". Сериал (16+).
02.00, 03.05 "Роман с камнем". Комедия (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Сердечная недостаточность". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Одна жизнь на двоих". 11-я и 12-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым". Ток-шоу (12+).
01.50 "Неподкупный". Криминальный сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Братья Карамазовы". Сериал (16+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Орнамент".**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Башкорт йыры представляет..." (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "16 желаний". Худ. фильм.**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

### 4 АПРЕЛЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тот, кто читает мысли (менталист)". 13-я и 14-я серии (16+).
23.25 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
24.00 "Секретарша". Сериал (16+).
02.00, 03.05 "Жемчужина Нила". Комедия (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Лишние люди". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
21.00 "Одна жизнь на двоих". 13-я и 14-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым". Ток-шоу (12+).
01.50 "Неподкупный". Детективный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Братья Карамазовы". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра".**
**17.00 "Моя республика" (12+).**
**17.45 "Орнамент" (6+).**
**18.00 "Башкорттар" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Алтын тирма".**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Бала-сага" (6+).**
**24.00 "Безумные деньги". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

### 5 АПРЕЛЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 03.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тот, кто читает мысли (менталист)". 15-я и 16-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 "Ангел, спасший мне жизнь". К юбилею Станислава Любшина (12+).
01.10, 03.05 "Секретарша". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Париж". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Одна жизнь на двоих". 15-я и 16-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Неподкупный". Детективный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Братья Карамазовы". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ" (6+).**
**15.45 "Кош юлы. Балалар" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "Зимние каникулы Майка" (12+).**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Үткән гүмер" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башкорттар" (6+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Квартет". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

### 6 АПРЕЛЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00, 04.55 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон.
23.15 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 К юбилею Станислава Любшина. "Пять вечеров".
02.10 "Линкольн". Историческая драма (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Добрый человек". Детективный сериал (12+).
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Юморина". Юмористический фестиваль (16+).
23.50 "Папа для Софии". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Владимир Меньшов. С ним же по улице нельзя пройти" (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 М.Шарт. "Мою жену зовут Морис" (12+).**
**14.15 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-сага" (6+).**
**15.30 "Сыйырсык".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.15 "Байык-2018" (12+).**
**24.00 "Плохой лейтенант". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

### 7 АПРЕЛЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Печки-лавочки". Худ. фильм.
06.00, 10.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.15 "Наталья Кустинская. Красота как проклятье" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Путь Христа".
14.10 К юбилею Элины Быстрицкой. "Звезда эпохи" (12+).
15.10 "Дети Дон Кихота". Худ. фильм (12+).
16.40 "Илья Резник. "Который год я по земле скитаюсь..." (16+).
17.45, 18.15 "Юбилейный вечер Ильи Резника".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
23.30 "Двое и одна". Худ. фильм (12+).
01.20 Пасха Христова. Прямая трансляция богослужения из Храма Христа Спасителя.
04.30 "Если можешь, прости..." Худ. фильм.

### РОССИЯ 1

04.40 "Срочно в номер!" Сериал (12+).
06.35 Мультутро "Маша и Медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00, 11.20 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному".
10.10 "Пятеро на одного". Телеигра.
11.00 "Вести".
11.40 "Измайловский парк" (16+).
14.00 "Лаванда". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Привет, Андрей!" Вечернее шоу (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Лидия". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.20, 04.30 "Сказки мачехи". Сериал (12+).
01.30 Пасха Христова. Прямая трансляция Пасхального богослужения из Храма Христа Спасителя.

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Эрнест и Селестина: приключения мышки и медведя".**
**09.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**10.00, 22.00 "Свой вес" (16+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "У дачи" (12+).**
**11.45 "Замандаш" (12+).**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 "Учим башкирский язык" (6+).**
**13.15 "Орнамент" (6+).**
**13.30 "Бай бакса" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байык-2018" (12+).**
**17.00 Концерт Родиона Муртазина (12+).**
**19.00 "Колесо времени" (12+).**
**20.00 "Весело живем" (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**21.00 "Следопыт" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.30 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Иисус Христос и его церковь".**
**23.45 Пасхальное богослужение из Кафедрального собора Рождества Богородицы г.Уфы.**

### 8 АПРЕЛЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Доброе утро". Худ. фильм (12+).
07.50 "Смешарики. ПИН-код".
08.05 "Часовой" (12+).
08.35 "Здоровье" (16+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым (12+).
10.15, 12.20 "Крещение Руси" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
14.20 "Верные друзья". Комедия.
16.25 "Святая Матрона. "Приходите ко мне, как к живой" (12+).
17.30 "Бриллиантовая рука". Комедия.
19.25 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр (16+).
23.40 "Белые ночи почтальона Алексей Тряпицына". Драма (16+).
01.30 "Буч Кэссиди и Санденс Кид". Худ. фильм (12+).
03.35 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

06.45 "Сам себе режиссер".
07.35, 03.25 "Смехопанорама".
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному".
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.25 "Смеяться разрешается" (16+).
14.00 "Огонь, вода и ржавые трубы". 4 серии. Драматический сериал (12+).
18.30 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя птица - Последний богатырь". Сказочный сезон.
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Березка". Красота на экспорт".
01.30 "Право на правду". Детективный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 Сборник советских мультфильмов.**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 Пасхальное послание митрополита Уфимского и Стерлитамакского Никона.**
**10.15 "Выше всех!" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Байтус" (6+).**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (12+).**
**12.30 Итоги недели (на башк.яз.).**
**13.15 "Орнамент" (6+).**
**13.30 "Үткән гүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Башкорттар" (6+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30, 01.00 "Бархатные ручки". Худ. фильм (16+).**
**18.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**18.30 "Кош юлы. Балалар" (6+).**
**18.45 "Һылыукай-2018" (12+).**
**20.45 "Моя Республика" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**

✔ *Аҡ төҫ ҡояш нурын сағылдырып, олонға "ууаныу" температураһына тиклем йылыныrға мөмкинлек бирмәй. Һуңыраҡ "уянған" ағастың сәскәләрен ҡырау һуҡмай, сөнки улар ҡырауҙарҙан һуңыраҡ сәскә атасаҡ.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ШАЯН КЕШЕ - ЯҠШЫ КЕШЕ




Фәйрүз ИШБАЕВ төҙөнө.

**10-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Айпад. Ҡушаева. Тапҡырға. Тагард. Бәрҙе. Йорт. Еропол. СШОР. Өләсәһе. Мурт. Ләлә. Емеш. Лакшми. Аршын. Амели. Әләм. Рига. Ырат. Әүәл. Литр. **Вертикаль буйынса:** Биишева. Терегөмөш. Елкәһенә. Ҡырҡ. Ләйсән. Ынйы. Йәштәр. Шамбы. Сел. Ролл. Артыш. Ерса. Диван. Тарт. Тимерғәлина. Мәкер. Асып. Дәүләтшина.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Март айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Өфө ҡалаһынан** Лилиә Нафиҡова, Рина Мөслимова, Таңһылыу Хәсәнова, **Стәрлебаш районы** Табылды ауылынан Салауат Вәхитов һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ!

Ғүмерҙе йылдар билдәмәй ул, иң мөһиме, һәр ваҡыт үҙегеҙҙе йәш, матур, сәләмәт итеп тойоғоҙ, һәр көнгә ҡыуанып ҡына йәшәгеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

БАҠСА

# ОЛОН АҒАРТЫУ



**Ағас олондарын ағартыу бик мөһим эш. Беҙҙә ағартылған ағастар - яҙғы өмәләрҙең бер билдәһенә генә әүерелеп бара. Әммә был матурлыҡ өсөн эшләнмәй. Баҡсалағы ағастарҙың олонон аҡлау май айында түгел, ә әле башҡарылырға тейеш.**

Ағастың ҡайырыһы ағасты һауа температураһының үҙгәреүенән, елдән, ҡояштан, ҡоротҡостарҙан һаҡлай. Ҡояшта янған, һыуыҡта өшөгән олондо шунда уҡ танып була, ул ярылып тора, ҡытыршылана. Ошо ярыҡтарҙан эскә инфекциялар һәм ҡоротҡостар үтеп инһә, ағас ваҡытынан алда һәләк буласаҡ. Шуға ла ағас ҡайырыһын һаҡларға кәрәк. Бына шуның өсөн дә беҙ уны ағартып ҡуйырға тейешбеҙ.

Ҡарт ағастарҙы ла, йәштәрен дә ағарталар. Йәш ағастарҙың ҡайырыһы йоҡа, эзбиз иҙелмәһе уны яндырыуы ихтимал. Шуға ла йәш ағастар өсөн иҙелмәлә эзбиз күләмен кәметергә кәрәк булыр. Һыуға иҙелгән буяуҙар ҙа ағас олонон аҡлау өсөн бара. Был эште, гәҙәттә, йылына ике тапҡыр башҡаралар: көҙөн һәм яҙын. Көҙ октябрь-ноябрь, яҙ февраль аҙағы-март ҡулай. Шуға ла хәҙер уҡ сығып ағастарҙың олонон ағартыу фарыз. Сөнки сағыу ҡояш нурҙары ағастың олонон йылытып, уны "уята" башлай. Ә төндәрен әлегә яраһыҙ һыуыҡ, олон буйлап йүгерә башлаған һут туңа һәм олон ярыла. Аҡ төҫ ҡояш нурын сағылдырып, олонға "ууаныу" температураһына тиклем йылынырға мөмкинлек бирмәй. Һуңыраҡ "уянған" ағастың сәскәләрен ҡырау һуҡмай, сөнки улар ҡырауҙарҙан һуңыраҡ сәскә атасаҡ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ИҒЛАН

Редакцияға тәжрибәле **водитель** һәм башҡорт телен яҡшы белгән **версткалаусы инженер** талап ителә. **253-25-44** телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Апрель (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 2 (15) дүшәмбе | 5:18 | 6:48 | 13:30 | 18:22 | 19:52 | 21:22 |
| 3 (16) шишәмбе | 5:15 | 6:45 | 13:30 | 18:24 | 19:54 | 21:24 |
| 4 (17) шаршамбы | 5:13 | 6:43 | 13:30 | 18:26 | 19:56 | 21:26 |
| 5 (18) кесе йома | 5:10 | 6:40 | 13:30 | 18:28 | 19:58 | 21:28 |
| 6 (19) йома | 5:08 | 6:38 | 13:30 | 18:30 | 20:00 | 21:30 |
| 7 (20) шәмбе | 5:05 | 6:35 | 13:30 | 18:32 | 20:02 | 21:32 |
| 8 (21) йәкшәмбе | 5:03 | 6:33 | 13:30 | 18:34 | 20:04 | 21:34 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**31 март "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама 16+

**1 апрель "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

**3 апрель "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, Ш. Ғилманова инц.) 16+

**4 апрель "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+

**5 апрель "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры 12+

**6 апрель Рәмзиә Хисамованың** юбилей кисәһе 6+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**1 апрель "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 12.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**6 апрель "Ҡоҙағый"** (Р. Назарғолова), мелодрама 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**31 март, 1, 3, 5 апрель "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). Башлана 16.00 0+

**31 март "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). Башлана 12.00, 14.00 6+

**1 апрель "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен). Башлана 12.00, 14.00 0+

**6 апрель "Хроники путешествия Нильса"** (И. Әлмөхәмәтов). Башлана 18.00 6+

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ГЕЛ ЙЫЛМАЙЫП ЙӨРӨЙӨМ...



**1 апрель - Көлкө көнөндә һәр кем шаяртырға, башҡаларҙы көлкөгә ҡалдырырға тырыша. Бының бер кире яғы ла юҡ, шаярта белеү, шулай уҡ шаяртыуҙы аңлай һәм күтәрә алыу кешенең күркәм сифаттарынан иҫәпләнә. Шаян кеше - яҡшы кеше, ти халыҡ мәҡәле лә. Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының "Көлкө шоу" эстрада миниатюралары театрының һөйләү жанры актеры Фәнил ҠАРАСУРИН менән ошо көн уңайынан һөйләшеп алдыҡ.**

**Көлкө жанрында эшләүсе актерҙар өсөн һәр көн - көлкө көнө һымаҡтыр. Гел күңелсәк булыуы ауырмы?**

- Юмор жанры - бик еңелдән түгел, ә комик актер тигән исемгә лайыҡ булыу өсөн ҙур тырышлыҡ кәрәк. Өфө дәүләт сәнғәт институтында драма актеры булараҡ белем алһам да, үҙемде ошо өлкәлә һынап ҡарарға булдым. Кешене көлдөрөп, кәйефен күтәреп ебәреү ҙур кинәнес ул. Холҡом менән дә күңелсәкмен, нишләптер ауыҙ гел йырыҡ минең. Ҡайһы саҡта: "Ниңә гел йылмайып йөрөйһөң ул?" - тип һорайҙар. "Гел йылмайып йөрөмә әле!" - тигәндәре лә бар. Көлһәң, минән көләһәңме, тип борсола күптәр, асыуланалар ҙа.

Бер ҙә генә етди була белмәйем, әммә быны махсус рәүештә лә эшләмәйем. Кәләш башта, ҡасан шаярып, ҡасан дөрөҫөн һөйләйһең ул, аптырай ине. Дуҫтар араһында ла көлдөрөп алам. Йәш үтә барыу менән дә һыпырып ҡына ташлай торған гәҙәт түгелдер ул был сифат. Әммә мине яраткан актерым Андрей Мироновтың бер интервьюһында әйткәне уйға һалды. Ул тормошта ла гел шаярырға, дуҫтары араһында уйнарға ярата. Шулай бер саҡ ниндәйҙер режиссер, тормошта улай күп уйнама, был энергия сәхнәгә лә ҡалһын, тип кәңәш итә. Бында ла хәҡиҡәт барҙыр.

**Башҡорт юморы ниндәй булырға тейеш?**

- Ауылдарҙа әле лә тыумыштан артист булған ағайҙар күп, быны уларҙа халыҡсан юмор, исмаһам. Гастролдәрҙә шуларҙың лаҡаптарын йыйырға ине, тип уйлап алам. Беҙҙең Ейәнсурала ла күп ундайҙар. Бер олатайым бар, элек колхоздың һарыҡтарын көткән мәлдә, сменаһы тамамланған да, төшкөләккә һарыҡтарын бикләп, ҡайтырға сыҡҡан. Ҡараһа, тағы бер һарыҡ көтөүе йөрөй, ә көтөүсеһе аҫтараҡ сәй эсеп ята, ти. Ҡыҙыҡ күреп, көтөүҙе тауышланмай ғына ҡыуып, тау башына мендергән дә, ҡысҡырып, эттәрен һөсләтеп, кире төшөрөп алып килә икән. Теге көтөүсе ҡаршы сыҡҡан. Улар араһында "Һаумы!", "Һаумы", "Нишләп йөрөйһөң?" "Көтөү көтөп йөрөйөм", "Көтөүең ҡайҙа?", "Аҫтараҡ, һарыҡтарың минекенә ҡушылып ҡуймаһын тип йүгереп сыҡтым әле", тигәнерәк ҡыҫҡа ғына әңгәмә була. Йыбанмай олатай, бер башлаған, эште азағына еткерергә була, көтөп йөрөй теге көтөүҙе. Бер ваҡыт теге көтөүсе һыбай тегеләй, былай сабып, һарыҡтарын эҙләй икән. Әйтеүе генә анһат, мендән ашыу колхоз һарығы юғалһын әле! Аты шыр күбек булғас ҡына аңлап ҡала шаяртыуҙы. Бына был беҙҙең башҡорт юморы инде...

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАШҠОРТ ҠЫҘҘАРЫ...

## һылыулыҡта бәйге тотто

**Өфөлә иң гүзәл башҡорт ҡыҙын һайланылар. Әлшәй районынан 20 йәшлек Әлфинә Кашапова "Һылыуҡай-2018" исемен яуланы. Ҡыҙға "Лада Гранта" автомобиле аҫҡысын тапшырҙылар.**



"Мин бик шатмын һәм ойоштороусыларға, яҡындарыма һәм минең өсөн янып-көйгәндәрҙең барыһына ла сикһеҙ рәхмәтлемен, - тине республиканың беренсе һылыуҡайы. - Водитель таныҡлығым бар, машина йөрөтөргә беләм". Өфө дәүләт авиация техник университетының информатика факультетында өсөнсө курста уҡыусы Әлфинә Кашапова шулай уҡ "Матбуғат һылыуҡайы" номинацияһындағы бүләккә лә лайыҡ булды. "Әлфинә - бик һәйбәт, лайыҡлы ҡыҙ, жюри ҡарары менән ризамын. Ул бер йыл дауамында ғына түгел, ғүмер буйы республиканың төп һылыуҡайы исемен намыҫлы йөрөтөр тип ышанам", - тип билдәләне "Bashkirian Beauty" студияһы директоры Линара Таһирова.

Республикалағы башҡорт һылыуҡайҙары бәйгеһе быйыл Ғаилә йылына һәм 2020 йылда үтәсәк Бөтә донъя Фольклориадаһына арналды. Бер ай дауамында Өфөнән, Мәскәүҙән, Әлшәй, Ауырғазы, Балаҡатай, Бишбүләк, Бөрйән, Ейәнсура, Ҡыйғы, Көйөргәҙе райондарынан 12 ҡыҙ үҙҙәренең һәләттәрен һәм оҫталыҡтарын шымартты. Ҡыҙҙар көн һайын Башҡортостан юлдаш телеканалының "Һылыуҡай көндәлеге"ндә эфирға сыҡты. Финалдағы сарала сибәрҙәр матурлыҡтарын, фекерләү һәләтен һәм әҙәби башҡорт теле менән һөйләшеү оҫталығын күрһәтте.

Ейәнсура районынан Назгөл Әйүпова - беренсе урын һәм "Иң алсаҡ һылыуҡай" номинацияһында, Балаҡатай районынан Илзирә Әсмәндийәрова - икенсе урын һәм "Тамыр" һылыуҡайы" номинацияһында, Бишбүләк районынан Эльвина Ғәзизуллина өсөнсө урын һәм "Нәзәкәтле һылыуҡай" номинацияһында бүләкләнде.

"Интернет һылыуҡайы" номинацияһында интернет-тауыш биреү барышында иң күп тауыш йыйған Гүзәлиә Ишмөхәмәтова еңеүсе булды. "Дуҫлыҡ һылыуҡайы" номинацияһына - Розалина Ғисмәтуллина (Көйөргәҙе районы), "Оҫта ҡуллы һылыуҡай"ға - Азалия Заһитова (Мәскәү), "Һөйкөмлө һылыуҡай"ға - Зилә Ғатауллина (Ҡыйғы районы), "Bashkirian Beauty 2018 һылыуҡайы"на - Аделия Фәйзуллина (Өфө), "Моңло һылыуҡай"ға - Гөлсиә Нәзершина (Бөрйән районы), "Өмөт һылыуҡайы"на - Гөлдәр Смакова (Ауырғазы районы), "Fashion Һылыуҡайы" номинацияһына Зөһрә Муллагилдина (Өфө) лайыҡ булды.

Сараны Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы менән берлектә Республика халыҡ ижады үҙәге, "Bashkirian Beauty" студияһы ойошторҙо.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҺҮҘЕНӘН ҠАЙТҠАН - ИР ТҮГЕЛ

Тауыш сығарған тура һүҙҙән татыулаштырған ялған хәйерле, имеш.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле)**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бик матур һарайҙа Шраван тигән принц йәшәгән. Ул байлыҡ һәм муллыҡ, шуның өҫтәүенә матурлыҡ һәм төҙөклөк яратҡан. Үҙенең ҡалаһын туктауһыҙ биҙәгән, төҙөкләндергән, уны иң матур ҡалаларҙың береһенә әүерелдергән. Ләкин берҙән-бер көндө был эштәр уны туйҙырыуын аңлаған. Шул мәлдә генә уның ҡалаһына Будда килгән. Шраван уның эргәһенә барған, вәғәҙәрен тыңлаған һәм ҡапыл ғына Будда эргәһендә йөрөгән монахтар рәтендә ҡалырға ҡарар иткән. Принцтың был ҡарарына барыһы ла аптыраған. Әле генә ҡатын-ҡыҙ һәм шарап менән күңел асыуҙан башы сыкмаған принцтың нисек дин юлынан китеүе мөмкин, тип уйлағандар. "Һин уны берәй нимә эшләтеңме әллә?" тип һорағандар Будданан. "Мин уның менән бер ни ҙә эшләмәнем, - тигән Будда. - Кешенең аҡылы шулай бер сиктән икенсеһенә күсенергә мөмкин, әлбиттә. Был аҡылдың көҙимге юлы. Кеше байлыҡҡа сумып, аҡылдан яҙған, хәҙер байлыҡтан баш тартып аҡылдан яҙа... Бынының ла аҡылһыҙлыҡ..." Шулай итеп, Шраван монах булып китә. Эргәһендәгеләр уның бер сиктән икенсеһенә ташланғанын ситтән генә күҙәтә башлай. Будда уҡыусыларын бер ваҡытта ла яланғас йөрөргә өйрәтмәй, ә Шраван яланғас йөрөй. Будданың бар уҡыусылары ла көнөнә бер тапҡыр ашай, ә Шраван көн аша бер ашай. Башҡалар ағас күләгәһе аҫтында доға ҡылһа, Шраван ҡояш аҫтында ултырып доға ҡыла. Элек ул бик матур һәм ап-аҡ йөҙлө булһа, алты ай эсендә уны танырлыҡ та булмай. Ябыға, тән тиреһе тупаҫлана. Бер көн кис Будда Шраванға килә һәм: "Шраван, һин монахлыҡҡа киткәнсе музыкант булғанһың, гитарала уйнағанһың икән. Шуға мин һиңә бер һорау бирәм: гитараның ҡылдарын бушатҡанда нимә була?" "Гитараның ҡылдарын бушатһаң, унан бер ниндәй ҙә көй сыкмай", тип яуап биргән Шраван. "Ә ҡылдарҙы бик нык тарттырғанда нимә була?" "Ул саҡта ла көй сыкмай. Көй сыкһын өсөн ҡылдар бушаҡ та, тарттырылған да түгел, ә уртаса булырға тейеш. Гитарала уйнау ауыр түгел, әммә уның ҡылдарын бары тик оҫталар ғына дөрөҫ көйләй ала. Бында алтын урталыҡ кәрәк", тип яуаплаған Шраван. Будда аҙаҡ шулай ти:" Мин дә һине алты ай күҙәткәндән һуң шуны уҡ әйтергә теләгәйнем. Үҙеңдән ниндәйҙер көй сығарырға теләһәң, ҡылдарыңды бушатма ла, тарттырма ла, уртасаға көйлә. Оҫта бул. Артыҡ көс һалып көсәнеү үҙеңде туҙҙырыуға, ә артыҡ бушаныу көсһөҙлөккә килтерә. Үҙеңде уртаса бер кимәлгә көйлә, шул саҡта ғына маҡсатыңа өлгәшерһең..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 30 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 563/03